ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 август (урағай) 2016

№32 (710)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өфө уҡыусылары...**



имтихандарҙы яҡшы тапшырҙы 4-5

**Уҡыу йортобоҙ...**

үҙ йолалары менән көслө




6

**Ат өҫтөндә саҡта...**



ысын асылыма ҡайтам 8-9

**Баҫалҡы булһаҡ та...**

майҙанда һүҙ әйтергә өйрәнәйек




12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 июлдән 30 августа тиклем 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителде. Хаҡтар 2016 йылдың икенсе яртыһындағыса, йәғни 50665 индекслы гәзитебеҙгә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо арауыҡта "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 20 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", өс кеше Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ. Быйылғы икенсе ярты йыллыҡ өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 15 августа тиклем яҙылып, гәзитте сентябрҙән алдыра ала. 4 айға яҙылыу хаҡы - 382 һум 88 тин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Мәғариф хеҙмәткәрҙәре август кәңәшмәһенә быйыл Өфө ҡалаһында 8 августа йыйыласаҡ. Кәңәшмәлә ниндәй проблемаларға иғтибар биреләсәк, ниндәй көнүҙәк мәсьәләләр кисекмәҫтән хәл ителешен көтә?

***Айбулат ХАЖИН, БР мәғариф министрының беренсе урынбаҫары:*** Август кәңәшмәһенә йыйыласаҡ мәғариф хеҙмәткәрҙәре биш көн буйы ун ете белем биреү учреждениеһында төрлө мөһим мәсьәләләр буйынса һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашып, тәжрибә һәм фекер уртаҡлашасаҡ. Сарала бөгөнгө заман уҡытыусыһының һөнәри камиллашыуы, уҡыусыларға физика-математика йүнәлешендә төплө белем биреү, илһөйәрлек тәрбиәләүҙең бер юлы булараҡ тарих уҡытыуға иғтибар арттырыу, бөгөнгө шарттарҙа рус телен уҡытыу, шулай уҡ милли мәғарифтың ғилми-методик йәһәттән тәьмин ителеүе, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырыу шарттарында уҡыусыларҙың һәләттәрен үҫтереү һәм мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына ҡағылышлы һорауҙар ҡараласаҡ.

2025 йылға тиклем бөтә мәктәптәрҙә лә уҡытыуҙы бер сменаға күсереү, белем биреү усаҡтарын ремонтлау һәм яңыларын төҙөү федераль программаһына ярашлы, һәр муниципалитетта мәктәптәрҙе тикшереп, финанс мәсьәләләрен хәл иттек. Әлеге көндә республиканың 16 районында ике сменалы уҡытыу бөтөрөлдө. Белем биреү стратегияһы киләсәктә ғилми-техник йүнәлешле кластар булдырыу, балаларҙы теүәл фәндәргә ылыҡтырыу, спорт һәм фән буйынса түңәрәктәр һанын арттырыуҙы күҙаллай. Был йәһәттән М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның "Сәлих" социаль белем биреү үҙәге, Өфөлә асылған Республика балалар белем биреү технопаркы, Республика инженерҙар лицей-интернаты балаларҙың һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән эштәрҙең һөҙөмтәһе булып тора. Әйткәндәй, былтыр уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһында республиканан 30 уҡыусы еңеүсе тип табылһа, быйыл 43 бала төрлө йүнәлештәр буйынса уңыш ҡаҙанған. Тимәк, һәләтле балалар менән эшләү ыңғай һөҙөмтәләрен бирә.

Мәғариф хеҙмәткәрҙәрен борсоған тағы бер мөһим мәсьәлә - ул ҡағыҙ эшенең күплеге. Был турала ғына түгел, уҡытыусы һөнәренең бәҫен күтәреү буйынса ла фекер алышасаҡбыҙ. Шулай уҡ яңы һөнәри стандарт талаптарының айышына төшөнөү буйынса ла ярҙам итеү кәрәк буласаҡ. Уҡытыусы отчет биреү менән генә шөғөлләнмәҫкә, ә балаларҙы уҡытырға, тәрбиә бирергә тейеш. Бының өсөн тәү сиратта ата-әсәләр менән бәйләнеште нығытыу, осрашыуҙар үткәреү, психологик, юридик ярҙам күрһәтеү, сәләмәт тормошҡа әйҙәү мөһим. Әлеге көндә республика буйынса күрһәткестәргә ярашлы 77 процент уҡыусы төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнә, киләсәктә был һан 85-90 процентҡа тиклем барып етергә тейеш. Уҡыусылар буш ваҡытын файҙалы эш менән шөғөлләнеп үткәрһен өсөн робот техникаһы, мехатроника, спорт, музыкаль белем биреүсе төрлө түңәрәктәр асыуҙы хәстәрләйһе бар.

> "Август айында яңы уҡыу йылына әҙерлек кимәлен баһалау, һығымталар яһау йолаға ингән. Мәктәптәрҙә эштәр тамамлана, барлыҡ учреждениелар ҙа тиерлек балаларҙы ҡабул итергә әҙер. Быйыл балалар баҡсаларына 8600 бала килә, мәктәптәрҙә беренсе синыфта 52783 бала белем аласаҡ. Ә дөйөм Башҡортостан буйынса ҡарағанда, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында 234 меңгә яҡын бала тәрбиәләнә, мәктәптәргә 440586 уҡыусы йөрөй. Шуға күрә, мәғариф хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәһендә күтәрелгән һорауҙар беҙҙең республикала йәшәүселәрҙең күбеһенә ҡағыласаҡ", - тине Константин Толкачев һәм мәғариф системаһының үҫеше һәр ваҡыт БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың иғтибар үҙәгендә тороуын билдәләне.

***Рәйсә КҮЗБӘКОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сектор мөдире:*** Мәғариф өлкәһендә хәл ителәһе проблемалар күп, улар араһында милли мәғарифҡа ҡағылышлы мәсьәләләр беҙҙе бигерәк тә борсой. Былтырғы август кәңәшмәһендә милли мәғариф проблемаларын "Патриотик тәрбиә" тигән секция сиктәрендә генә тикшерҙек. Был мәсьәләләрҙең кәңәшмәнең пленар өлөшөндә лә ентекле ҡаралыуы мөһим, сөнки шул осраҡта ғына "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Федераль закон тулыһынса тормошҡа ашырыласаҡ. Билдәле булыуынса, ошо закондың "Дәүләт сәйәсәтенең мәғариф өлкәһендәге принциптары" тигән статьяһының икенсе пунктында "Күп милләтле дәүләт шарттарында белем биреү системаһының милли мәҙәниәттәрҙе, төбәктәрҙең мәҙәни йолаларын һәм үҙенсәлектәрен һаҡларға һәм үҫтерергә" тигән юлдар бар. Был беҙҙең мәғариф хеҙмәткәрҙәренең төп бурысын билдәләүсе һәм милли мәғарифҡа ҙур иғтибар бүленергә тейеш икәненә ишара яһаусы шарттарҙың береһе.

Хәҙер Берҙәм дәүләт имтиханы, Төп дәүләт имтиханы һәм башҡа төрлө әллә нисәмә контроль эштәргә һылтанып, бөтә белем усаҡтарында ла балаларҙы рус телендә уҡытыуға күсерә башланыҡ. Рус телендә уҡыған бала шул телдә фекерләргә өйрәнеп, туған телендә - башҡортса һөйләшмәйәсәк. Башҡорт теле - ул аралашыу өсөн генә түгел, ул быуаттар дауамында халыҡтың рухи ҡиммәттәрен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын киләсәк быуынға тапшырыу сараһы. Бөгөн балаларҙы тәртипһеҙ, компьютерға мөкиббән киткән тип зарланабыҙ икән, былар барыһы ла уларҙың туған телен белмәүенә, уның аша милли рухта тәрбиәләнмәүенә бәйле. Аңлы ата-әсәләр баланың туған телендә фекерләүе ниндәй әһәмиәткә эйә икәнен аңлап, балаларын башҡорт балалар баҡсаларына, башҡорт мәктәптәренә йөрөтөргә ынтыла. Мәғариф системаһында эшләүсе белгестәр ҙә ошо мөһим факторҙы күҙ уңынан ысҡындырмаһын һәм уҡыусыларҙы Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләүҙән тыш, рухлы, илһөйәр һәм лайыҡлы итеп тәрбиәләп үҫтереү өсөн милли мәғариф проблемаларын иғтибар үҙәгенә алһын ине. Быйыл үтәсәк педагогтарҙың август кәңәшмәһендә милли мәғариф өлкәһендәге проблемалар пленар ултырышта ла ентекле яҡтыртылыр, тигән өмөт бар.



Дауамы 2-се биттә.

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КӘСЕПСЕЛЕК ТӘ...

## табыш килтерә ала

***Гөлфиә ИСКӘНДӘРОВА, Күгәрсен районы башҡорттарының ҡоролтай рәйесе, Мораҡ Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Ауыл халҡын тәү сиратта эшһеҙлек проблемаһы борсой. Был мәсьәлә ҡасандыр хәл ителерме, билдәһеҙ. Мин йәшәгән осорҙа ғына ла бөтә тормошобоҙ тәжрибәләргә ҡоролған кеүек булды, үҙгәрештәрҙән генә торҙо. Хәҙер һәр кемгә үҙе теләгән эш менән шөғөлләнергә мөмкинлек булһа ла, ауыл кешеһенә эш башлап ебәреү ауырға тура килә. Дәүләт ярҙамын көтөп, ҡыл да ҡыбырлатмай ултырып тамаҡ туймағанын аңлаған әҙәм үҙ тырышлығы менән тормошон яйлап ебәрергә интылып тора. Тик эш башлағас та, тиҙ генә күп табыш алырға, байып китергә хыялланған йәштәрҙең бер сиктән икенсеһенә һуғылыуы тиғән нәмә ғәҙәтенә ингән.

Донъя яйлап, бөртөкләп йыйыла. Иң мөһиме, күңелгә яткан, ҡулыңдан килгән эш менән шөғөлләнергә кәрәк. Тәүҙә үҙең өсөн генә башлап ебәрһәң, артабан яйлап ҡына эшеңде киңәйтергә, таныштарың, дуҫтарың аша етештергән әйбереңде һатырға мөмкин. Элек бит һәр кем үҙенә күрә кәрәкле эш менән шөғөлләнгән: бераү тимерсе, икенсеһе балта оҫтаһы булған. Ҡайным арба тәгәрмәстәре яһай торғайны, быйма ла баҫты, сана табаны бөктө. Уға яҡынтирәләге ауылдарҙан ғына түгел, Ырымбур, Пермь өлкәләренән дә заказ бирә торғайнылар. Ҡайны саҡта әйберҙәрен әҙерләп өлгөртә алмай китер ине. Был ун йыл элек кенә булған хәл, хәҙер ҙә беҙҙең яҡтарҙа йылҡы көткән, ат менән бесән эшләгән кешеләр күп. Әммә арба тәгәрмәсе яһаған оҫталар тураһында ишеткәнем юҡ. Күптәр иҫке тәгәрмәстәрҙе, тимерҙән яһалған йә резина тәгәрмәстәрҙе ҡулайлаштырып ала. Әгәр ҙә шул эшкә барымы булған бераү ат арбаһына тәгәрмәстәр эшләй башлаһа, уның хеҙмәте буш ҡалмаҫ ине.

Шуның кеүек, һәр кем үҙенең ҡулынан килгән, күңеленә яткан эште атҡарып, боронғо кәсептәрҙе тергеҙеп тә донъя күтәрләк аҡса таба ала. Юғиһә, иртәнге туғыҙҙан киске алтыға тиклем генә эшләп, аҡсаһын алып, өйҙә ятырға өйрәнгәнбеҙ ҙә, үҙебеҙ эш асып, хәстәрлек күреп, йүгереп йөрөргә ялҡау килә кеүек.

Юҡҡа ғына борон ата-әсәләре уландарын үҙ ауылында өй һалып, өйләндереп, донъя көтөргә ҡалдырып ҡуймаған икән, тип тә уйлайым. Бер туғандар бер-береһенә ярҙам итеп, күмәкләшеп тормош көтөргә лә яйлы булған был. Хәҙер бер туғандар төрлө яҡҡа китеп, таралышып йәшәгән хәлдә лә, күрше-күлән йәки дуҫтар менән берләшергә мөмкин. Мотлаҡ ниндәйҙер оло эш ҡыйратырға ла кәрәкмәй. Шул уҡ бесән ваҡытында, мәҫәлән, бер ғаиләлә ҡул көсө булһа, икенсе ғаиләнең техникаһы етәрлек. Ғөмүмән, оло быуындың тәжрибәһенән сығып, бөләкәй генә коллектив хужалыҡтар ойоштороп ебәреү тураһында ла уйларға кәрәктер. Бәлки, береһендә машина, икенсеһендә аҡса, өсөнсөһөндә быларҙың барыһын да тормошҡа ашырыу буйынса елле план барҙыр. Ауыл ерендә хөкүмәт биргән эш урыны юҡтыр ҙа, әммә үҙеңә файҙа килтерерлек, аҡса табырлыҡ кәсептәр күп.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәғариф хеҙмәткәрҙәре август кәңәшмәһенә быйыл Өфө ҡалаһында 8 августа йыйыласаҡ. Кәңәшмәлә ниндәй проблемаларға иғтибар биреләсәк, ниндәй көнүҙәк мәсьәләләр кисекмәҫтән хәл ителешен көтә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Педагогтарҙың август кәңәшмәһендә бөтөн уҡытыусылар ҙа ҡатнаша алмай. Әммә кәңәшмә алдынан һәм унан һуң да барыһы ла уҡытыу-тәрбиә эштәре хаҡында уйлана. Йылдан-йыл уҡытыу программаһы ҙур үҙгәрештәр кисерә, әммә рухи тәрбиә кешелек донъяһы бар булғандан алып бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр кисермәй, тип әйтерлек. Уҡыу программаһында туған тел һәм республика компонентының кәмеүе - ул уҡыусыларҙы, тимәк, халыҡты, рухһыҙлыҡҡа алып киләсәк. Ә рухһыҙлыҡ - ул телһеҙ ҡалыу ғына түгел, ул тамырыңдан йолҡоп алыныу. Тамырынан йолҡолған үҫемлек артабан йәшәүҙән туҡтай, был билдәле.

Ун туғыҙ йыл дауамында эшләп килгән "Йәйләү" программаһы һәр быуын балаһының үҙ ҡалыбына, рухи байлығына, мәҙәниәтенә ҡайтырға теләүен күрһәтә. Беҙ баланы үҙ ҡалыбынан айырып, уның ҡанында булған һәләттәрен юҡҡа сығарып, шул тиклем ҙур хата, хатта киләсәк алдында енәйәт эшләйбеҙ. "Йәйләү"ҙә ял итеүсе балаларҙың өс аҙна эсендә бөтөнләй икенсе булып үҙгәреүен күреү, бер яҡтан, ҡыуаныс булһа, икенсе яҡтан, ни тиклем аяныс аҙымдар яһауыбыҙҙы ла асыҡ күрһәтә.

Шуға күрә, дәрес биреү өсөн генә түгел, ә халҡының киләсәге өсөн дә янып-көйгән уҡытыусыларға әйтер һүҙем шул: туған тел, туған мөхит, туған мәҙәниәт Кеше тәрбиәләүҙә иң төп таяныс. Ниндәй юлдар менән булһа ла баланы ошо бер ни менән дә тиңдәше булмаған ҡиммәттәребеҙҙән айырмау сараһын күрһәк ине. Шул саҡта ғына беҙ Урал батыр васыятына тоғро ҡала алырбыҙ. Һәр балаға уның Урал батыр вариҫы икәнлеген аңлатырға кәрәк. Быны өсөн айырым дәрес бүленмәй, бүленгәне лә юҡ ителә. Әммә теләк булғанда, балаға үҙенең кем икәнен аңлатырлыҡ мөмкинлек табып була. Биш көн бара торған быйылғы август кәңәшмәһендә ошо мәңгелек ҡиммәттәр тураһында ла телгә алыусы булыр, тиғән өмөттә ҡалам.

***Гөлфиә ДИНИСЛАМОВА, Аҙнағол ҡалаһы Башҡорт гимназияһы директоры:*** Һуңғы ун йыл эсендә мәктәп шаҡтай ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Беҙгә мотлаҡ ата-әсәләр менән бергә эшләргә, уҡыусыларҙы йылдан-йыл ҡатмарлана барған имтихандарға әҙерләргә, төрлө отчет ҡағыҙҙары тултырырға ла тура килә. Мәктәп уҡытыусыларының бурыстары өҫтәлгән һайын йәш белгестәр мәктәптәргә эшкә килеүҙән ситләшә, кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Педагогтар иңенә төшкән бихисап отчет, ҡағыҙ эшен еңелләштереү тураһында дәүләт кимәлендә һүҙ барғас, республика уҡытыусыларының август кәңәшмәһендә лә ошо турала һүҙ ҡуҙғатылыр, моғайын.

Тағы ла, уҡытыусының яңы һөнәри стандарттары нимә ул, тиғән һорауға ла асыҡлыҡ индерелһә ине. Сөнки киләһе йылдан бөтә педагогтар ҙа ошо яңы талаптарға яраҡлашырға бурыслы, тип ишеттек. Бынан тыш, "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Федераль законды тормошҡа ашырыу шарттарында уҡыусыларҙы Төп дәүләт имтиханы, Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыуға әҙерләү менән бергә тәрбиә эштәрен нисек алып барыу тураһындағы тәжрибәләр менән дә уртаҡлашылар ине. Был осраҡта беҙ, әлбиттә, мәсьәләне милли мәктәптәр миҫалында аңлатыуҙарын теләр инек. Әйткәндәй, милли мәғариф өлкәһендәге проблемалар ҙа быйыл күҙ уңынан ысҡынмаһын ине: башҡорт мәктәптәренең хәле, туған телде өйрәтеү кимәле, перспективалары тураһында һүҙ ҡуҙғатылһа, яҡшы буласаҡ. Милли мәктәптәрҙең эш һөҙөмтәһен уҡыусыларҙың өлгәш күрһәткестәренә ҡарап ҡына баһаламай, республикала үткән бөтә милли сараларҙа әүҙем ҡатнашыуҙары буйынса ла фекер йөрөтһәләр ине. Ғөмүмән, киләсәктә милли кадрҙар әҙерләү өсөн талантлы, зирәк башҡорт балаларының һәләттәрен үҫтереүгә лә айырым иғтибар бүлергә кәрәк. Педагогтарҙың биш көн дауамында үтәсәк август кәңәшмәһендә ошо темалар күтәрелер һәм борсоған һорауҙарға яуап табырбыҙ, тип өмөт итәм.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүлә ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп барыуыбыҙҙы беләһегеҙ.**

**Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан:**



Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан Зифа Мөхәмәтйәнова - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**;

Өфө ҡалаһынан Юнир Вәлиев - **"Башҡорттарҙың хәрби тарихы"**;

Баймаҡ районы Йылым ауылынан Мәүлиҙә Ишбаева, Әбйәлил районы Амангилде ауылынан Рәйсә Ғиниятова, Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Вил Лутов, Өфө ҡалаһы Ноғай ауылынан Фәнүзә Аллағолова, Шишмә районы Суҡраҡлы ауылынан Илнур Хәсәнов - **Мөнир Ҡунафиндың "Йәҙәп барған, ти, аттар дингеҙҙә"**;

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рөстәм Хәмитов эш сәфәре барышында Ғафури районында булды һәм урып йыйыу эштәре барышы менән танышты, агросәнәғәт комплексы предприятиеларына, инфраструктура һәм социаль объекттарға барҙы. Рөстәм Зәки улы игенселәр менән осрашҡанда республикала комбайнсылар араһында конкурс иғлан ителеүен иҫкә төшөрҙө. Уның һөҙөмтәләре буйынса, ун еңеүсегә автомобиль тапшырыласаҡ.

✔Республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан аграрийҙары бер миллион самаһы ашлыҡ йыйҙы. Уртаса уныш гектарынан 21,1 центнер тәшкил итә. Саҡмағош (гектарынан 30,5 центнер), Ҡырмыҫҡалы (26,4 центнер) һәм Стәрлетамаҡ райондарында (25 центнер) иген һәм ҡуҙаҡлы культураларҙан яҡшы уныш йыялар. Быйыл 1804 мең гектар ерҙә уныш йыйыу бурысы тора, шуларҙың 409 мең гектарын ужым культуралары биләй.

✔"Арғымаҡ" этно-рок төркөмө һәм Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле Мексикала Бөтә донъя фольклориадаһында ҡатнаша. Аҙна буйына Мексиканың махсус төҙөлгән концерт майҙансыҡтарында 50-нән ашыу илдең ижади коллективы сығыш яһай. Дүрт йылдан донъяла танылыу яулаған халыҡ коллективтары Башҡортостанда осрашасаҡ.

✔4 августан Россельхознадзор Рәсәйгә, шул иҫәптән өсөнсө илдәр аша Босния һәм Герцеговинанан йәшелсә, емеш-емеш индереүҙе ваҡытлыса тыйҙы. Рәсәйгә Босния һәм Герцеговинанан продукция индереүҙең артыуы, ошо илдәрҙең фитосанитар торошо тураһында мәғлүмәттең юҡлығы шундай ҡарар ҡабул итеүгә сәбәпсе булды. Билдәле булыуынса, Босния һәм Герцеговина фитосанитар контроль системаһы менән танышыу өсөн Россельхознадзорҙың делегацияһын ҡабул итеүҙән баш тартҡан.

✔Башҡортостан ил субъекттарының инвестиция йөләп итеүсәнлеге медиарейтингында төүгә 20 төбәк иҫәбенә инде. Уға Стратегик инициативалар агентлығы, "Медиалогия" компанияһы һәм Publicity элемтә төркөмө йомғаҡ яһаған. Рейтингта төбәктәрҙең алда барыуы инвестиция һәм эшлекле мөхитте яҡшыртыу өлкәһендәге ҙур ваҡиғалар һәм башлангыстар менән бәйле. Улар быйыл июнь айында баҫылған яңылыҡтарға нигеҙләнгән.

КИЛЕШМӘЙЕМ!



# КЫЙРАТЫУЫ ЕҢЕЛ...
## булдырыуы ауыр

**Һуңғы ваҡытта баш ҡалала вандализм термины йыш яңғырай башланы, сөнки вандалдар йә тегендә, йә бында зыян эшләп кенә тора. Йыл башынан Өфө скверҙары һәм парктарында вандализмдың - 50-нән ашыу, торлаҡ ойошмалары тарафынан дөйөм йорт милеген боҙоуҙың 200 осрағы теркәлгән.**

Өфө ҡала округы хакимиәте хәбәр итеүенсә, йорт подъездарындағы баҫҡыс майҙансыҡтарына, почта йәшниктәренә, яҡтыртҡыстарға, һунлергестәргә, сарҙаҡҡа менеү йәки подвалға төшөү юлдарының бигенә, лифт кабиналарына, йорттарҙың фасадтарына, домофондарға, сүп-сар урналарына һәм эскәмйәләргә көн юҡ. Шулай уҡ идара итеүсе компаниялар йыл һайын йорттарҙы йылытыу миҙгеленә әҙерләгәндә баҫҡыс майҙансыҡтарындағы ватылған тәҙрә быялаларын алмаштырыу өсөн дөйөм суммаһы 1,2 миллионлыҡ быяла һатып алырға мәжбүр. Был сумма әллә ҡайҙан күктән төшмәй, ошо уҡ йортта йәшәүселәрҙең кеҫәһенән сыға. Ә бит хәҙер күпселек йорттарҙа домофондар тора, уларға енел генә инеп тә булмай. Тимәк, вандализм йә ошо йортта йәшәүсе балаларҙың һәм үсмерҙәрҙең, йә уларҙың дуҫтарының эше. Һәм улар үҙҙәре йәшәгән йортто ремонтлау өсөн аҡсаны ата-әсәһе, олатай-өләсәһе түләүгән аңларға тейеш. Быны аңлатыу, әлбиттә, ғаилә ағзаларының бурысы.

Тағы бер мәлгә иғтибар итмәй мөмкин түгел: быйыл вандалдарҙың эшмәкәрлеге әҙемтәләрен бөтөрөүгә генә муниципалитет 1,5 миллион һум өҫтәмә аҡса бүлергә мәжбүр булған. Был инде ҡайҙалыр яңы балалар майҙансығы, ял урындары, спорт майҙансығы һ.б. төҙөлмәй ҡалды, йәғни халыҡтың уңайлылығы өсөн ниндәйҙер шарт үтәлмәне йәиһә тотҡарланды, тигән һүҙ.

Йылдан-йыл ҡала матурлана барғанда һәм быны граждандар үҙҙәре лә социологик һорау алыуҙар ваҡытында билдәләгәндә, закон боҙоусыларҙың ни өсөн шундай аҙымға барыуы аңлашылмай. Әйткәндәй, вандалдарға РФ Енәйәт кодексының 214-се статьяһына ярашлы яза биреү ҡаралған. Ләкин уларҙың кем икәне ҡасан асыҡланыр икән?

Ошо көндәрҙә вандалдар халыҡтың иң яратҡан ял урындарының береһе - Салауат Юлаев исемендәге баҡсаның архитектура яҡтыртҡысын боҙған. Төрлө төҫтәрҙә нур һибеүсе был яҡтылыҡ сығанағы ҡоролмаларҙы яҡтыртып, баш ҡаланың бер биҙәге булып балҡыһа, әлеге ваҡытта күперҙең бер тауындағы яҡтыртҡысы ватылған. Бер нисә көн алда беседкалағы ике яҡтыртҡыс сафтан сығарылған була. Уларҙы ҡуйыусы подрядсы ойошма вәкиле Илья Косоухов белдереүенсә, "бындай яҡтылыҡ сығанаҡтары өҫтәмә ҡоралмалһыҙ эшләмәй, ә улар заказ буйынса ғына әҙерләнә һәм ҡуйыла. Ә вандализм күренештәре финанс юғалтыуҙарынан тыш, монтаж эштәрен дә тотҡарлай".

Былар хаҡында халыҡ ни уйлай икән?

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Альмира САБИРОВА, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Яңы йортта йәшәйбеҙ, ишек һәр саҡ бикле, домофондар ҡуйылған. Ингәндә һәр кем үҙенең асҡысын ҡулланғас, сит кешеләр инеп-сығып йөрөй алмай. Шуға, ундай дөйөм милеккә зыян килтереү осраҡтары юҡ, тиер инем. Ошо көндәрҙә коридор стенаһында бер фатирҙа йәшәүсе ҡыҙҙар тураһында алама яҙыу барлыҡҡа килде. Быны ла вандализмға индерергә мөмкинме икән? Кемлеген асыҡлай башлағас, яратҡан ҡыҙы менән асыуланышҡан егеттең үсенсә шулай үс алыуы һәҙәмтәһе икәнлеге мәғлүм булды. Фатирҙы ҡуртымға алып йәшәгән апалы-һеңлеле ҡыҙҙар үҙҙәре буяу һатып алып, стенаны матурлап буяп сыҡтылар. Ә инде ҡала урамдарында йәки парктарҙа ҡыйратылған, ватылған, боҙолған объекттар күренһә, әлбиттә, күңел ҡырыла. Бында гәйеплеләрҙе табып, яза бирергә түгел, ә ошо аҙымға барырға этәргән сәбәптәрҙе асыҡларға һәм йәмғиәтте ошо сәбәптәрҙән арындырыу юлдарын эҙләргә кәрәк, миненсә.

***Ләйсән ДӘҮЛӘТОВА, Сибай ҡалаһы:*** Беҙҙә лә, үкенескә күрә, вандализм осраҡтары йыш осрай. Яңы ултыртылған сәскә йә ағастарҙы йолҡоп алыу тиһеңме, һәйкәлдең башын ҡырҡыумы, ҡойманы һындырыумы - аптырап тормай халыҡ. Мин уны, нигеҙҙә, йәштәрҙең эшһеҙ йонсоп йөрөүенән күрәм. Көстәре бар, тиндәштәре араһында үҙҙәрен "батыр" итеп күрһәткеләре килә, шикелле. Әммә йәштәр генә түгел, социаль селтәрҙәрҙә оло апайҙарҙың магазин алдында үсҡән сәскә, ағастарҙы йолҡоп китеүе тураһында ла видеояҙма бар. Сәбәбен кемдер аҡса түгеп, йәмғиәттә матурлыҡ тыуҙырырға тырышыуы тураһында уйлап бирмәүҙә, ул ғына ла түгел, бөтөнләй уйлай белмәүҙә күрәм. Әгәр саҡ ҡына уйлай белһәләр, үҙҙәрен башҡаларҙың урынына ҡуйып ҡарарҙар, кеше хеҙмәтен баһаларҙар ине, моғайын. Бындай зыянлы элементтарға улай эшләргә ярамағанлығын штраф менән генә аңлатып булалыр, тип уйлайым.

***Ахун БАЕВ, Баймаҡ ҡалаһы:*** Һуңғы йылдарҙа заман афәтенә әйләнә барған вандализм күренештәре беҙҙең республика төбәктәрендә лә киң ҡолас ала бара. Бәләкәй генә ауыл-ҡасабаларҙа ла, баш ҡалабыҙҙа ла ҡыйратылған, ватылған, боҙолған объекттар осрап тора. Вандализм ҡолона әйләнеп барыусылар араһында малай-шалайҙың ғына түгел, хатта ҡыҙҙарҙың да булыуы үтә аяныслы. Нилектән барлыҡҡа килә һуң был вәхшилек? Ата-әсә тәрбиәһе етешмәгәнлектәнме, әллә башҡа берәй сәбәптәнме? Миненсә, иң беренсе нәүбәттә, эшһеҙлектәр уның башы. Ата-әсәләр хәҙер көнө-төнө эш тип саба, балаларына иғтибар ҙа етмәй. Хатта ҡайһы бер ата-әсәләр балаларының көн оҙоно нимә менән шөғөлләнгәнен, компьютерҙан, телевизорҙан нимә ҡарағанын да белмәй. Белеүебеҙсә, яңғыҙ өйҙә ҡалған бала төрлө кинолар, фильмдар ҡарай, уларҙағы насар ҡылыҡтарҙы ғәҙәти күренеш тип ҡабул итә һәм ошо геройҙарға оҡшарға тырышып, үҙе лә һиҙмәҫтән, яҙыҡ юлға баҫа ла инде. Уның иң төүге вандализм акты өйҙә, өй тупһаһында башлана: ҡыҙыҡ өсөн генә нимәнелер ватып ҡарай, һуңынан дуҫтары араһында үҙенең "теккә"леген күрһәтергә тырышып, урамда ла ниндәйҙер хаслыҡ ҡыла башлай.

Хәҙерге ваҡытта кистәрен автобус туҡталыштарында йыйылышып ултырған йәштәрҙе йыш күрергә була. Улар үҙ-ара матур ғына аралашып ултыралар ҙа, һуңынан, бер үк күренештән ялҡып, башта ултырған ерҙәрендә исем-шәрифтәрен ҡалдыра башлайҙар, яйлап ултырғыстарҙы ватып-емерәләр. Шулай уҡ һуңғы ваҡытта тик ошо шөғөл менән генә булышыусы төркөмдәр ҙә осрай. Уларҙың был ҡылыҡтары осраҡлы түгел, тиер инем, сөнки улар көндөҙ үк үҙҙәренә кәрәкле объектты һайлап, ниндәйҙер маҡсат буйынса эш итә. Дөйөмләштереп әйткәндә, вандализмды мин үҙенә күрә ауырыу тиер инем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**




Учалы ҡалаһынан И. Хажина, Белорет районы Үсманғәле ауылынан Мәүлиҙә Йосопова, Дәүләкән ҡалаһынан Ф. Шәмсетдинова, Салауат ҡалаһынан А. Солтанморатова, Йылайыр районы Ҡәҙерша ауылынан У. Тәүелбаев, Балаҡатай районы Монас ауылынан Тәслимә Мөхәмәтова, Бөрйән районы Әтек ауылынан Зәбир Ҡужабаев, Ишембай ҡалаһынан И. Зөлҡәрнәев, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Мәрзиә Ишимова, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Ғиндулла Шәйәхмәтов - **2017 йылға "Башҡортса дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.**

● Шулай итеп, августа ла 2017 йылдың беренсе яртты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләкле булыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Өфөнөң Октябрь проспекты башланған урында миләшле сквер буласаҡ. Өфө һөнәрселек һәм сервис колледжы (10-сы һөнәрселек лицейы) янында йәшел зона бүлендә. Тендер үткәргәндә ҡала скверҙы төҙөкләндереү өсөн 3,5 миллион һум аҡса йүнәлтте. Скверға Зәйнәб Биишева исеме бирелде, бында яҙыусыға һәйкәл ҡуйырға ниәтләйҙәр. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә "Парктағы ҡала" концепцияһы уңышлы тормошҡа ашырыла. Биш йыл эсендә 28-е ремонтланған һәм 17 яңы ял итеү зонаһы булдырылған.

✔Өфөлә Рәсәй киноһы йылына арналған хәйриә проекты ойошторола. Уның сиктәрендә 27 августа "Кино төнө" Бөтә Рәсәй акцияһын үткәргән ваҡытта 3D Mapping шоуы була. Башҡортостандың Милли симфоник оркестры сараны музыкаль яҡтан биҙәй. Тамаша "Родина" кинотеатрында уҙа. Сараның төп маҡсаты - ярҙамға мохтаж балаларға булышлыҡ итеү. Проект Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында уҙғарыла. Сара барышында йыйылған аҡса "Мәрхәмәт" хәйриә фондына йүнәлтелә.

✔Ярты йыл эсендә Башҡортостанда 12 кеше наркотиктарҙан ағыуланып, 91-е сифатһыҙ араҡы эсеп вафат булған. Ғинуар айынан июнгә тиклем наркотиктар (105) һәм спиртлы продукция (836) менән ағыуланыу осраҡтары теркәлгән. Дарыу эсеп ағыуланыусылар һаны - 490, 207 осраҡта медикаменттар суицид маҡсатында ҡулланылған. Шуларҙың 23-ө үлемгә килтергән. Статистика мәғлүмәттәрен Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығынан хәбәр иттеләр.

✔3 августа территориаль һайлау комиссиялары теркәүҙән төшөрөү таныктамаларын тапшыра башланы. 18 сентябрҙә исемлеккә индерелгән һайлау участкаһына килә алмаған кеше ошо документты алырға хоҡуҡлы. Теркәүҙән төшөрөү таныҡтамаларын тапшырыу 6 сентябргә тиклем дауам итә.7 сентябрҙән 17-нә тиклем таныҡтамалары участка һайлау комиссиялары биналарында алырға була.

✔Республиканың Хәрби Дан музейында "Һуғыш шандауы" күргәҙмәһе асыла. Экспозицияның авторы - Фәнил Шәймөхәмәтов. Фәнил Шәймөхәмәтов - рәссам-график, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Рәсәй Рәссамдар союзы, "Артыш" ижади берекмәһе, республика Рәссамдар союзы ҡарамағындағы көньяҡ Башҡортостан рәссамдары ассоциацияһы ағзаһы. Күргәҙмә 31 октябргә тиклем эшләй. Белешмә өсөн телефон: (347) 260-44-64.

***✓ Дөйөм дәүләт һәм Берҙәм дәүләт имтихандары йомғаҡтары буйынса уҡыусылар яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән: математика, информатика, тарих, рус һәм инглиз телдәре буйынса уртаса күрһәткестәр күтәрелгән.***



ҠЫҪҠАСА

# ЙЫЛЫТЫУ ӨСӨН...

## ете ай ғына түләргә

✓ 2017 йылдың көҙөнән республика халҡы йылытыу өсөн 12 ай урынына ете ай түләйәсәк. Төбәктең торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Альфред Зиннәтуллин белдереүенсә, республикала йылытыуға бәйле хәл тикшерелгәндә күрше төбәктәрҙең тәжрибәһе өйрәнелгән. "Быйылғы йылытыу миҙгелендә 1/12 схемаһы буйынса (йыл дауамында) эш дауам итә. Киләһе йылдың көҙөнән октябрҙән апрель айына тиклем түләйбеҙ. Ошо осорҙа бөтә норматив документтар әҙерләнәсәк. Мәҫәлән, Татарстанда бындай тәжрибә халыҡта бер аҙ ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы, сөнки ҡыш көнө уларҙың түләүҙәре ҡырҡа арткан. Йыл аҙағынаса күрше республикала күсеү тамамлана. Көҙҙән башлап улар 1/7 схемаһы буйынса түләйәсәк", - тине ведомство министры урынбаҫары. Дәүләт Думаһының Торлаҡ сәйәсәте һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса комитет рәйесе урынбаҫары, "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Управдом" федераль проекты етәксеһе Павел Качкаев ҡатнаш схема тәҡдим итте. "Бөгөн илдә күп кенә төбәктәр 1/7 схемаһына күсә. Аңлауымса, әгәр дөйөм иҫәп приборҙары булһа, күсергә мөмкин, булмаһа, ошо системаға күсеүҙең мәғәнәһе юҡ. Шуға күрә, республикала, шулай уҡ һәр төбәктә ҡатнаш схема ҡулланыу мөһим", - тине Павел Качкаев.

✓ Республика Хөкүмәте Башҡортостанды 2017 йылда Истанбулда "Апимондия" халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһының 45-се конгресында ҡатнашыуға әҙерләү буйынса саралар планын раҫланы. Бойороҡҡа ярашлы, 2021 йылда Өфөлә халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһының 47-се конгресын ҡабул итеү буйынса күләмле эш башҡарыу бурысы тора. Төбәк инфраструктураһына ҙур иғтибар бүленәсәк. 2021 йылға тиклем Башҡортостанда асыҡ һауала умартасылыҡ музейы, бал эшкәртеү комбинаты, шулай уҡ башҡорт тоҡомло бал ҡорттарын үрсетеү буйынса өлгөлө умартасылыҡ барлыҡҡа киләсәк. "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығында 47-се Конгресс ҡунаҡтарын ҡаршы алыу өсөн тейешле шарттар булдырыласаҡ: юлдар яҡшыртыласаҡ, делегаттар сифатлы элемтә менән тәьмин ителәсәк. Ойоштороу комитетын Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, Хөкүмәт Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов етәкләнә.

✓ 3 августан 2015 йылда эшләгән пенсионерҙар арттырылған пенсия ала башлай. Яңы күләмдәге пенсияны 250 меңдән ашыу кеше аласаҡ. Түләүгә сығымдарҙы финанслау тулы күләмдә тәьмин ителгән, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһендә. Эшләүсе пенсионерҙарҙың страховка пенсияларын күләмен ҡайтанан иҫәпләү тамамланған. Рәсәй Пенсия фонды идараһы ағзаһы, Башҡортостан буйынса идарасы Фоат Хантимеров аңлатыуынса, пенсия автоматик рәүештә иҫәпләнә. Максималь өҫтәмә күләме өс пенсия балы суммаһына, йәғни 222,81 һумға тиң. Ағымдағы йылдың 1 февраленән пенсия балының хаҡы 74,27 һум тәшкил итә. Графикка ярашлы, пенсия 3 августан 24-нә тиклем таратыла. Кредит ойошмаларына аҡса килешеүҙә билдәләнгән ваҡытта күсерелә.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ УҠЫУСЫЛАРЫ...



## имтихандарҙы яҡшы тапшырҙы

**Быйыл баш ҡалала 9-сы синыфты тамамлаусы - 8,7 мең, 11-се синыфты тамамлаусы 1,9 мең уҡыусы имтихан тапшырған.**

Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова белдереүенсә, Дөйөм дәүләт (ДДИ) һәм Берҙәм дәүләт имтихандары (БДИ) йомғаҡтары буйынса уҡыусылар яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткән: математика, информатика, тарих, рус һәм инглиз телдәре буйынса уртаса күрһәткестәр күтәрелгән, юғары баһалы (80-дән алып 100 балға тиклем) эштәр һаны арткан.

Йомғаҡлау аттестацияһын үткәреүҙең тәртибендә алдан тапшырыу, төп һәм өҫтәмә осорҙар ҡаралған. Алдан тапшырыуҙа дөйөм һандың 0,1 проценты самаһы кеше ҡатнашҡан. Улар, нигеҙҙә, уҙған йылдарҙа белем усаҡтарын тамамлаусы уҡыусылар. Алдан имтихан тапшырыуҙа ҡағиҙә боҙоуҙар һәм техник өҙеклөктәр күҙәтелмәгән. Төп этапта күпселек ҡатнашып, унда ла тупаҫ техник һәм ойоштороу хаталары булмаған. Төп этапта ҡатнаша алмағандар өсөн сентябрҙә өҫтәмә этап ойоштоласаҡ.

Имтихандарҙың төп осоронда БДИ - 26, ДДИ 51 пунктта уҙғарыла. Уларҙың барыһы ла кәсә телефондары бәйләнешен ваҡытлыса туҡтатып тороу системаһы менән йыһазландырылған. ДДИ үткәргәндә беренсе тапҡыр БДИ-ла файҙаланылған пункттар һәм ҡорамалдар ҡулланылған. Был сара 9-сы синыфтарҙа ла имтихандар тапшырыуҙа мөмкин тиклем объективлыҡ һәм асыҡлыҡҡа өлгәшеү маҡсатынан сығып эшләнгән.

Имтихан тапшырыу предметтарын һайлау ҡалала артыҡ үҙгәреш кисермәһә лә, быйыл тәүәл фәндәргә өҫтөнлөк биреү һиҙелә. Быға уҡыусылар менән һөнәр һайлау буйынса маҡсатлы эш алып барыу йоғонто яһаған. Һөҙөмтәлә 11-се синыфтарҙың күпселеге (4105 кеше - 80,1 процент) математикаға өҫтөнлөк биргән. Шулай уҡ өҫтөнлөклө предметтар араһына быйыл "Информатика" ла ингән, бындай тенденция 9-сы синыфтарҙа ла күҙәтелә.

Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырыуға рөхсәт алыу өсөн 11-се синыфтар икенсе йыл инде йомғаҡлау иншаһы, сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар изло-

ИҒТИБАР!

# ТИРӘ-ЯҠ МӨХИТТЕ ҺАҠЛАУҒА...



## һәр кем өлөш индерһен

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала 2017 йылды Экология һәм айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары йылы тип иғлан иткән Указға ҡул ҡуйҙы.**

Әлбиттә, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау һәр йыл, һәр көн, һәр кемдең иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Өфөлә, мәҫәлән, был юҫыҡта, йәғни ҡала мөхитенең сифатын һәм уның экологик йүнәлешле үҫешен яҡшыртыу буйынса әүҙем эш алып барыла. Муниципалитет ҡарамағында дөйөм майҙаны 280 гектар булған дөйөм ҡулланылыштағы 82 объект бар. 2012 йылдан алып бында урман зоналарын тәҙәкләндереү һәм яңыларын булдырыу эше планға ярашлы үтәлә. Быйыл ғына 15 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған, 1,4 миллиондан ашыу сәскә сәселгән, 21 мең квадрат метр газон һәм сәскә түтәле булдырылған, 2 мең квадрат метр төргәкле газон һалынған. Дөйөм ҡулланылыштағы территорияларҙы тәрбиәләп тороу һәм тәҙәкләндереү тәбиғи мөхиткә көсөргәнеште кәметеү маҡсатында тормошҡа ашырыла.

Баш ҡала территорияһында һауа таҙалығы бер нисә күсмә станцияла тикшерелә. Һыу сифатын БР буйынса Роспотребнадзор идаралығының 11 нөктәһе күҙәтеп тора. Өфөнөң Ҡотҡарыу хеҙмәте-112 зарарлы матдәләрҙең тирә-яҡ мөхиткә ташланыуын иртә асыҡлауҙың ике автоматик станцияһы менән файҙалана. 2011 йылда өҫтәмә рәүештә Дим районында өсөнсө станция сафҡа индерелде. Канализацияның таҙартыу ҡоролмаларынан ағып төшкән һыуҙарҙы биоген элементтарҙан таҙартыуҙың заманса технологиялары сафҡа индерелгән. Өфө территорияһының санитар торошон камиллаштырыу маҡсатында 2018 йылға тиклем контейнер паркын һәм махсус техниканы яңыртыу өҫтәмә программаһы эшләй. Бөгөнгә 1900 евроконтейнер, ҙур күләмле сүп-сар өсөн 250 бункер урынлаштырылған. Шулай уҡ ПЭТ-тара йыйыуға 230 модуль ҡуйылған. Программа тулыһынса тормошҡа ашырылғанда, ҡалала 958 модуль павильоны, 3237 евроконтейнер, 20 махсус автомобиль иҫәпләнәсәк.

Муниципалитеттың был йүнәлештәге эшмәкәрлеге дауам итәсәк, әлбиттә, ләкин баш ҡаланың һәр кешеһе ыңғай экологик мөхитте булдырыу һәм һаҡлауға үҙ өлөшөн индерә ала. Мәҫәлән, Башҡортостан Тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуратураһы һәм Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан төбәк бүлексәһе "Экологик хоҡуҡ боҙоу шаһиты булғанда ҡайҙа мөрәжәғәт итергә" тигән иҫкәрмә әҙерләгән. Ул тыуған крайының таҙалығы өсөн көрәшергә әҙер булған барлыҡ граждандарға адресланған.

Шулай итеп, әгәр **тулып түгелеп ултырған контейнерҙар булһа йәки сүп-сар йыйыу графигы боҙолһа**, Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығына (Өфө, Р. Зорге урамы, 58; тел. (347) 229-90-98, 224-27-65) йәки БР-ҙың Торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитетына (Өфө, Ст. Халтурин урамы, 28, тел. (347) 218-10-65) мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Йыйылған һыуҙы законһыҙ ағыҙыу, шыйыҡ ҡалдыҡтарҙы йылғаға йәки быға рөхсәт булмаған урынға түгеү тура-**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан Хөкүмәте бойороғо менән иң яҡшы 50 башҡорт һәм рус теле уҡытыусыһы 50 мең һум күләмендәге аҡсалата премияға лайыҡ буласаҡ. 2007-2015 йылдарҙа конкурс буйынса һайлап алыуҙа 450 педагог еңеүсе булған. Быйыл республика комиссияһына 102 эш тәҡдим ителгән, шуларҙың 47-һе - рус теле һәм әҙәбиәте, 55-е - башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары.

✓ Тәүге ярты йыллыҡта Башҡортостанда банктар физик бөрәмектәргә 78,3 миллиард һумлыҡ кредит биргән. Былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда төбәктә бөрәмләп кредитлау 35,3 процентҡа артҡан, тип хәбәр итәләр республиканың Милли банкында. Кредит портфеленең сифаты насарайған. Бурыс 27,1 миллиард һум тәшкил иткән, 2015 йылдың 1 июленән 19 процентҡа артҡан. Ғинуар-июнь айҙарында бөтәһе 19,2 миллиард һумлыҡ 13 729 ипотека торлаҡ кредиты бирелгән. Был уҙған йылғы күрһәткестәрҙән 63,3 һәм 70,5 процентҡа күберәк. Бурыс 1,2 миллиард һум тәшкил иткән.

✓ Сибай ҡалаһындағы үҙәк майҙанда Халыҡ-ара гүзәллек көнөнә арналған флешмоб ойошторолдо. Флешмобтың маҡсаты - ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы хаҡында иҫкә төшөрөү, ҡалала сибәр һәм бәхетле ҡатын-ҡыҙҙар һанын арттырыу, шулай уҡ фекерҙәштәр менән аралашыу, ыңғай энергия алыу, яңы әхирәттәр табыу. "Супер әсәйҙәр" тип аталған йәш әсәләр төркөмө уҙғарған сарала ҡыҙҙар һәм әләсәйҙәр, әсәйҙәр ҡатнашты. Почетлы ҡунаҡ Зариф Байғусҡаров ҡала халҡын һәм флешмобта ҡатнашыусыларҙы күркәм байрам менән ҡотланы.

✓ 1 июлдән илдә минималь хеҙмәт хаҡы 7500 һумға тиклем артты. Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының ошо йылдың беренсе кварталында үткәргән мониторинг мәғлүмәттәре буйынса, республикала 242 меңдән ашыу бюджет өлкәһе хеҙмәткәре иҫәпләнә. 1 майҙан Башҡортостанда иҡтисадтың бюджеттан тыш секторы ойошмаларына хеҙмәткәрҙәре өсөн минималь хеҙмәт хаҡы 6900-ҙән 8900 һумға тиклем күтәрелде.

✓ Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанға һәм күп профилле муниципаль бөрәмектәрҙә халыҡ мәшғүллегенә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән саралар буйынса һөҙөмтәлелектең юғары коэффициентына эйә булған тағы ла 11 төбәккә субсидияларҙы арттырҙы. Башҡортостан ошо маҡсатҡа 367,4 миллион һум аҡса аласаҡ.

✓ **Былтыр суд приставтары 12 мең хеҙмәткәргә 404 млн һум эш хаҡын ҡайтарып бирҙе. 6 ай эсендә беҙҙең ярҙам менән республиканың 6,5 мең кешеһе эш хаҡы ала алды, уның дөйөм күләме 148 млн һумдан ашыу.**



жение яҙа. Дөйөм алғанда, был бурысты барыһы ла үтәгән.

ДДИ йомғаҡтары буйынса бер нисә ыңғай күренеш күҙәтелә. Мәҫәлән, рус теленән уртаса балл 0,9 процентка артҡан. Шулай уҡ ирекле фәндәр: информатика, химия, физика буйынса имтихандар ҙа уңышлы тапшырылған. Башҡа фәндәр буйынса һөҙөмтәләр былтырғы йомғаҡтар кеүек үк. Төп предметтарҙан имтихан тапшыра алмаусылар өлөшө 0,5 процент тәшкил итә.

БДИ йомғаҡтары буйынса математика (+5,8), информатика (+1,9), тарих (+2,1), инглиз теленән (+5,4) уртаса балдарҙың артыуы күҙәтелә. Һайланған предмет буйынса имтихан тапшырғанда насар баһа алыусы уҡыусылар һаны ла кәмегән.

Уҙған уҡыу йылында 11-се синыфты тамамлаусы 22 уҡыусы төрлө предметтар буйынса имтихандарҙы 100 балға тапшырған. Шулай уҡ аттестат алыусылар һаны ла артҡан: 2014-2015 уҡыу йылында был күрһәткес 98,2 процент тәшкил итһә, тамамланған уҡыу йылында 99,1 процент булған. Бигерәк тә баш ҡаланың Совет, Киров, Дим райондарында аттестация уңышлы үткән.

**Әйткәндәй, Башҡортостан Мәғариф министрлығында республика буйынса ла Берҙәм дәүләт имтиханына яҡынса йомғаҡ яһалды. Республика мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Айбулат Хажин билдәләүенсә, быйыл Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусылар эштәрҙе уҙған йылдарға ҡарағанда яҡшыраҡ башҡарған. Профилле математика буйынса һөҙөмтәләр былтырғынан ике тапҡырға тиерлек яҡшыраҡ. Быйыл 435 кеше юғары балл (80-дән күберәк) йыйған (былтыр - 294). Ун кеше 100 балл туплаған, 2015 йылда ундайҙар булманы. Уҡыусыларҙың 11,2 проценты минималь балды (27) йыя алманы - былтыр 25,1 процент. Һуңғы һандар үҙгәрергә мөмкин. Был - төп этаптың мәғлүмәттәре, тип аныҡланы министр урынбаҫары. База кимәлендәге математикаға килгәндә, бында ла ыңғай динамика күҙәтелә. Имтихан тапшыра алмаған уҡыусыларҙың һаны 5,1 проценттан 2,1-гә тиклем кәмегән. Отличниктар һаны, киреһенсә, артҡан: былтыр 34,9 процент (4628) булһа, быйыл иһә 51,5 процент (9424).**

**Тағы ла бер мотлаҡ предмет - рус теле. Республикала уртаса балл - 66. Юғары балл йыйған (80-дән күберәк) эштәр һаны - 15,9 процент, 2015 йылда был һан 15 процент тәшкил иткән. 100 балға 21 кеше яҙған. Уҡыусыларҙың 0,4 проценты ғына минималь балды (24) йыя алмаған.**

**Башҡортостанда 39 кеше 100 балл туплаған. Шул иҫәптән географиянан - ике, әҙәбиәттән - бер, рус теленән - 21, профилле математиканан - 10, биологиянан - ике, информатиканан - өс.**

**Дөйөм алғанда, быйыл республикала Берҙәм дәүләт имтиханы объектив һәм тотҡарлыҡһыҙ үтте. Алты тәртип боҙоу осрағы теркәлде, уларҙың эштәре юҡҡа сығарылды.**

---

**һында** Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығына, шулай уҡ БР буйынса Рәсәй тәбиғәтте күҙәтеү идаралығына (Өфө, Менделеев урамы, 148, тел. (347) 228-57-10), БР Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу министрлығына (Өфө, Ленин урамы, 86, тел. 272-74-21) хәбәр итергә кәрәк.

**Сүп-сарҙы рөхсәт ителмәгән урынға түгеү шаһиты булһағыҙ** - БР Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу министрлығына, БР буйынса Роспотребнадзор идаралығына хәбәр итегеҙ. Әгәр сүплек ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙә барлыҡҡа килгән икән - БР буйынса Россельхознадзор идаралығына, шулай уҡ муниципаль берәмектәр хакимиәттәренә, сүплек урманда булһа - БР Урман хужалығы министрлығына (Өфө, Ленин урамы, 86; тел. (347) 218-14-14) еткерегеҙ.

**Урман янғыны тураһында** 8-800-100-94-00 берҙәм түләүһеҙ номерға, йәки 8-937-327-30-13 (тәүлек әйләнәһенә) номерына, шулай уҡ Урман хужалығы министрлығына шылтыратығыҙ.

**Ағастарҙы ҡырҡыу йәки сатырлаштырыу өсөн** - Өфө ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығына (Өфө, Ибраһимов бульвары, 84, тел. (347) 251-38-11, 273-39-94) йәки республиканың муниципаль берәмектәре хакимиәттәренә шылтыратығыҙ.

**Йылға ярҙарын рөхсәтһеҙ баҫып алыу осрағында** БР буйынса Рәсәй тәбиғәтте күҙәтеү идаралығына, БР Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу министрлығына, муниципаль район йәки ҡала округының урындағы үҙидаралығына хәбәр итегеҙ.

**Тирә-яҡ мөхиткә бысратыусы матдәләр ташланыуы теркәлгәндә** БР Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу министрлығына, БР буйынса Рәсәй тәбиғәтте күҙәтеү, БР буйынса Роспотребнадзор идаралыҡтарына белдерегеҙ.

**Законһыҙ рәүештә ҡом, тупраҡ, балсыҡ ҡаҙыу осраҡтарында** БР Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу министрлығын, БР буйынса Рәсәй тәбиғәтте күҙәтеү идаралығын, БР буйынса Эске эштәр министрлығын (Өфө, Ленин урамы, 7, тел. (347) 272-08-05, 279-39-02), шулай уҡ полицияның территориаль бүлексәләрен, муниципаль ер контроле органдарын мәғлүм итегеҙ.

**Бысраҡ ҡарҙы тейешенсә урынлаштырмағанда** БР буйынса Рәсәй тәбиғәтте күҙәтеү идаралығына, БР Экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу министрлығына, республиканың муниципаль райондары һәм ҡала округтары хакимиәттәренә хәбәр итегеҙ.

**Муниципаль берәмек территорияһында тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүгә** (рөхсәт ителмәгән урында сүп-сар түгеү, урамда йәки башҡа рөхсәт ителмәгән урында машина йыуыу, ағастарҙы рөхсәтһеҙ ҡырҡыу, үҫемлектәргә зыян килтереү һ.б.) бәйле теләһә ниндәй осраҡ буйынса Өфө ҡала хакимиәтенә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Закон боҙоу фактын фотоға йәки видеоға төшөрһәгеҙ, мөмкинлек булғанда хоҡуҡ боҙоусыларҙың автомобиль номерҙарын да теркәһәгеҙ, бик яҡшы буласаҡ.

**Үрҙә атап үтелгән ведомстволарҙан тыш, күҙәтеү органы булған прокуратураға**: Башҡортостан Республикаһы Прокуратураһына (Өфө, Крупская урамы, 19, тел. (347) 272-71-42 (дежур прокурор), Башҡортостандың тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуратураһына (Өфө, Тыныслыҡ урамы, 6, тел. (347) 264-8-97), шулай уҡ республиканың территориаль прокуратураларына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

**Материалдарҙы Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғлүмәт-аналитика идаралығы әҙерләне.**

---

*ҺОРАУ-ЯУАП*



**Һорауға Суд приставтары Федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе Байгускаров Зариф Закир улы яуап бирә.**

# ЭШ ХАҠЫН ТҮЛӘМӘҺӘЛӘР...

**"Мин эшләгән предприятиела өсөнсө ай эш хаҡы түләмәйҙәр. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн ҡайҙа мөрәжәғәт итергә була?"**

*Айбулат И. Мәләүез ҡалаһы.*

- Тәүҙә предприятие етәксеһе исеменә эш хаҡын тотҡарлауҙың сәбәбен асыҡлауҙы һәм уның ҡайны ваҡытка түләнәсәген һорап, запрос яҙығыҙ. Ул ике данала төҙөлә. Әгәр ҙә директор йә уның секретары запросты ҡабул итеүҙән баш тарта икән, уны заказлы хат итеп ебәрегеҙ.

Артабан Дәүләт хеҙмәт инспекцияһына мөрәжәғәт итегеҙ. Килеп тыуған был мәсьәләне хәл итеүҙә ул беренсе инстанция булып тора. Үҙегеҙ теләһәгеҙ, унда мөрәжәғәт итеүегеҙҙе сер итеп һаҡлаясаҡтар һәм һеҙҙең мәғлүмәттәр таратылмаясаҡ. Инспекциянан яуап көтмәйенсә, район прокуратураһына ғариза яҙығыҙ. Һеҙҙең ғариза буйынса предприятиеға тикшереү тәғәйенләйәсәктәр. Бер үк ваҡытта предприятие урынлашҡан ҡаланың йә районДың суд органдарына мөрәжәғәт итергә була.

Әгәр ҙә һеҙгә предприятиеның бурысы 500 меңдән кәм икән, ҡағыҙҙарҙы мировой судьяға алып барығыҙ һәм ул 5 көн эсендә суд ҡарары сығарасаҡ. Ҡарар 15 көн эсендә үтәлергә тейеш. Әгәр ҙә сумма ҙурыраҡ, йәки эш биреүсе суд ҡарары менән риза түгел икән, район судына дәғүә ғаризаһы менән мөрәжәғәт итергә кәрәк булыр.

Шуны ла иҫегеҙҙә тотоғоҙ: судта эш хаҡын түләүҙәрен генә түгел, ә эш биреүсенән эш хаҡын тотҡарлаған өсөн проценттар ҙа һорағыҙ. Ҡағыҙҙа булараҡ, компенсация күләме коллектив йәки хеҙмәт килешеүендә билдәләнә. Мәҫәлән, эш хаҡын тотҡарлаған һәр көнгә был сумманың 0,06 проценты тура килә. Әгәр ҙә компенсация күләме билдәләнмәһә, уны түләтеү датаһына ҡарата ваҡытында түләнмәгән һәр көн өсөн РФ Үҙәк банктың рефинанслау ставкаһының 1/300 өлөшөнән (бөгөн ул 10,5 процент тәшкил итә) иҫәпләйҙәр. РФ Хеҙмәт кодексының 236-сы статьяһында шундай ҡағиҙәләр ҡаралған.

Миҫал. Әйтәйек, ойошма һеҙгә 40 мең һум эш хаҡы тейеш һәм уны 50 көн түләмәй икән, ти. Эш хаҡы суммаһынан тыш, түбәндәге күләмдә проценттар түләнергә тейеш: 1/300*10,5%*40000 һум*50 көн=700 һум

Суд ҡарары нигеҙендә суд приставтары уны башҡарыу эше аса һәм эш хаҡы буйынса бурысты түләтә. Суд приставтары һеҙҙең предприятиеның хеҙмәт низағтары буйынса комиссияһы тарафынан бирелгән танытма нигеҙендә лә боҙолған хоҡуҡтарығыҙҙы яҡлаясаҡ.

Был мәсьәләлә иң мөһиме - эште оҙаҡҡа һуҙмай, законлы хоҡуҡтарығыҙҙы яҡлауҙы талап итеп, тейешле органдарға мөрәжәғәт итеү. Әлеге мәлдә хеҙмәткәрҙең эш хаҡын юлап судҡа мөрәжәғәт итеү өсөн 3 ай ғына ваҡыты бар. Шуға ла дәғүә биреүҙе һуҙырға ярамай.

Былтыр суд приставтары 12 мең хеҙмәткәргә 404 млн һум эш хаҡын ҡайтарып бирҙе. 6 ай эсендә беҙҙең ярҙам менән республиканың 6,5 мең кешеһе эш хаҡы ала алды, уның дөйөм күләме 148 млн һумдан ашыу. 2010-2015 йылдарҙа суд приставтары хеҙмәте идаралығы эш хаҡын ваҡытында түләмәгән эш биреүселәрҙән уртаҡ суммаһы 2,4 млрд һум булған бурысты ҡайтара алды.

Бурыстарҙы түләтеүҙән тыш, беҙ эш биреүселәрҙе административ һәм енәйәти яуаплылыҡҡа тарттырабыҙ. 5 йыл эсендә етәкселәргә ҡарата 55 енәйәти эш ҡуҙғатылған. Әгәр ҙә предприятие етәкселеге эш хаҡын ваҡытында түләмәй йәки уны өлөшләтә генә түләй икән, уның намыҫы уяныуын көтмәгеҙ. Үҙегеҙҙең хоҡуҡтарығыҙҙы яҡлағыҙ.

---

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Һеңер тартылһа

❖ Был осраҡта хәрәкәтләнмәҫкә, һалҡын берәй әйбер ҡуйырға һәм еүеш бинт менән тығыҙ итеп бәйләргә.

### Серәкәй тешләһә

❖ Йәй себен-серәкәй талап йонсота. Тешләнгән урынды тырнарға ярамай, боҙолоуы бар, етмәһә, микроб эләкһә, ҡутырлар ҙа. Шул урынға дегәнәк япрағы ябығыҙ, ирәүән үләне (валериана) төнәтмәһе, сода иретмәһе, спирт, "Йондоҙ" бальзамы һөртөгөҙ.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Йәйге эҫегә ҡан баҫымы күтәрелһә, 1 стакан балға 1 стакан һуған һуты ҡушып болғатырға һәм өстөн ҡаплап, һалҡынса урында тоторға. Ашарҙан 1 сәғәт алда көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә. Әгәр йөрәк ауыртһа, склероз мәлендә ашағандан һуң 2-3 сәғәт үткәс, ошо ҡатнашманы эсергә кәрәк. Ҡан баҫымы төшкәндә лә ҡулланырға була. Дауаланыу - 2 ай самаһы. Һуғанды ҡырғыстан үткәреп, ике ҡат марлы аша һөҙөргә кәрәк.

### Быума сире

❖ Быума сире (астма) мәлендә 2 баш һарымһаҡ менән 5 лимонды ҡырғыстан үткәрергә һәм 1 литр ҡайнап һыуынған һыуға һалырға. 5 көндән һуң һөҙөргә, көнөнә 5 мәртәбә ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Һимереү

❖ Һимереүҙән ҡурҡһаң, спорт ярат - йүгер, велосипедта йөрө. Көндө 5 минутлыҡ гимнастиканан башлап ебәр. Көн дауамында бер генә мәртәбә булһа ла, үҙеңде тирләргә мәжбүр ит - был майҙы "яндыра" һәм ҡан әйләнешен яҡшырта.

### Йүтәл

❖ Бер туктауһыҙ сәсәп йүткергәндә 1 шешә һыраға 1 ҡалаҡ шәкәр ҡомо һалып йылытырға ла, 1-2 стакан эсергә.

### Быуындар ауыртҡанда...

❖ Кәбеҫтә япрағы бәйләгеҙ, бик килешә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

**✓ *Гимназиябыҙҙың үҙенә генә хас ҡабатланмаҫ йолалары ла бар. Шуларҙың араһында иң үҙенсәлеклеһе - шәжәрә байрамы. Бер ҡайҙа ла сығарылыш класс уҡыусыларының шәжәрәһе төҙөлмәйҙер.***



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

**Башҡорт халыҡ медицинаһы байтаҡ ауырыуҙарҙың сәбәбен, асылын стихиялы материализм нигеҙендә аңлатҡан. Быны халыҡ аҡылы, атап әйткәндә, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр яҡшы иҫбатлай. Күп кенә ауырыуҙарҙың сәбәбен тукланыуҙағы етешһеҙлектәрҙә - аслы-туклы йәшәү, ашығып ашау, яҡшылап сәйнәмәү, аҙыҡтың боҙолған булыуы, таҙалыҡ һаҡламауҙа күргәндәр.**

Ҡайһы бер ауырыуҙарҙың йоғошло булыуын, уларҙың йоғоу юлдарын белгәндәр. Йоғошло ауырыуҙар сирле кеше менән аралашҡанда, бысраҡ ҡулдар, ашаған аш һәм эскән һыу аша, кеше әйбере менән файҙаланғанда йоғоуы мөмкин тип иҫәпләгәндәр. Үпкә, бөйөр, һөйәк-быуын, ҡатын-ҡыҙҙың енес ағзаларының, сиҡан-шеш һымаҡ тире ауырыуҙарының башланыу сәбәбен һыуыҡ тейеүгә ҡайтарып ҡалдырғандар.

Халыҡ медицинаһы буйынса, имсәк балалар, ҡатын-ҡыҙҙар күрем ваҡытында, йөклөлөктең һуңғы аҙналарында, бәпеслəү мәлендә һәм бәпесләгәс бер ай самаһы ваҡыт һыуыҡ тейеүгә бигерәк тиҙ бирешеүсән. Һыуыҡ тейеүгә тиҙ бирешеүсәнлек ҡарттарға ла хас. Улар өсөн айырыуса ҡурҡыныс һәм мәкерле мәл тип яҙғы һәм көҙгө һыуыҡты иҫәпләгәндәр.

Тәндең башҡа урындары менән сағыштырғанда, табандар аша һыуыҡ тейеү айырыуса хәүефле һаналған, сөнки шул арҡала барлыҡҡа килгән ауырыуҙар һаулыҡты нығыраҡ ҡаҡшатҡан.

Башҡорт аҡһаҡалдары иҫәпләүенсә, тән ҡыҙған мәлдә, кеше нык тирләгәндә тиҙерәк һыуыҡ тейә. Мәҫәлән, кеше күп күләмдә һалҡын эсемлек - һыу, ҡымыҙ, кеүәҫ, буҙа эскәс, тынс хәлдә ҡалһа, хатта йәйге йылы көндә лә ергә ултырып ял итһә, нык һыуыҡ тейеүе һәм етди ауырыу башланыуы йәки булған сирҙең (ревматизм, туберкулездың) көсәйеүе мөмкин. Ә тән ҡыҙған килеш һыу ингәндә тәндең тартышыуы ла ихтимал.

Мәғлүм булыуынса, хәҙерге медицина һыуыҡ тейеүҙең зарарлы булыуын кире ҡаҡмай, халыҡ ҡарашын дөрөҫ тип иҫәпләй. Һыуыҡ тейеү нимәһе менән зарарлы һуң? Өшөү кеше организмының реактивлығын, ауырыуға ҡаршы тора алыусанлығын ҡаҡшата. Был инде ауырыу башланыуға булышлыҡ итә.

Имгәнеүҙән, көсөргәнеүҙән һаулыҡ ҡаҡшау ҙа стихиялы-материалистик күҙлектән аңлатылған. Мәҫәлән, эс төшөүҙе артыҡ көсөргәнеүҙән күргәндәр. Беҙҙең халыҡта элек "йөрәк ҡуҙғалыу" тигән ауырыу билдәле булған. Фәнни медицинала ундай диагноз юҡ. Әйтергә кәрәк, "төшөү" тигән төшөнсә башҡорт халыҡ медицинаһында үҙенсәлекле аңлатылған. Мәҫәлән, йыш ҡына "мейе төшөү" тигән диагноз ҡуйғандар.

Нәҫелдән, тыумыштан килгән ауырыуҙар ҙа халыҡ медицинаһына мәғлүм булған. Ындай сирҙәр рәтенә ҡуяныҫыҡ (эпилепсия), сифилис, үпкә туберкулезы, алкоголизм ингән. Ҡайһы бер нервы-психик ауырыуҙарҙың сығанағы булып һәр төрлө йәберләүҙәр иҫәпләнгән. Башҡорт халыҡ медицинаһында "кот алыныу" тигән сир ҙә билдәле. Уның сәбәбе исеменән үк күренеп тора - ҡот алыныу. Был ауырыу йөрәк тулау, уның йыш-йыш тибеүе, йөрәк "өшөүе", "ойоуы", "туҡтауы" кеүек субъектив һиҙемләүҙәр менән характерлана. Ҡуяныҫыҡтың сәбәбе ҡурҡыуҙа, истерияныҡы - тәрбиә кәмселектәрендә тип уйлағандар.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы" китабынан.**

**РЕДАКЦИЯНАН: 18-се, 19-сы быуаттарҙа башҡорт халҡының дауалау алым-ысулдарын И. Георги, И. Лепехин, П. Паллас, Н. Катанов, А. Соколов, Д. Никольский һәм башҡа рус ғалимдары өйрәнгән өйрәнеүгә. Ә шулай ҙа халыҡ телендә, халыҡтың йәшәйешендә, йолаларында һаҡланған материалдар бай ғына булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт халыҡ медицинаһы ошоғаса тейешенсә өйрәнелмәгән, тип раҫларға була. Башҡорт дәүләт медицина институты доценты, медицина фәндәре кандидаты, һөҡланғыс кеше Варис Зыяҡай улы Ғүмәровтың вафатына тиклем Башҡортостан китап нәшриәтендә 1991 йылда 16 мең тираж менән рус һәм башҡорт телдәрендә баҫылып сыҡҡан "Башҡорт халыҡ медицинаһы" китабы ошо өлкәлә тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр алып барасаҡ ғалимдар өсөн, һис шикһеҙ, нигеҙ-ҡулланма булырлыҡ. Уҡыусыларыбыҙға ғалимдың китабынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ. Ошо хеҙмәтте уҡығанда өләсәй-олатайҙар һөйләгән, хәтерегеҙҙә һаҡланған халыҡ дауалау алымдары тураһында редакцияға яҙып ебәрергә лә онотмаһағыҙ ине.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# УҠЫУ ЙОРТОБОҘ...

## үҙ йолалары менән көслө






**Һәр уҡыу йортоноң үҙенең йөҙө, үҙенә генә хас йолалары була. Был йәһәттән Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатын айырым билдәләп үтергә булыр ине.**

Бигерәк тә патриотик тәрбиә биреү, уҡыусылар күңелендә илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү яғынан гимназия тәжрибәһе элек-электән юғары кимәлдә булған. Мәктәптең тарих биттәренән шундай факты билдәләп үтке килә: 1980-1982 йылдарҙа хәрби-патриотик тәрбиә биреү буйынса ул ваҡыттағы 2-се мәктәп-интернат Волга буйы федераль округында өс йыл рәттән беренсе урын яулап, күсмә Ҡыҙыл байраҡ менән бүләкләнә. Әйтеүе генә рәхәт, "өс йыл рәттән"... Ошо енеүҙәре өсөн Волга буйы федераль округының хәрби комиссары 1983 йылда был байраҡты тантаналы рәүештә мәктәп-интернатҡа тапшыра. Әлбиттә, 90-сы йылдарҙа байраҡты юҡҡа сығаралар, эҙләп тә осона сығып булманы. Әммә башланғыс хәрби әҙерлек дәресе уҡытыусыһы Богданов Рәүил Хәбиб улының ҙур масштабта алып барған эше баһалап бөткөһөҙ. Шулай уҡ гимназияның шашка мәктәбен дә атап китмәү яҙыҡ булыр ине. Исемдәре бөтә донъяға билдәле шәхестәрҙе тәрбиәләп үҫтерҙе ул: донъя чемпионы исеменә лайыҡ булған Тамара Танһыҡҡужина, Айнур Шәйбәков, Айгөл Иҙрисова һәм 11 класс уҡыусыһы Руфина Әйүпова. Бөгөнгө көндә лә йәш шашистарыбыҙ, бигерәк тә, Илдус Аллағужин, Гүзәлиә Кәримова еңеүҙәре менән һөйөндөрөп тора. Стәрлетамаҡ ҡалаһында үткән уҡыусыларҙың "Чудо-шашки" ярышында республика буйынса беренсе урын яуланылар. Мәктәбендән, республикандың, илендең намыҫын яҡлап сығыш яһауҙа илһөйәрлектең бер билдәһе булып тора бит. Иң мөһиме шунда: быуындар бәйләнеше өҙөлмәне, өлкән быуын вәкилдәре башлаған эш әле лә дауам итә.

Әйе, дауам итә. Гимназиябыҙҙың үҙенә генә хас ҡабатланмаҫ йолалары ла бар. Шуларҙың араһында иң үҙенсәлеклеһе - шәжәрә байрамы. Шәжәрә байрамы һәр ерҙә лә үткәрелә бит, тиерһегеҙ, әммә бер ҡайҙа ла сығарылыш класс уҡыусыларының шәжәрәһе төҙөлмәйҙер. Тәү башлап 2010 йылда 11 класс уҡыусыларының шәжәрәһе төҙөлөп, гимназия музейы эргәһендә стенаға беркетелеп ҡуйҙы. Бына алтынсы йыл инде төрлө ырыу вәкилдәрен берләштергән шәжәрә ағасын асыу тантанаһын балалар түҙемһеҙлек менән көтөп ала. 11 йыл уҡыу осоронда юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡыусыларҙың исеме мәктәп тарихы биттәренә алтын хәреф менән яҙылып ҡуя. Һәм йыл да уҡыусыларыбыҙ киләсәккә хат яҙып, мәктәп музейына һаҡларға бирәләр. Шулай уҡ бергәләшеп "Йыл уҡыусыһы", "Йыл эҙләнеүсеһе", "Йыл спортсыһы" титулына лайыҡ булған класташтары уңыштарына ихлас күңелдән шатланалар. Быйылғы уҡыу йылында ла ининдәрен билдәләп үттек. "Йыл уҡыусыһы" исеменә 11г класы уҡыусыһы Ишһарин Руслан лайыҡ булды. Һис шикһеҙ, лайыҡлы рәүештә, сөнки гимназияла уҡыу йылдарында Руслан тарих фәненән күп тапҡырҙар олимпиадала, команда составында "Урал батыр " эпосын сәхнәләштереү конкурстарында еңеүҙәр яуланы, үҙен ысын мәғәнәһендә йәш лидер итеп танытты. "Йыл эҙләнеүсеһе" исемен Аҡсулпанова Гөлдәр яуланы. "Бәләкәй фәндәр академияһы", "Минең бәләкәй Ватаным", "Вәлиди уҡыуҙары" һәм башҡа бик күп фәнни-эҙләнеү конкурстарында еңеүҙәр яуланы ул. Ә инде "Йыл спортсыһы" титулын Руфина Әйүповаға тапшырҙылар. Шашка буйынса күп тапҡырҙар Башҡортостан, Рәсәй чемпионы, өс тапҡыр Европа, бер тапҡыр Донъя чемпионы исемен яуланы Руфина. Яуланы ғына түгел, ә бик күп йәш шашистарҙың кумирына ла әйләнеп өлгөрҙө. Әйе, сығарылыш уҡыусылары араһында башҡа талантлы уҡыусылар ҙа бар: оҫта бейеүселәр, йырсылар, эҙәрмәндәр, шағирҙар, олимпиада еңеүселәре һәм башҡалар. Һәр берәһенең үк булмаһа ла, күп уҡыусыларҙың исемдәре яңғыраны шәжәрә байрамында. Барыһын да ихлас алҡыштарға күмделәр.

Гимназиябыҙҙағы икенсе мөһим йолаларҙың береһе - "Йондоҙҙар парады". Уҡыу йылы барышында ҙур уңыштарға өлгәшкәндәрҙе ҡотлау тантанаһы ул. Ындай ҡотлауҙар күп мәктәптәрҙә үткәрелә, "Чемпиондар балы" тип тә атайҙар. Был тантаналы байрамдың иң мөһим үҙенсәлеге шунда: уҡыусыларға башҡорт яҙыусыларының китаптарын бүләк итәбеҙ. Быйыл 100 уҡыусыға М. Кәримдең 6-сы том китабы, Н. Мусиндың 10-сы томы, Т. Ғариповаһың "Бөйрәкәй" романы бүләк ителде. "Йондоҙҙар парадын" үткәргән йылдарҙа меңгә яҡын уҡыусы китаплы булды. Тәнәфес ваҡытында ҡулына китап тотҡан уҡыусыларҙы күреү күңелгә йылы нур булып яғыла. Тимәк, был сара аҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләү сараһы ла булып тора. Гимназияла үткән һәр байрам, конкурс, йолалар уҡыусыларҙа телһөйәр, илһөйәр шәхес тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Илебеҙ киләсәге тап шундай йәштәр ҡулында бит.

**Рифат ӘЙҮПОВ,**
**Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*ХАҠ ТАМЫРЛЫБЫҘ*

**Элек-электән ата-бабаларыбыҙ ҡор йыйып, әйтер һүҙен әйтеп, тынғылыҡ бирмәгән уйҙарын уртаға һалып һөйләшеп, ҡыуаныстарын уртаҡлашып, аралашып йәшәгән. "Ил төкөрһә - күл була, тырым-тырағайлыҡтан бар нәмә лә көл була" икәнен яҡшы аңлаған улар. Борондан килгән йолаға таянып, изге Рамаҙан айының аҙағында күбәләк ырыуы вәкилдәре ҡорға йыйылды. Киләһе йыл үткәреләсәк Оло йыйынға әҙерлек кеүек тә булды был.**

# КҮБӘЛӘК ЫРЫУЫ БАШҠОРТТАРЫ...

## рәхмәтле ерҙә ҡор йыйҙы



Күбәләк ырыуы башҡорттарының йыйыны Рәхмәт ауылының яҙма сығанаҡтарҙа теркәлеүенә 260 йыл тулыу менән тап килде. Архив мәғлүмәттәре буйынса, ауылға Рәхмәтулла Ҡыҙраев нигеҙ һалған, 18-се быуат аҙағында бында 12 йортта 104 кеше, 1920 йылда 75 йортта 368 кеше йәшәгән. 2016 йылғы мәғлүмәттәр буйынса ауылда 116 йорт, кешеләр һаны - 360. Күренеүенсә, тормош яҡшырыу менән халыҡ һаны артып китмәгән. Был мәсьәлә күбәләк ырыуының күренекле шәхестәренең кәңәшмә-ултырышында ла тикшерелде. Киләсәктә йәштәрҙе ауыл ерендә ҡалдырыу, ишле ғаиләләр моделен пропагандалау буйынса тәҡдимдәр индерелде. Борон барымта-ҡарымталар ваҡытында ҡаҙаҡтар иң оло табышҡа һанап, башҡорттоң килер көндәргә өмөтөн - йәш егет һәм ҡыҙҙарын урлауы осраҡлы түгел. Был рәүешле улар тәрән тамырлы, көслө рухлы, ғорур, яугир халыҡ менән ҡан яңыртҡан. Бөгөн беҙ үҙ теләгебеҙ менән ҡыҙҙарыбыҙҙы башҡа милләт вәкилдәренә кейәүгә бирәбеҙ, улдарыбыҙ ситтән килен алып ҡайта. Киләсәк өсөн борсолған зыялыларыбыҙ ошо турала ла һүҙ ҡуҙғатты. Ғаиләлә баланың рухын тәрбиәләү, милли үҙаңын үҫтереү хаҡында ла урынлы кәңәштәр яңғыраны.

Күбәләк ырыуы башҡорттары ҡорона алыҫ араларҙы яҡынайтып, Башҡортостандың төрлө ҡала-ауылдарынан, Силәбе өлкәһенән дә килгәйне ырыуҙаштар. Рәхмәт ауыл Советы депутаты Исрафил Йәнсәйетов сараға йыйылыусыларҙы килгән ҡунаҡтар менән таныштырып, йыйындың әһәмиәте тураһында һөйләне. Ә ауылдашыбыҙ, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова тыуған еренең тарихы, күренекле ырыуҙаштарҙың яҙмышы хаҡында телгә алып үтте:

- Ҡурҡыу белмәҫ, сая ата-бабаларыбыҙ кешенекенә теймәгән, үҙенекен бирмәгән. Батша хөкүмәте ваҡытында еребеҙҙе кантондарға бүлгәс, Верхнеуральск ҡалаһын төҙөргә тотоналар. Күбәләк һәм тиләү ырыуы кешеләре үҙ ерҙәрен сит кешеләргә бирмәҫ өсөн ҡәлғәгә 11 тапҡыр үрт һала, тик тулыһынса таштан эшләй башлағас ҡына туҡтайҙар. Ерен, илен һаҡлау өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған ата-бабаларыбыҙ булған өсөн генә беҙ бөгөн ошо ерҙә баҫып торабыҙ, был хаҡта онотмайыҡ...

Ырыуҙаштарҙың танышыу, ҡотлау һүҙҙәре тамамланғас, ҡунаҡтар Рәхмәт ауылында донъя көткән дүрт ара - Рәхмәтовтар, Ғәлекәйҙәр (Торналар), Ләлимдәр һәм Ҡонайҙар - ултыртҡан дүрт тирмәне ҡарап үтте. Ауылдаштар тирмәнең һәр береһен үҙенсәлекле, зауыҡ менән биҙәп, күбәләктәрҙең ғөрөф-ғәҙәттәре ҡушҡанса йыр-бейеү, иманлы һүҙҙәр менән ҡаршылап, һәр араның тарихы, бөгөнгөһө менән таныштырып, ашъяулыҡ тулы милли ризыҡ менән һыйланы. Артабан сәхнәлә дауам иткән концерт, башҡорт халҡының милли уйындары, ярыштар барған майҙанды ҡалдырып, махсус саҡырылған утыҙ ике кеше мәктәп бинаһына йүнәлде. Улар тыуған төбәге, ырыуҙаштары яҙмышына ҡағылышлы мөһим мәсьәләләр буйынса етди әңгәмәләшеп, күбәләк ырыуы башҡорттары йыйынының резолюцияһын ҡабул итте. Был төбәктә эшҡыуарлыҡты үҫтереү, ун һигеҙ ауылды тоташтырған юл һалыу, эшһеҙлек һәм эскелектән ҡотолоу кеүек көнүҙәк проблемалар тикшерелде. Шулай уҡ киләһе йыл күбәләк ырыуының Оло йыйынын үткәреү өсөн ойоштороу комитеты ағзалары һайланды, мөмкинлектәр табып, "Күбәләк ырыуы шәхестәре" исемле китап сығарырға ҡарар ҡабул ителде. Әйткәндәй, быйылғы күбәләк ырыуы башҡорттарының йыйынын үткәреүҙең бар мәшәҡәтен, сығымдарын ауыл халҡы, мәктәп коллективы күтәрҙе. Шулай уҡ ойоштороусылар сараның бағыусылары Р.Ғ. Ҡыуатов, Р.Б. Ғәйфуллин, Ә. Фазлетдинов, Ф.Ф. Йәнғәлиев, Исмәғил һәм Исрафил Йәнсәйетовтар, Б.Б. Мансуров, А.Ш. Мөхәмәтдинова, М.Т. Сөнәғәтоваға рәхмәт белдерҙе. Әлбиттә, күбәләк ырыуы башҡорттарының гимн һүҙҙәре авторы Мәүлит Ямалетдинов һәм гимндың көйөн ижад итеүсе Илгиз Йомағужин кеүек билдәле ырыуҙаштарҙың да хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Киләсәктә күбәләк ырыуының эмблемаһы ла эшләнер, тип көтөлә - конкурс иғлан ителгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күбәләк ырыуы башҡорттарының йыйыны шауғөр килеп үтеп тә китте. Бер көнгә генә осрашһаҡ та, йыл буйына әҙерләнеп, ниәт иткән уйҙарыбыҙ тормошҡа ашып, бөтәһе лә ҡәнәғәт ҡалды. Иң мөһиме, ырыуҙаштар, бер ара кешеләре, туғандар бер-береһен күреп, танышып, артабан да берҙәмлектә, ярҙамлашып йәшәргә кәрәк, тигән фекер төйнәп ҡайтты.**

**Мәүлиә САФИУЛЛИНА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



**1742 йыл** - һәләтле тип иҫәпләнгән администратор һәм дипломат И.И. Неплюев Ырымбур комиссияһы начальнигы итеп тәғәйенләнә. 1742-1757 йылдарҙа - Ырымбур крайының тәүге губернаторы.

**1742 йылдың 26 апреле** - И.И. Неплюев Ырымбур ҡалаһының урыны мәсьәләһе менән шөғөлләнеү өсөн Һамарға килә. Материалдарҙы өйрәнгәс, ул ҡаланы Һаҡмар йылғаһы тамағынан алыҫ түгел ерҙә төҙөү уңайлы буласаҡ, тигән һығымтаға килә. 1743 йылда Ырымбурға нигеҙ һалына. Крайҙа тау эштәре үҫешенең мөһимлеген аңлап, Неплюев тау заводтары төҙөлөшөнә ныҡ булышлыҡ итә. 1754 йылда башҡорттарға яҫаҡты ҡаҙнанан тоҙ һатып алыуға алмаштыра. Башҡорттарҙың һаны артып китмәһен өсөн И.К. Кирилов тарафынан эшләнгән 25 йыллыҡ хәрби хеҙмәт тураһында проектты ғәмәлгә ашыра. 1755-1756 йылдарҙа Батырша ихтилалын баҫтыра. Аяуһыҙ эҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып, 50 меңдән ашыу башҡорт Ҡаҙағстан ерендә йәшеренергә мәжбүр була. Неплюев ҡаҙаҡтарға: "Башҡорт ирҙәрен үлтерегеҙ, уларҙың мал-тыуары, ҡатындары һәм балалары һеҙгә ҡаласаҡ", - тип мөрәжәғәт итә. Ҡаҙаҡтар ҡотороноп был "эш"кә тотонғас, Яйыҡ аша ҡайтанан үҙ ерҙәренә сығырға тырышҡан башҡорттарҙы урыҫ ғәскәрҙәре ут яуҙырып ҡаршылай. Һуңыраҡ Неплюев: "Был ике халыҡты беҙ мәңгелеккә дошманлаштырҙыҡ", - тип әйткән.

**1743 йылдың 19 апреле** - яңы (әлеге) урынында Ырымбур ҡалаһы төҙөлә башлай.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Инеш

Тарихсылар килтергән мәғлүмәттәр буйынса, беҙҙең эраға тиклем VIII быуатта Волга-Урал төбәгендә фин-уғыр ҡәбиләләре йәшәгән, аҙаҡ улар башҡа ерҙәргә күсеп ултырған. Был китапта беҙ тарихи сығанаҡтарға таянып фин-уғыр халыҡтарының барлыҡҡа килеүе мәсьәләләренә лә туҡталырбыҙ. Ҡәбиләләрҙең туҡтауһыҙ күсенеп тороуы төрлө халыҡтарҙың аралашыуына ла килтергән. Хеҙмәттә "уғыр халҡы"н төплөрәк итеп өйрәнергә тырыштыҡ. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев яҙыуынса, башҡорт халҡы төрлөсә атап йөрөтөлгән. Урыҫтарҙың тарихи материалдарында һәм дәүләт баҫмаларында ул Югор: "600 йыл башында - руми буйынса Волганан Кубань һәм Ҡырымға тиклем, Болғар өлкәһенә тиң булған Ҡат Юғра һәм Утру Юғра халҡы йәйелгән... " (179, 234-се бит). Мәҫәлән, В.Н. Чернецов Обь буйында, Урал аръяғында һәм Көнбайыш Себерҙә иртә тимер быуатында уғыр ҡәбиләләре хаҡында яҙып ҡалдырған (160, 118-се бит). Башҡорттар борон-борондан составында мәсәғүт, табын, бөрйән, үҫәргән һәм башҡа ҡәбиләләре булған уғыр нигеҙле халыҡ иҫәпләнә. Евразияның башҡорттарға ҡандаш булған башҡа уғыр ҡәбиләләре төрлө сәбәптәр һөҙөмтәһендә һаман да тарихтың аҡ таптары булып йөрөй һәм башҡорттарҙың тарихынан ситтә тороп ҡалған. Беҙ был китапта был бушлыҡты өлөшләтә тултырырға тырыштыҡ, киләһе быуындар уларҙы тулыландырыр, тип ышанабыҙ. Һөҙөмтәлә шундай һығымтаға киләбеҙ: башҡорттар - үҙ составына мәсәғүт, табын, бөрйән, үҫәргән һәм башҡа ҡәбиләләрҙе индергән уғырҙар ҡатнашмаһынан барлыҡҡа килгән халыҡ.

Башҡорттар боронғо төрки телдә һөйләшкән, төрки яҙма менән файҙаланған, төркисә яҙған (91, 11-се бит). X быуат башында уҡ "Башҡорт" тигән илдең барлығы билдәле. Был илдә күп һанлы ҡәбиләләр һәм ырыуҙар Башҡорт хан етәкселегендәге бер берәмеккә ойошҡан, "Башҡорт" этнонимының килеп сығыуы варианттары араһында ошоһо башҡаларынан нигеҙлерәк булып тойола. Ҡайһы бер авторҙарҙың яҙмаларында ла Башҡорт хан тураһында мәғлүмәттәр осрай. Үкенескә күрә, хәҙерге тарихсы ғалимдарҙың ҡайһы берҙәре башҡорт халҡының тарихын Башҡорт ханы һәм Болғар осоро менән бәйләгәндә бик һаҡ ҡылана. Был осраҡта улар тотош тарихи процесс булырлыҡ боронғо башҡорт тарихын урап үтә.

Күп кенә тарихсылар үҙенең хеҙмәтендә башҡорт халҡының боронғо тарихын өйрәнеп, тарихи аренала башҡорт халҡы тотҡан урынды билдәләне. Күп кенә авторҙар, шул уҡ ваҡытта һуңғы осор ғалимдары, урта быуаттарҙағы тарихи процестарҙы өйрәнеп, унда башҡорт халҡының йәшәү рәүешен, башҡа халыҡтар менән мөнәсәбәтен күҙ алдына баҫтырыуға өлгәште. Был йәһәттән беҙ XIX-XX быуат башҡорт ғаимдары М. Өмөтбаевтың, З. Вәлидиҙең һәм башҡаларҙың хеҙмәттәре менән таныштыҡ. Хәҙерге заман ғалимдарының ентекле тикшеренеүҙәре башҡорт халҡының үткәнен тәрәндән белергә булышлыҡ итте. Ғалимдар Н. Мәжитов, Ә. Әсфәндиәров, аталы-уллы Ирек һәм Салауат Аҡмановтар, Р. Шәкүров, Р. Буканова, Ә. Сөләймәнов, М. Ҡолшәрипов, С. Ғәлләмов, Р. Вахитов, С. Исмәғилев, С. Хәмиҙуллин, Ю. Йосопов, Р. Аҫылғужин һәм башҡа бик күптәр үҙ халҡының тарихын өйрәнеү офоҡтарын киңәйтте, тәрәнәйтте һәм бының менән һис һүҙһеҙ үҙ халҡының ихтирамына лайыҡ булды. Ирекһеҙҙән С. Шәриповтың (М. 2013) түбәндәге һүҙҙәре иҫкә төшә: "Халыҡтың милли ғорурлығы унын тарихында ята"

**(Дауамы. Башы 29-сы һанда).**

***✓ Көньяҡ Уралда формалашҡан, тарпандар сифаттарын үҙендә һаҡлаған йылҡыларҙы башҡорттар, "яратып", атҡа тиклем үҫтереүгә өлгәшкән һәм шулай итеп Башҡорт тоҡомло аттар барлыҡҡа килгән.***

# АТ ӨҪТӨНДӘ

## ысын асылыма

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - "Любизар" Беренсе башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубының идара рәйесе Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ менән күптән фекерҙәш, теләктәш, рухташ беҙҙең редакция. Илдар Ғиндулла улы үҙенең яңы идеяларын, яңы башланғыстарын һәм проекттарын, гәҙәттә, киң йәмәғәтселеккә тап беҙҙең гәзит аша еткерә. Бөгөн унан башҡорттоң айырылғыһыҙ дуҫы - ат тураһында һөйләүен үтендек. Был теманың актуаллеге нигеҙлелер, тип уйланыла, сөнки ат менән йылҡы төшөнсәләрен бутаған саҡтарыбыҙ ҙа йышайҙы. Илдар Ғиндулла улы был төшөнсә тураһында ла мауыҡтырғыс итеп һөйләр. Тағы ла ул "ат яратыу" һүҙенә лә аңлатма бирәсәк. Беҙ "яратыу" һүҙен бары тик һөйөү, яҡын күреү тип кенә аңлап өйрәнгәнбеҙ. Баҡтиһәң, "ат яратыу" тигән һүҙбәйләнешкә бөтөнләй икенсе мәғәнә һалына икән. Ҡыҫҡаһы, һүҙ - Илдар ШӘЙӘХМӘТОВҡа.**

### Ат уйнатып, ялан буйлатып...

Һүҙемде "Өфөлә йәшәүсе Республика Хәрби Дан музейы ғилми хеҙмәткәре тормошонда атҡа урын бармы?" тигән һорауҙан башлайым әле. Эйе, минең ысын атым да, "тимер ат"ым да юҡ. Әммә минең һымаҡтарҙы, ғәҙәттә, "ат ене ҡағылған" тиҙәр. Йыш ҡына хәрби-тарихи реконструкцияларҙа башҡорт яугирҙары сүрәтендә сығыш яһайбыҙ. Боронғо башҡорт яугиры бер һуғышта ла йәйәү йөрөмәгән, ә атына атланып хәрәкәт иткән. Атҡа менһәң, әгәр ул килешле эйәр-өпсөнлө, йылҡылдап торған көр ат икән, үҙеңде кәмендә ил батыры һымаҡ хис итәһең. Был тойғоно һыбай килеш кенә кисереп булалыр.

Клубыбыҙ "Любизар" Беренсе атлы башҡорт полкы" тип аталһа ла, үҙебеҙҙең атыбыҙ юҡ. Беҙгә дуҫтарыбыҙ ярҙамы ла етә. Уларҙың атын бер нисә көнгә ҡуртымға алып, тамаша ваҡытында бер-ике сәғәт һыбай йөрөп алыу беҙгә бик оҙайлы ҡәнәғәтлек бирә.

Әйткәндәй, сағыу бер хәтирә иҫкә төштө. Бородино яланында гөрһөлдәгән туп канонадаһы ваҡытында фронттың алғы һыҙығында урынлашҡан артиллеристарға Рус ғәскәре генералы фарманын еткереп, полкыма кире ҡайтып барам. Минең атым, Баймаҡта тыуған, дүнән сағында Мәскәү янындағы Безбубово ауылы фермерына һатылып, тәрбиәләнгән Мерлин ҡушаматлы ерән айғыр, бер мәл мине юлда осраған бер уйһыу соҡор аша осортоп алып сыҡмаһынмы! Минең күҙгә салынмаған соҡорҙо күреп, һөрләкмәгән, ҡурҡыуын еңеп, һикереп үткән бит әле ул, тип, әле лә һөйөнәм. Ҡайһы бер аттың, туп тауышынан ҡурҡып, фалиж һуҡҡандай дер ҡалтырап торғанын үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар. Мал ҡурҡһа, шыбыр тиргә бата. Уны хужаһы ла урынынан ҡуҙғалта алмай. Мерлин мине һис ҡасан алдаманы, баш бирмәй аҙапландырманы. Әле бер тапҡыр ҙа дары еҫен еҫкәмәгән, туп тауышына өйрәнмәгән ат өҫтөндә йәнтәслим сабып, заданиены теүәл үтәп, үҙем генералдан - рәхмәт, ә башҡа кавалеристарҙан - һоҡланыу һүҙҙәре ишеттем. Мерлин аҡыллы, кәрәк саҡта хәйләкәр, тәүәккәл, сыҙамлы, сама менән етеҙ, кәрәк икән, көслө ат ине. Мин уны үҙебеҙсә яратып "Мөхәммәтрәсүл" тип атаным...

2013 йылда Лейпцигта үткән сарала, 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған хәрби-тарихи реконструкцияла, башҡорт яугирын тейешле кимәлдә күрһәтә алыуым менән ҙур бәхет кисерҙем. Унда миңә тип Илче (мин уны башҡортсалап, Илсе тип йөрөттөм) ҡушаматлы яҡшы өйрәтелгән көр туры бейә эйәрләнеләр. Илсе - бейек тә түгел, башҡорт тоҡомло кеүек ыҡсым, арҡаһы бүрәнә кеүек киң, һырты йылҡылдап тора. Ләкин беҙҙәге аттар ише һөнәрһеҙ түгел. Мин уға өҙәңгегә баҫып менеп тормайым - ятҡырып ҡына менәм. Ҡорал менән атланаһың да, "Тор!" тиһәң, ул аяғына баҫа. Үҙеңде һәйкәлгә менеп ултырған кеүек хис итәһең. Һине ҡарап тороусы кешеләргә лә, үҙеңә лә күңелле. Немецтар ул атты хәрби-тарихи реконструкцияларға яҡшы әҙерләгән.

Үҙебеҙҙә, Өфө дәүләт Ат һарайында, бихисап хәрби уйындарҙа яу атым булған Саян ҡушаматлы оло йәштәге айғыр ҙа күңелемә яҡын. Өфө дәүләт Ат һарайының элекке директоры (әле ул хаҡлы ялда), башҡорт тоҡомло аттарға мөкиббән киткән Николай Петрович Штенцев ярҙамы менән беҙ Бородинола үткән хәрби-тарихи реконструкцияла бер түгел, ике ат менән сығыш яһаныҡ. Шул аттарҙың береһе Саян исемле ине. Әйткәнемсә, Саян менән беҙгә бик күп сараларҙа ҡатнашырға тура килде. Форсаттан файҙаланып, предприятие коллективына гәзит аша рәхмәтемде еткерергә теләйем.

### "Ат яратыу" төшөнсәһе

Башҡорт тоҡомло ат эпосҡа Аҡбуҙат исеме менән инеп киткән. Ул үҙе үк ат тигән һүҙ. Йылҡы түгел. Атты тынысландырыу өсөн уның муйынынан һыйпап яратыу - бер булһа, уны иһә һөнәргә өйрәтеү - икенсе төрлө "яратыу" була. "Ат яратыу" мәҙәни күренеш, хатта цивилизация күренеше ул. Урамда йылҡы малы тотоу - бер хәл, ат тотоу - икенсе. "Атты яратыу", йәғни уны һөнәрле итеү ваҡыт, көс, сабырлыҡ, сығымдар талап итә.

Башҡорт атының бер нисә төрө бар. Был халҡыбыҙ төйәк иткән тәбиғәт зоналарының төрлөлөгө менән аңлатыла. Шулай итеп, Башҡорт атының урман-дала зонаһына һәм таулы зонаға яраҡлашҡан ике төрө бар. Көньяҡ Уралда формалашҡан, тарпандар сифаттарын үҙендә һаҡлаған йылҡыларҙы башҡорттар, "яратып", атҡа тиклем үҫтереүгә өлгәшкән һәм шулай итеп Башҡорт тоҡомло аттар барлыҡҡа килгән. Бүтәндәр ул аттарҙы башҡорттар мәҙәниәтенең бер өлгөһө итеп ҡабул иткән. Әгәр шул йылҡыларҙы бүтән бер милләт тәрбиәләгән булһа, аттар уларҙың исеме менән аталып йөрөтөлөр ине. Тик был эшкә башҡорттар тырышлыҡ һалған. Ат башҡорт ир-егетенең дуҫына әйләнгән. Ат яуҙа ла, тыныс тормошта ла, һунарҙа ла, хужалыҡ эшендә лә файҙаланыла. Ә һөнәрһеҙ ат кире йылҡы хәленә ҡайта. Бәйгеләрҙә еңгән аттарҙан да яп-ябай йылҡы ҡолондар тыуа. Йылҡы русса "лошадь" була. Һис юғында, эшкә генә яраҡлы ундай атты алаша тип тә әйтәбеҙ. Әйтәйек, тәбиғи рефлекстары менән генә түл йыйып, көрәйеп, иркенлектә генә йәшәгән мал ул - йылҡы. Һарайында ите өсөн генә йылҡы һимертеүсе хужа, тимәк, атай-олатайҙар йолаһынан ситләшеп, тик ит ашап ятыусы ғына. Беҙҙең бурыс - һәр ҡолондо ат рәүешенә еткереү. Элек башҡорттар аттарының һөнәрҙәрен бер-береһенә күрһәткән, бер-береһе менән ярышҡан, маҡтанышҡан. Бөгөн иһә беҙ ат хәленә еткерелгән йылҡыларыбыҙ күплеге менән маһая алмайбыҙ.

"Ат яратыу" мәҙәниәте бөтөн халыҡтарға ла хас тип әйтеп булмай. Ат яратыуҙы әлегәсә ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, төркмәндәр һаҡлап ҡалған. Төркмәндәрҙә аҡһыл төҫтәге сүл аты - Ахал-тәкә (Ахалтекинская) тоҡомо бар.

### Ат итеме, әллә йылҡы итеме?

Ат итеме, йылҡы итеме, тип, күптәр аҙаплана хәҙер. Быны хатта белгестәр араһында ла белмәгәндәр осрай. Мәҫәлән, 2009 йылда Чапаевтың Өфөнө алыуына арналған хәрби-тарихи реконструкцияла ҡатнашыу өсөн клубыбыҙға унға яҡын ат кәрәк булды. Ярҙам һорап, Башҡортостан Республикаһының Ауыл хужалығы министрлығындағы йылҡысылыҡты үҫтереү бүлегенә мөрәжәғәт иттем. Унда миңә ошо сара үтәсәк Ҡыҙылъяр ауылындағы бер фермерҙың йылҡы өйөрөнән ун ат һайлап алырға кәңәш иттеләр. "Уларға эйәр һалынғаны бармы һуң?" тип һорауыма, "Юҡ", тигән яуап ишетелде. "Ул өйрәтелмәгән йылҡыға атланам, тип, һеләгәйебеҙҙе ағыҙып тороуҙан ни файҙа, улар бит ат түгел..." тигәйнем, белгестәр: "Ә йылҡы



***ИЛДАР ШӘЙӘХМӘТОВ:***

*Беҙҙең бурыс - һәр ҡолондо ат рәүешенә еткереү. Элек башҡорттар аттарының һөнәрҙәрен бер-береһенә күрһәткән, бер-береһе менән ярышҡан, маҡтанышҡан. Бөгөн иһә беҙ ат хәленә еткерелгән йылҡыларыбыҙ күплеге менән маһая алмайбыҙ.*

***✓ "Һабантуйҙарҙа, башҡа милли байрамдарыбыҙҙа халыҡты аттар менән бәйле уйындарға, "Ат яратыу" сәнғәтенә ылыҡтырырға, йәйәнән атыу, сәкән һуғыу кеүек ат өҫтөндә уйналған уйындарҙы күберәк күрһәтергә кәрәк".***

# САҠТА... ҡайтам

менән аттың айырмаһы ниҙә һуң?" - тигән һорау бирҙе. Уларҙы һынамаҡ булып, яуап табыуға биш минут ваҡыт бирҙем. Ваҡыт үтте, һорау яуапһыҙ ҡалды. Мин уларға йылҡы менән аттың сифаттарын аңлатып биргәс, улар хайран ҡалды. Йылҡыны менеп булмай. Ул ялы-ҡойроғо таралмайынса, яланда утлап йөрөй. Ул генофондты һаҡлаусы ғына.

Ит темаһына әйләнеп ҡайтайыҡ. Башҡорттар бер ваҡытта ла аттарын һуймаған. Атын иптәш итеп күргәнгә күрә, йәлләп, уға ҡартайып, үҙ үлеме менән үлергә мөмкинлек биргәндәр. Йылҡы итен генә ашағандар. Әйткәндәй, милләттәштәрҙең күпләп йылҡы көтөп, итен-ҡаҙыһын һатып, аҡсаға "батып" ултырғандарын да күргәнем юҡ. Бер ыңғайҙан, ошо мәсьәләне лә ҡуҙғатып үтке килә. Йәл бит: Баймаҡ яҡтарында йылҡыны үрсетәләр ҙә, күмәртәләп алыусыларға ныҡ осһоҙ хаҡҡа һатып ебәрәләр. Үҙебеҙгә йылҡы продукцияһы етештереү эшен йәнләндерергә ине ул. Юғиһә, Һамар, Һарытау өлкәләрендә, Татарстан Республикаһында етештерелгән йылҡы ите, ҡаҙылыҡ һатыла ла бит, ә башҡорт йылҡыһы ите, "башҡорт ҡаҙылығы" тигәндәрен күргәнебеҙ юҡ. Йылҡының һәр һынынан файҙа алырға була...

## Атым бар, йүгәнем юҡ…

Шул уҡ аттың тиреһе тураһында бер нисә һүҙ. Беҙҙең күн тегеүсе оҫтабыҙ бар. Ул клубыбыҙ өсөн төрлө күн кәрәк-яраҡтары тегергә булһа, материалды Ҡытайҙан яҙҙырып ала. Ҡайҙа элекке күн эшкәртеүсе предприятиелар? Эшҡыуарҙар ошо өлкәлә үҙ эшен асып ебәрһә, һорау ҙа артыр ине бит. Халҡыбыҙға ниәт итеү һәм сәбәп ҡылыу ғәмәле етмәй. Ниәте булһа, сәбәбе лә табыла. Бер маҡсат барлыҡҡа килһә, ул маҡсат янына бер фекерле кешеләр, мөмкинлеге булған эшҡыуарҙар йәйлап-йәйлап йыйыла ла китә. "Ат яратыу" нимә менән бәйле? Һинең янында оҫталар барлыҡҡа килә башлай. Ағас эшкәртеп, ҡайын ағасын юнып, башҡорт тоҡомло аттар янына хәҙер башҡорт эйәрен тергеҙергә кәрәк. Сит илдән, Европанан килтерелгән теләһә ҡайһы йомшаҡ эйәр беҙҙең аттарҙың арҡаһын барыбер өйкәй, сөнки улар икенсе аттарға тип яһалған, беҙҙең аттарҙың арҡаһы ла, тәненең ҙурлығы ла үҙенсә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, музейҙа ғына һаҡланған өлгөләрҙе өйрәнеп, уларға ҡарап, башҡорт эйәрҙәрен тергеҙергә тейешбеҙ. Ысын мәҙәниәт музейҙа быяла эсендә булырға тейеш түгел. Ул тере булырға тейеш. Был эшлекле, бай хужалыҡлы, бөтмөр эшҡыуарҙарҙан да тора. Үҙенең башҡаларҙан айырып торған билдәләре булған, әммә етештереү туҡталып ҡалған уҡалы, көмөшлө йүгәндәрҙе яңынан яһай башларға кәрәк. Башҡорт оҫталары барлыҡҡа килһә, уларға йәрминкәләр кәрәк. "Ат яратыла" башлаһа, был һөнәр ҙә үҙенән-үҙе тергеҙеләсәк. Учалы районында бер-нисә оҫта йүгән эшләй ул, тик, һорау булмағас, улар үҫә алмай. Бында Хөкүмәттең ярҙамы кәрәк.

Мәҫәлән, сит ерҙә башҡорт яугирҙарын һынландырыуыбыҙҙы белгән бер кеше йәшникләп ҡымыҙ килтерә, икенсеһе ҡурайын тоттора, өсөнсөһө - бал, дүртенсеһе - шифалы минераль һыу алып килә һәм башҡалар, һәм башҡалар. Тимәк, ниәт булһа, сәбәп ҡылыусыһы ла табыла.

## Аттың файҙаһы

Башҡорт гимназияларыбыҙ ҡалаларҙа ла, райондарҙа ла бар, Аллаға шөкөр. Ләкин улар һуңғы ваҡытта үҙ йөҙҙәрен, йүнәлештәрен юғалта башлаған һымаҡ тойола ниңәлер. Минең уйлауымса, башҡорт гимназияһы тип аталған уҡыу йорто, директорҙан, уҡытыусыларҙан башлап, башҡаларҙан нисегерәк айырылып тороу юлын эҙләргә тейеш. Уларҙың һәр береһе милли мәҙәниәтебеҙҙең ниндәйҙер өлгөһөнә йөҙ борорға тейеш. Шуның өсөн бындай гимназияларҙа үҫмерҙәрҙе "ат яратыу" төшөнсәһе менән таныштырыу, гимнастикаға ылыҡтырыу буйынса факультативтар ойоштороу мотлаҡ кәрәк. Сөнки һыбай йөрөү - үҙе гимнастика. Һыбай йөрөү арҡаны тура тоторға өйрәтә. Ул йөҙөү мәлендәге һымаҡ уҡ, мускулдарға ял да, үҙенә күрә көсөргәнеш тә бирә. Ул ҡан тамырҙарын киңәйтә, массаж һөҙөмтәһен бирә. Ирҙәргә был ныҡ файҙалы. Элек халҡыбыҙ шуға үрсемле, һауһаҡ, талымһыҙ булған. Шуның өсөн, Мәғариф министрлығы башҡорт гимназияларындағы тәрбиәүи программа буйынса ошо ҡыйыу аҙымды эшләһен, йәғни уға ҡортсолоҡтоң башланғыс нигеҙҙәрен, һыбай йөрөү нигеҙҙәрен өйрәнеүҙе индерһен ине. Быны, бәлки, ДОСААФ йүнәлешендә, йә йылҡы аҫраусы хужалыҡтар менән килешеүҙәр төҙөү аша ла хәл итеп булалыр. Кеше менән тәбиғәттең бәйләнешен һаҡлап ҡалыу мәнфәғәтендә әлегә формалашып бөтмәгән фекерем булды был. Башҡорт гимназиялары балалары Аҡбуҙат менән эпостан ғына түгел, ә ипподромдарға барып та танышһын ине. Киләсәк быуын үҙе өйрәнгән предметты күреп, тойоп үҫергә тейеш.

## Ат өҫтөндә уйналған уйындарҙы тергеҙеү

Элек башҡорттар ҡурайҙы һыбай йөрөгән сағында, йәғни ат өҫтөндә уйнаған, ә сәхнәнән уйнамаған. Дәртле, ҡыҙыҡлы көйҙәр, дүрт тактлы марштар ат өҫтөндә тыуған. Мәҫәлән, "Ҡара юрға" көйө. Уйнаҡлап торған айғыр өҫтөндә йәш килен ергә төшә алмай ултыра. Егете уны төшөрөргә тейеш. Уның өсөн атты йыуатырға, тынысландырырға кәрәк. Шул процесты көйгә һалғандар. "Өҫтөндәге һылыуыңды төшөрсәле, юрғам", - тигәндәр. Мин ат өҫтөндә, юртып барғанда ҡурай уйнарға өйрәнеүем өсөн бик тә һөйөнәм.

Беҙ халҡыбыҙҙың традицияларын кире ҡайтарырға тейешбеҙ. Йыр, бейеүгә генә ҡайтып ҡалмай ул традициялар. Мәҫәлән, былтыр клубыбыҙ идараһы менән уйланыҡ, план ҡорҙоҡ та, Хөкүмәткә ҡыҙыҡлы ғына бер проект индереп бирҙек. Унда: "Һабантуйҙарҙа, башҡа милли байрамдарыбыҙҙа халыҡты аттар менән бәйле уйындарға, "Ат яратыу" сәнғәтенә ылыҡтырырға, йәйәнән атыу, сәкән һуғыу кеүек ат өҫтөндә уйналған уйындарҙы күберәк күрһәтергә кәрәк", - тиелә. Был тәкдим ыңғай ҡабул ителде, тип һанайым, сөнки ыңғай яуаптар килде. Быйыл булып үткән һабантуйҙарҙа ысынлап та ошондай уйындар ойошторолдо. Был тәж-рибә киләсәктә бар райондарға таратылыр, тип ышанғы килә. Сөнки был йәһәттән, үҙ халҡының тарихын, мәҙәниәтен, традицияларын бар сағыулығында һәм төрлөлөгөндә һаҡлау, ҡулланыу буйынса беҙҙе венгрҙар ҙа, ҡырғыҙҙар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа күптән уҙып киткән. Беҙ уларҙан артта ҡалып торайыҡмы! Тормош - бәйге бит ул. Башланған эштәребеҙҙе ошо юҫыҡта дауам итә алһаҡ, беҙ барыһын да уҙып китә алаҫаҡбыҙ. Ләкин бында бөтөн халыҡ, йәмәғәтселек менән, дәүләт менән берлектә уйларға, эшләргә кәрәк.

Үҙгәрештәргә бер яҡлап ҡына ҡарарға ярамай. Мәҙәниәтебеҙ тере булһын, тағы ла үҫһен, тиһәк, ошо әйтелгән һөйләмдәр тирәһендә лә ағай-энеләр менән күберәк фекер алышһаҡ ине. Үрҙә әйтелгәндәр бер кешенең субьектив фекерҙәре генә булды. Мин бөтәһен дә дөрөҫ әйттем, тип раҫлай алмайым. Ләкин минә "ат ене" ҡағылған, тип тулы ышаныс менән әйтә алам, сөнки беләм: Шириәздан ҡартатайым колхозға өс ат биреп ингән, атай-олатайҙарым ат йәнле булған. Ат эргәһендә мин дә үҙ асылыма ҡайтҡандай булам. Күңелебеҙҙе өйкәгән мәңгелек һорауҙарға үҙемсә яуап эҙләйем. Бәлки, табырмын, тим.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Илдар Шәйәхмәтовтың энтузиазмы, әүҙемлеге сере ниҙә, тип күп уйланған бар. Яуап асыҡ. Бар ғиллә уның ваҡыты-ваҡыты менән әлеге хәрби-тарихи реконструкцияларҙа йөрөп, ата-бабалар ейгән ризыҡ ейеп, улар йөрөгән һуҡмаҡтан йөрөп, улар алып барған йәшәү рәүешен һынап ҡарап ҡайтыуындалыр, тип уйланыла. Һәм тағы, ҡалала йәшәп, ер рухын, ат рухын тойоуынандыр Илдар Ғиндулла улының көсө, аҡылы.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ*

# БАШҠОРТ АТЫ



**Башҡорт аты - башлыса Көньяҡ Урал территорияһында осраған үҙенсәлекле тоҡом. Ул ҡасандыр Азиянан алып киленгән дала аттарының төньяҡ урман аттары - тарпандар менән ҡушылыуҙан барлыҡҡа килгән. Тоҡом шуныһы менән ҡыҙыҡлы, башҡорт аттары тарпандар - ҡыр аттарының нәҫеле иҫәпләнә. Тарпандар кәүҙәгә ҙур булмай, һоро төҫтә. Башҡорт аттары ғәҙәттә ҡола - үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара була, ә бына башҡа тышҡы сифаттары менән улар тарпандарға ныҡ оҡшаш. Башҡорт тоҡомоноң формалашыуына ҡырҡа континенталь климат шарттары ла үҙ эҙен ҡалдырған.**

Анатомик үҙенсәлегенән ҙур башын, киң маңлайын айырып әйтергә була. Ҡыҫҡа ҡалын муйынлы, түбән мундалы, киң тура арҡалы, түбән осалы. Күндәм холоҡлолар. Айғырҙың үлсәмдәре: мунда бейеклеге 142-145, кәүҙәнең ҡыйыш оҙонлоғо 147-150, түш ҡоласы 170-175, енсек ҡоласы 18,5-19,5, тере ауырлығы 450-470 кг, ошондай уҡ бейә үлсәмдәре: 138-142, 143-147, 167-172, 18-19, 400-420.

Башҡорт аты XVII-XVIII быуаттарҙа киң таралған булған. Өфө һәм Ырымбур губерналарында үрсетелгән, Пермь, Ҡаҙан һәм Һамар губерналарында һәм Көнбайыш Себерҙең почта юлдарында осраған. 8 сәғәт эсендә ял итергә туҡтамай һәм ашатмай 120-140 км юлды үтеп булған башҡорт өслөләре (тройка) киң билдәле булған. Шуға ла рус яҙыусыһы Сергей Минцлов: "Мин башҡорт аттарына һоҡланам! Кем был яҡтарҙы күрмәгән, шуға 25-30 саҡрымға ярыштар булмаҫтай хәл кеүек тойола... Ашатмайынса, 60-ар, 90-шар саҡрым юл үтәләр. Ныҡлы әйтә алам, Стәрлетамаҡтың төрмә начальнигын йөрөтөүсе башҡорт 160 саҡрым юлды һелтәгән. Башҡорттар гелән һыбай килеш 90-шар километрҙы үтә, улар өсөн был - ғәҙәти хәл...", - тип яҙғандыр инде.

Маршал Семен Буденный тоҡом тураһында шулай ти: "Башҡорттарҙа йылҡысылыҡ тармағы тарихта монголдар барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк үҫешкән булған. Шуға күрә башҡорт атының монгол тамырҙарын эҙләү нигеҙһеҙ..."

Башҡорт аты ултыраҡ тормошта йәшәгән, күсенһә лә, алыҫ араға күсмәй торған халыҡ аты. Шуға ла аттар, һыбай йөрөүгә ҡарағанда, ауыл хужалығы эшенә нығыраҡ яраҡлашҡан. Ул артыҡ сандыр (ҡоро һөйәкле, ябыҡ) түгел, үҫешкән һөлдәһе бар, осаһы (арт яғы) ныҡ иңкеү түгел, ләкин аяҡтары мыҡты һәм көслө, шулай уҡ тояҡтары бик ныҡ. Сыҙамлы, тыныс тәбиғәтле. Элек башҡорт аттарының һаны 600 меңгә тиклем еткән.

Пётр Иванович Рычков "Ырымбур топографияһы" тигән китабында былай тип яҙған: "Башҡорт аттары электән үк Рәсәйҙә сыҙамлылығы менән һанланған. Шулай уҡ уның ҡапыл борола алыуы, етеҙлеге, тилберлеге лә баһаланған. Уларҙың хаҡы 30-50 һум торған..."

Рычковтың яҙыуынса, башҡорттарҙың байтағы 300-400 баш йылҡы малы тотҡан. Улар аттарын йәйен дә, ҡышын да тибендә далала йөрөткән. Рус яҙыусыһы Сергей Аксаков, башҡорттар киң далалары буйлап йәшел ҡылған салланып, ебәк көмөш мамыҡ менән ҡапланғансы иртәнән-кискә тиклем һыбай йөрөй, тип телгә ала. Ҡар нисек кенә ҡалын булмаһын, башҡорт аттары тояҡтары менән сапсып тибенеп, ҡар аҫтынан үҙҙәрен туйындырырлыҡ туң үлән тапҡан. Ҡышын егеүгә файҙаланған аттар өсөн бесән әҙерләнгән.

Этнограф Сергей Руденко "Башкиры" тигән хеҙмәтендә: "Иң бай башҡорт 3-4 мең баш йылҡы тотһа, иң ярлыһы 20-30 баш йылҡыға хужа", - тип яҙған. Көтөүендә 100 баштан күберәк аты булған кеше бай иҫәпләнгән.

1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышын башҡорт яугирҙары башҡорт тоҡомло аттар менән үтеүе билдәле. 1814 йылда аттарын Парижда - Сена йылғаһында һуғаралар. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында иһә ике Башҡорт кавалерия дивизияһы башҡорт аттарынан төҙөлә. Бөгөн дә башҡорт аты башҡортҡа хужалыҡта ярҙамсы. Ат туризмы үҫешә, республиканың Һыбайлы полицияһы бар. Иң ҡыҙығы, башҡорт аты - аттарға аллергияһы булғандарҙа аллергия реакцияһы булдырмаған берҙән-бер тоҡом. Балаларҙы йөрөтөү өсөн дә башҡорт аты иң ҡулайы тип табылған. Иппотерапияла ла башҡорт аттары йышыраҡ ҡулланыла.

**ВИКИПЕДИЯНАН.**

***✓ Кәбән һалыу, һуғым һуйыу, ҡаҙ өмәһе - ҡыуанып, бергәләп атҡарылған эштәрҙе байтаҡ теҙергә мөмкин. Ололар эргәһендә - һәр саҡ бала-саға. Улар бәләкәйҙән ошо туғанлыҡ, берҙәмлек мөхитенә сорналып үҫә.***





# Вариҫтар

**Байгилде МОТАЛЛАП**

**Хикәйә**

Ата-әсәнән алған мәғлүмәттә лә йомғаҡты һүтеп алып китерҙәй еп осо табылманы. Тик күршеләге буш өй менән ҡыҙыҡһыныусы балыҡсы тураһында әйтелгән һүҙ генә һағайта төштө милиционерҙарҙы. Уны ҡылынған енәйәт менән бәйләү өсөн бай фантазия кәрәк ине, әлбиттә. Хәйер, тәфтишсегә йыш ҡына фәҡәт бай фантазия ярҙамға килә лә инде ҡатмарлы, аңлайышһыҙ енәйәттәрҙе асҡанда.

Тағы ла балыҡсы Ибраһимды саҡырттылар.

- Һеҙ Ишбулатов Зәйнулланың буш торған өйө менән ҡыҙыҡһынғанһығыҙ...

- Эйе, һораштым. Күсереп алырға, тип.

- Бәләкәй улыма тәғәйенләнгән, тигән ул һеҙгә.

- Шулай тигәйне.

- Улын шул төндә сәнсеп киткәндәр.

- ...

- Нишләп өндәшмәйһегеҙ?

- Бер ниндәй ҙә бәйләнеш күрмәйем.

- Илдар улы үлһә, Ишбулатов өйҙө һатыр ине, бәлки... Һеҙгә...

- Китсе, быңдай уй нисек башығыҙға килде?

- Логика ярылып ята.

- Ә дәлилдәрсе? Һуң, мин үҙем Илдарҙы өйҙәренә алып барҙым, балнисҡа тиклем оҙатып йөрөнөм...

- Булыр дәлилдәр, табырбыҙ. Тимәк, һеҙ эҙ юғалтыу тураһында ныҡ хәстәрләгәнһегеҙ, шуға үҙегеҙҙе тыныс тотаһығыҙ. Дәлилдәрҙең булмаясағына, табылмаясағына ышанаһығыҙ. Был дөрөҫ юлда булыуым тураһында тағы бер тапҡыр инандырҙы. Балнис алыҫ, егет барыбер үләсәк, тип, эҙ яҙлыҡтырыу өсөн уны ҡотҡарыусы булып ҡыланғанһығыҙ. Был да көн кеүек асыҡ! Хәл-ваҡиғалар бөтә яҡлап асыҡланғанса, һеҙҙе һаҡ аҫтына алабыҙ.

- Абсурд.

Шулай итеп, Ибраһим ҡотҡарыусынан ҡанһыҙ һәм мәкерле енәйәтсегә әүерелде лә ҡуйҙы.

Тәфтишселәргә енәйәтсене фашлар өсөн кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил кәрәк ине. Ул, әлбиттә, енәйәт ҡоралы, бысаҡ. Ергә күмелгән тимерҙе күрһәтә торған махсус прибор менән енәйәт урынын ентекле тикшереү башланды.

Бер нисә быуат кеше төйәге булған ауыл урыны тимергә бай булып сыҡты. Көмөш аҡса, һөңгө башы, үткән заман балтаһы, хәҙерге техниканың шөрөп-гайкаһы - йыйылған халыҡты ғәжәпләндереп, әленән-әле ҡомартҡы әйберҙәр табыла торҙо эш барышында. Бер туҡтауһыҙ зыңғырлап торған приборҙан ҡолағы тонған, ерҙе соҡоп тәҡәтһеҙ булған хеҙмәткәр, ниһайәт, туҡтап ҡалды.

- Иптәш капитан, таптым, - тип милиционерҙы саҡырҙы.

Табылдыҡ ҡатҡан ҡан йәбешкән ҡәҙимге бәке ине. Ундай әйберҙе һәр ауыл малайы йөрөтә үҙе менән. Йәйпәк таш аҫтына тығып киткәйне уны енәйәтсе.

Экспертиза үткәреү өсөн милиционерҙар, дәлилнамәне алып, йәһәтләп районға ҡайтып киттеләр.

Ауыл халҡы тикшереүселәрҙең һөҙөмтә менән кире әйләнеп килеүен һағайып көтөп ҡалды. Бындай енәйәттең ауылда булғаны юҡ. Бер ғаилә булып йәшәйҙәр, кеше үлтереү түгел, бер-береһенә ҡул күтәреү ҙә юҡ улар араһында.

Милиционерҙар менән Ибраһим да ауылға кире килеп төштө. Ул ҡырҙағы палатканан Зәйнуллалар өйөнә күскән ғаиләһен алды ла, сәйгә лә туҡтап тормай, "Иж" матайын һажлатып үкертеп, ҡайтыу яғына елдереп сығып китте. Ә тәфтишселәргә тағы бер ҙур эш тора ине - ауыл кешеләренең бармаҡ эҙҙен бәкелә уйылып ҡалғаны менән сағыштырып, енәйәтсене асыҡлау.

Енәйәт ҡылынған төндә клубта уйында булған йәштәрҙән башланылар эште. Вил генә өйҙә булмай сыҡты. Хатта ата-әсәһенә лә бер ни өндәшмәй, ҡайҙалыр сығып киткән. Уны эҙләргә райондан тағы бер төркөм йәлеп ителде. Туғандарының, таныштарының адрестары буйынса эҙләнеләр һәм көн кисләүгә Вилде ауылға табып алып килделәр.

Ул ситкә бушҡа сығып олаҡмағайны - бәкеләге бармаҡ эҙҙәре Вилдеке ине.

* * *

Енәйәтсенең ауылдаштары булыуын халыҡ ауыр киҫерҙе, бер кемдең дә ярылып ятҡан фактҡа ышанғыһы килмәне: "Яңылышлыҡ барҙыр, тағы тикшерергә, ысын енәйәтсене табырға кәрәк", - тиештеләр.

Зәйнулла Вилде үҙе күреп һөйләшкеһе килде. Милиционерҙар ҡаршы төшмәне.

- Бында яңылышлыҡ барҙыр, һин сәнсмәгәнһеңдер Илдарға? - Өмөт менән улының бала саҡ дуҫына баҡты Зәйнулла.

- Мин сәнстем, - тине уныһы бер ни булмағандай, ғәҙәти эш башҡарған әҙәмдәй.

- Нишләп? - Аптыраған, үҙ ҡолаҡтарына ышанмаған атай кеше башҡа һорау тапманы.

- Тәк, былай... Үҙен әллә кем итеп ҡуймаҫ кәрәк ине, - Зәйнулла Вилдең буп-буш, бер ни сағылмаған ҡарашы менән осрашты ла, тертләп китте. Ҡурҡыныс төпһөҙ ҡоҙоҡ тиерһең күҙҙәре: һалҡын бөркөп торалар, буш һәм төҫһөҙҙәр.

Вил менән Илдар бәләкәйҙән бергә уйнап үҫтеләр, бергә уҡынылар. Һөнәрселек училищеһы, армия - ауыл малайҙарының яҙмышына төшкән көмөшө шул инде. Алсаҡ ҡына егет һымаҡ ине армияға киткәнсе. Атаһы мәрхүм - Зәйнулланың ҡорҙашы, аранан китеүенә лә күп тә түгел. Етемлек малайҙы усал, ҡанһыҙ иткән, тип тә әйтеп булмай шуға.

"Вил ҡасан шулай үҙгәргән, ҡанһыҙ, йәнһеҙ кешегә, буш сүлмәккә әүерелгән? Баланың йәнен кем алған, кем унан ҡан эсеүсе өйрәк яһаған?" - Алдында ултырған егеткә ғәжәпләнеп тә, екһенеп тә текләгән килеш, Зәйнулла үҙенә ошо һорауҙарҙы бирҙе.

Тик уларға яуап тапманы.

Кешене тере ҡалдырып, уның йәнен алыусы күҙгә күренмәгән ғазраилды төҫмөрләргә теләне Зайнулла Вилдең һын-һыпатында. Бер туған булып йәшәйҙәр ауылда - шатлыҡтары ла, ҡайғылары ла уртаҡ. Өй беренсә китһәң, Зәйнулланың ҡулы теймәгән бер генә йорт-ихата ла юҡтыр: йә нигеҙен һалышҡан, йә бураһын сапҡан, йә туҙған ҡыйығын алмаштырғанда өмәлә ҡатнашҡан, йә мунса-һарайын төҙөгәндә булышҡан... Ул ғына түгел - ауылдағы һәр ир-ат был эштәрҙе үҙ иҫәбенә яҙа ала. Кәбән һалыу, һуғым һуйыу, ҡаҙ өмәһе - ҡыуанып, бергәләп атҡарылған эштәрҙе байтаҡ теҙергә мөмкин. Ололар эргәһендә - һәр саҡ бала-саға. Улар бәләкәйҙән ошо туғанлыҡ, берҙәмлек мөхитенә сорналып үҫә. Көнсөллөк тигән нәмә бөтөнләй юҡ ауылда. Кемдеңдер өйрәһе саҡ ҡына шыйығыраҡ икән, ярай, иртәгә ул да уңыр. Нимәһе, кеше ҡаҙанына тығылырға.

Вил клубҡа алдан уҡ килгәйне. Ярым-ҡараңғы залда магнитофондан ағылған музыканы тыңлап, бер килке егеттәр менән гәп һатып ултырҙы. Эргәһенә Фаягөл килеп баҫты. Урта буйлы ҡәҙимге ауыл ҡыҙыҡайы. Һылыу уҡ булмаһа ла, һөйкөмлө генә үҙе. Вил тирәһендә шулай уралана гел, әллә күҙе төшкән, белмәҫһең. Тик егет ҡыҙға йән атып бармай, хатта, екһенә лә кеүек.

"Ошоно, нимә минең тирәлә урала", тине лә ҡыҙҙың арҡаһынан түбән йомшаҡ еренә сәпәне. Шул мәлдә клубҡа килеп ингән Илдар Вилдең ҡылығын күрҙе. Ауыл егеттәре менән ҡыҙҙары араһындағы мөнәсәбәттәргә ситен был күренеш уға оҡшаманы.

- Вил, һин бигерәк ҡылана башланың түгелме? - тип, дуҫын шелтәләне.

Шуның менән һүҙ ҙә бөттө. Ярым-ҡараңғыла Вилдең күҙҙәре яман ялтырап ҡуйғанына бер кем дә иғтибар итмәне. Уның алданыраҡ сығып китеүен дә абайлаусы булманы.

Вил Илдарҙы ҡайтыр юлында һағалап торҙо ла, арттан килеп, абайламағанда сәнсте. Шунан, бер ни булмағандай, ҡайтып китте, йоҡларға ятты.

Аңлайышһыҙ, мәғәнәһеҙ енәйәт...

Улы менән булған ҡазанан аҙна-ун көн элгәре Зәйнулла тағы бер сетерекле хәлгә юлыҡҡайны.

Атын эҙләп, арманһыҙ булып Һайыҫҡан сауҡалығына барып сыҡты. Һирәк ағас-ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған үҙәк буйлап тау иңкеүенә барғанда алда һайыҫҡандарҙың сабырһыҙ сыулауына иғтибар итте. Тигенгә ҡысҡырмай был һағауыл ҡош. Зәйнулла, иплерәк баҫып, ышыҡтан барырға тырышты, кем белә, бәлки, бүреләр малды боғаҙлап ташлағандыр.

Һайыҫҡандар тапҡырына яҡынлағас, кешеләр һөйләшкәне ишетелгәндәй булды. Тағы ла һағыраҡ хәрәкәттәр менән тауыш яғына ыңғайланы. Өс ир һыйыр тунай ине. Зәйнулла боҫҡан урынынан сыҡмай ғына уларҙы күҙәтте. Тирә-яҡ ауылдарҙа рәткә мал юғала тигән хәбәр ишетелгеләп ҡала һуңғы осор. Әллә... Эйе, Зәйнулла мал ҡараҡтарының өҫтөнә барып сығыуын аңланы. Уға быларҙы өркөтмәй генә тиҙерәк ауылға ҡайтып, халыҡты күтәрергә кәрәк. Кирегә ҡуҙғалдым тигәндә, өсәүҙең араһынан береһе таныш һымаҡ күренде Зәйнуллаға. Өҫ-башы, атлап йөрөүе - Сабирҙыҡы. Булмаҫ, Сабир бурҙар араһына нисек килеп юлыҡһын... Барыбер һағайҙы Зәйнулла. Бер көсәйеп, бер һүрәнләнгән ел килтергән һүҙҙәргә нығыраҡ ҡолаҡ һалды.

- Сабир, өс-дүрт көндән ошо тирәгә тағы бер тусаны ыңғайлатып ҡуй, - тигән хәбәр ҡолағына асыҡ салынды.

Тимәк, Сабир... Зәйнулла ни ҡылырға белмәй, урынында шаңҡып ята бирҙе. Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне: Сабир ауыл малын бурҙарға һатып ята. Ауылда иң хәллеләр рәтендә йөрөгән кеше! Егәрле, малды күпләп аҫырай, совхоз эшендә лә алдынғы үҙе.

Хәҙер Зәйнулла халыҡты нисек күтәрһен. Сабирҙы һатыу була бит был. Ауылдашын!

Иртәгеһенә, юҡ йомошон бар итеп, Сабирҙарға китте. Һүҙ ыңғайында:

- Мостафа ике көн башмағын таба алмай, - тип ысҡындырҙы.

- Табылыр, ҡайҙа китһен, - тине әңгәмәсеһе.

Ҡаушаманы ла, ҡыҙарманы ла.

Әллә яңылыштымы икән Зәйнулла? Күңелендә икеләнеү тыуҙы. Юҡ, ул айыҡ аҡылда үҙ күҙҙәре менән Сабирҙы күрҙе, айырым-асыҡ: "Сабир", - тип өндәшкәндәрен ишетте.

Ауылда хәҙер бер-береһенең малын шулай урлап һуя башларҙармы икән? Ни ҡалыр шунан ауылдың үҙенән, һәр кем үҙ ҡумырығына боҫоп, үҙ мәйеленсә әүеш-тәүеш итә башлаһа? Зәйнуллаға ҡурҡыныс булып китте был уйҙарынан.

Тағы Һайыҫҡан сауҡалығына барып әйләнде лә, һуйылған малдың баш-тояғын, эс-ҡарынын табыуы тураһында хәбәр итте. Уны ауыл Советына еткерҙеләр. Участковый килеп, тикшереп йөрөнө. Шулай Зәйнулла бурҙарҙы ауыл тирәһенән өркөтөп ебәрҙе.

Сабирҙы һатманы. Ҡулы күтәрелмәне, теле әйләнмәне.

Сабир, Вил... Ауылдаштары башҡаға төрләнә... Хәтәр замалар ишек ҡаға... Ғазраилдың үҙе!

Ул әҙәм йә йыртҡыс ҡиәфәтендә лә, әкиәт аждаһаһы төҫлө лә түгел. Күҙгә күренмәй, уны ҡапшап ҡарап булмай, ғөмүмән, ул юҡ. Шул уҡ ваҡытта ул бар һәм сикһеҙ ғәйрәтле. Ғазраил - ул әҙәп юғала, бәйелһеҙлектең сәскә ата башлаған, мал артынан ҡыуыу ғына ысын егетлек һаналған заман, ә һуңғы ваҡиғалар уның донъяға килеүе тураһында ауаз биреүе, тип уйланы Зәйнулла.

Ауыл кешеләренең Ҡурғыға хәҙер һирәк менеүҙәренә, балыҡты ла күберәк ау менән һөҙөп тотоуҙарына әллә ҡасан иғтибар иткәйне ул.

* * *

Ҡыш та килеп етте. Ауыл халҡы дәррәү һуғым һуйырға керешеп китте.

- Әсәһе, балаларҙы һуғым итенә йыйып алаһы ине. Күптән күмәкләп табында ултырғаныбыҙ юҡ. Һөйләшеп алаһы ла бар, - тип, Зәйнулла ҡатынына хәбәр итте лә, йыллыҡ ялын алып, һәр береһен үҙе барып саҡырып сыҡты.

Яҡындарына ат егеп барҙы, алыҫтарына автобус менән йөрөнө. Төмәндәге ҡыҙына "Кисектермәҫтән ҡайтып ет!" тип телеграмма һуҡты. Бөтәһен дә йыйып алыу теләге бигерәк тә ҙур ине шул. "Килмәй ҡуймағыҙ берүк. Бөтә эшегеҙҙе ташлап, мотлаҡ килеп етегеҙ", - тип ҡабат-ҡабат киҫәтеп саҡырҙы.

Билдәләнгән көндә өй кеше менән тулды, ишек алдында бала-саға сыр-сыу килде.

- Балаларым, матур итеп һөйләшеп алыу теләге менән йыйҙым барығыҙҙы ла бер төптән. Эйе, ҙур һүҙ һөйләргә йыйҙым һеҙҙе... - Күпмелер тынып торҙо, өҫтәл артындағыларға күҙ йөрөтөп сыҡты Зәйнулла. - Бында өс быуын йыйылған. Беҙ, атай-әсәйегеҙ, үҙегеҙ һәм ейән-ейәнсәрҙәрем. Насип итһә, бүләләремде лә күрә алырмын. Шунан да арыһы бирелмәгән әҙәмгә. Үкенескә, ғүмерҙәр фани ғына. Барыбыҙ ҙа үлемле...

- Аһ-аһ-аһ, ҡарт, нимә һөйләй башланың табын йәмен ебәреп. Ауыҙына һыу уртлағандай өндәшмәй йөрөнө-йөрөнө лә, тапты хәбәрен... Был ни ҡылығың тағы? - Ҡатыны Әклимә унын һүҙен бүлде.

- Әсәһе, арҡыры төшмә! Исмаһам, бер генә тапҡыр ҙа үҙ балаларым менән күңелемдә асып һөйләшә алмайыммы әллә? Өлкәнәйҙек, балалар ҙа үҙаллы хәҙер, үҙҙәре ата-әсә. Аҡылһыҙ түгелдәр, тел төбөмдө аңларҙар...

Оҙаҡ уйлап йөрөгән, күңелен әсеткән уй-фекерҙәрен уртаға һалып һөйләшкеһе килде Зәйнулланың донъялағы иң яҡын кешеләре - үҙ балалары менән. Шуға оло йыйын йыйғайны.

- Һуңғы осорҙа болоҡһоп тик йөрөйөм: күңелем үҙ урынында түгел, эсем боша. Ә эргәлә кәңәш ҡороп эш йөрөтөрлөк кеше юҡ. Халыҡ, нишләптер, ыуаҡланды ла китте, өстөн фекерләй, алғараҡ китеп, иртәгә ни булырын күҙалларға теләмәй, бер көн менән йәшәп тик ята. Үткән айҙа ер реформаһы тураһында закон сыҡты. Ҡабат-ҡабат уҡыным мин уны. Ер алып үҙ хужалығыңды ҡороп була бит хәҙер. Мин шулай аңланым ул законды. Нишләп бер кем дә ҡуҙғалмай? Ирек бирелгәндә халыҡ ергә теше-тырнағы менән йәбешергә тейеш тәбаһа...

- Эй, атай, ерҙе беҙгә кем генә тотторор ҡуйһын. Закон, тигәнең ҡоро ҡағыҙ ғына бит, - өлкән улы йөҙ һытып, ҡул һелтәп, атай һүҙен бүлдерҙе. - Ярай, ер алайым да, тей. Нисек мин уны эшкәртәм, игенен сәсеп, уңышын йыйып, уны эш итәм? Әллә күпме техника кәрәк. Буш нәмә...

- Улай тимә, улым. Ана, беҙ үҙебеҙ генә - бер колхоз! Уйлап, самалап ҡарамайынса, ҡырт киҫергә ярамай. Һүҙ бит ер хаҡында. Мәңгелек Ер хаҡында!.. Кеше килеп тора, китеп тора, ә ер ҡала. Ул ергә һалған хеҙмәт ҡала. Һеҙ бит ҡартатайығыҙҙан ары нәҫел сылбырын белмәйһегеҙ, уны белеү ҡыҙыҡ та түгел, кәрәге лә юҡ. Әгәр быуындан-быуынға күсеп килгән үҙ еребеҙ булһасы? Һәр быуын ҡалдырған йә таш һарайҙар, йә баҡса, йә мең йәшәр имән, йә ҙур быуа күҙ алдында булһа, улар онотолор инеме икән?

- Атай, һин бөгөн бигерәк мәрәкә хәбәр һатаһың, башым буталды. Үлемдән башлап ергә күсеп киттең, әллә ҡасан донъя ҡуйған мәрхүмдәрҙе ҡуҙғатаһың. Тыңлауы еңелерәк булһын өсөн тамаҡты сылатып алғандасы... Күстәнәскә алып килгән үҙемдекен сығарайым, бик булмаһа, - тағы оло улы һүҙен бүлде.

- Бөгөн кәрәкмәҫ, тигәйнем... Был тиклем дә етди һөйләшеүҙә аң айыҡ булһын ул. Һынылыш дәүерендә торабыҙ - шуны тылҡыйым мин һеҙгә. Үҙенең аҡ-ҡара һыҙатлы әләмен болғап, яңы заман ишек шаҡый. Насарын да, яҡшыһын да алып килә... Элекке кеүек, ҡул ҡаушырып, түрәләрҙән мәрхәмәтлек көтөп ултырған осор үтеп бара. Баш менән, ҡул менән эшләй торған дәүер. Ғәжәп, быны аңлаған кеше юҡ әйләнә-тирәлә. Һеҙ ҙә, күрәм, "Карт биреше, юҡ-бар һөйләй", тип бошоноп ултыраһығыҙ... Ярар... Әйҙә, аштан хуш итегеҙ... Булмаҫтыр ҙа шул... Әсәһе, сығар шул нәҫтәкәйҙе. Йәштәр бигерәк бойоғоп китте, әйтәгүр...

(Дауамы. Башы 31-се һанда).

ЗАУЫҠ

Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА

# УЙЛЫЛАР, ҒӘМЛЕЛӘР БАРҘА...



## Шиғриәт мәңге тере

**Талантлы шағирә, журналист Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНАның шиғриәте күптән үҙ уҡыусыһын булдырған илһамлы, моңло ижад донъяһы ул. Ошо көндәрҙә генә уның "Ялан сәскәләре" тип аталған шиғри йыйынтығы донъя күрҙе. Яңы китаптан гәзит уҡыусыларыбыҙға бер шәлкем "гөлләмә" тәҡдим итәбеҙ.**

### Шиғриәт

Бәхетлеләр шиғыр яҙмай,
Улар - үҙҙәре шиғыр.
Яҙмыштары балҡып тора,
Ғүмерҙәре - тотош йыр.

Бәхетһеҙҙәр шиғыр яҙмай,
Һағышлы йыр - үҙҙәре.
Шиғырға түгел, романға
Һыймалы ғүмерҙәре.

Шиғырҙы яҙа ғашиҡтар,
Хыялыйҙар, тиләләр.
Шиғыр яҙған саҡта улар
Ни тере, ни үләләр.

Шиғырҙы яҙа ғәмлеләр,
Уйлылар шиғыр яҙа.
Шиғыр яҙа белеү ҡай саҡ
Үҙе бер тотош яҙа.

Ҡулға ҡәләм тотҡандарҙың
Ил хаҡында ғәмдәре.
Дөрөҫлөктө яҙа-яҙа
Теткеләнә йәндәре.

Күҙ йәштәренә төйөлөп,
Улар яҙа тарихты.
Кәрәк саҡта шул шиғри һүҙ
Күтәрә бит халыҡты.

Илен, ерен, телен һаҡлап,
Шағирҙар яҙа шиғыр.
Шиғриәттең бурысы ла,
Иманлы юлы шулдыр.

...Ә шиғыр уҡый барыһы -
Бәхетле, бәхетһеҙҙәр.
Хыялыйҙай ғашиҡ булғас,
Ҡабына шиғри һүҙҙәр.

Шул саҡ инде үҙҙәре лә
Ни аҡыллы, ни тиле.
Уйлылар, ғәмлеләр барҙа,
Шиғриәт мәңге тере.

### Хәлдәр нисек, тип һорайҙар...

Хәлдәр нисек, тип һорайҙар,
Хәлдәр ул гөлдәр кеүек.
Гөлдәр баҡсала, туғайҙа
Үҫәләр балҡып, көлөп.

Йәйге селләлә таждарын
Ҡояш өтөп барһа ла,
Улар тирә-яҡты йәмләп,
Йылмаялар барһына.

Көҙгә һалҡын елдәр иҫеп,
Йәндәрен өшөткәндә,
Ҡарлы ямғырҙар аҫтында
Ҡалтырап күшеккәндә,

Барыбер нур сәсә гөлдәр,
Һиҙҙермәй бирешкәнен.
Күктәр белмәйҙер бит уның
Үҙенә көс биреп торған
Ер менән йәрәшкәнен.

Хәлдәр нисек, тип һорайҙар,
Хәлдәр ул гөлдәр кеүек.
Ерҙәге һәр миҙгелендә
Гөлдәр бит йәшәй көлөп.

...Гөлдәр хәлен кем белә?
Белә үҙҙәре генә...

### Ниндәй булыр инең икән, әсәй?..

Урамдағы анау инәйҙәргә
Ҡарайым да, әсәй, һиҫкәнәм.
Ниндәй булыр инең икән, тием,
Улар йәштәренә һин етһәң?

Һинең йәшкә бер мәл етер өсөн
Мин ҡыҫҡартам ғүмер араһын.
Ә унан һуң... мин ҡартайған һайын,
Һин йәшәрә генә бараһың.

### Икебеҙҙең шундай байрам бөгөн

Ер ҙә уйылманы.
Юҡ, төш түгел,
Барыһы ла ысын, өн был, өн...
Бөгөн байрам, бөгөн шундай байрам:
Һинең - туйың, минең - тыуған көн.

Икәү хыял иткән байрам ине,
Тик яныңда инде икенсе,
Яҙмышым тип яңылыштыммы ни,
Булдыңмы ни бары үткенсе?

Юҡ, бер ни ҙә үҙгәрмәне бөгөн,
Элеккесә ҡалды барыһы.
Мәңгелеккә айырылды ғына
Йөрәк менән йөрәк араһы.

Һүҙһеҙ генә һөйгән ҡараштарың
Нур түгәме хәҙер бүтәнгә?
Оноттом тип йыуанһаң да үҙең,
Илтер һине хәтер үткәнгә.

Төндәреңдә татлы йоҡоң бүлеп,
Минең күҙҙәр һине уятыр.
Уятыр ҙа, бергә булған көндәр
Йөрәгеңдә сәнсеп уйлатыр.

Шул сағында моңһоу күккә ҡара,
Ҡыйырсыҡ ай белә хәлемде.
Беҙ бит уның менән байрам иттек
Һинең туйҙы, бәхет мәлеңде.

Икебеҙҙең шундай байрам бөгөн:
Һинең - туйың, минең - тыуған көн.
Ә урамда... Юҡ, төш түгел, өн был -
Башты әйләндергес айлы төн...

### Эш бүлмәһе

Көндөҙ бында - аш бүлмәһе,
Сәйем ҡайнай.
Төндә бында - эш бүлмәһе,
Йәнем ҡайнай.
Самаларға ҡарап, көндөҙ
Ашым бешә.
Заманаңы уйлап, төндә
Башым бөтә.
Көндөҙ бында мин - ғәҙәти,
Ябай ҡатын.
Төндә - илаһи бер кеше
Бөйөк затым.
Ҡағыҙыма һеңеп бөткән
Аш еҫтәре.
Иманлы һүҙ генә теҙ, ти,
Аҡ төҫтәре.
Ризығымды ярат һындар
Өйҙәгеләр.
Шиғырымды ятлаһындар
Һөйгән йәндәр.
Аш-һыуымды ауыҙ итер
Ҡешем булһын.
Йән аҙығы - илһам бирер
Эшем булһын.
...Көндөҙ бында - аш бүлмәһе,
Сәйем йырлай.
Төндә бында - эш бүлмәһе,
Йәнем илай.

### Күңелем - йәйғор балҡышы

Күңелем - йәйғор балҡышы,
Дуҫтарым күплегенән.
Һеҙ һәр саҡ янда булғанға,
Донъяны күпме беләм.
Шатлыҡ төҫөн таныттығыҙ,
Айырҙығыҙ ҡайғыны.
Аҡ, ҡаранан тормай тормош -
Бар төҫтөң һәр ҡайһыһы.
Күңел күгемдә йәйғором
Балҡый яҙ, ҡыштарын да,
Дуҫтарымдың йөҙөн күрәм
Уның балҡыштарында.

### Көс бир, Хоҙай!

Мине рәнйеткән кешене
Кисерергә көс бир, Хоҙай!
Үҙен дә бит яҙмыш типкән,
Юҡҡа яуыз түгел шулай.

Мине илатҡан кешене
Ярлыҡарға көс бир, Хоҙай!
Әсе күҙ йәштәрем күреп,
Үҙенең дә йәше тулай.

Мине ҡайғыртҡан кешене
Кисерергә көс бир, Хоҙай!
Ғәфү итергә өйрәтеп,
Тормош беҙҙе шулай һынай.

### Август

Мин донъяға тәү ҡат, күҙем асып,
Баҡҡанғамы һары августа,
Тәбиғәт тә бер аҙ моңһоулап,
Төрөнһә лә тәрән һағышҡа.

Һары төҫтө һағыш итеп түгел,
Шатлыҡ төҫө итеп күрәм мин.
Августа яуған йондоҙҙарҙы
Бәхет-тажға ҡушып үрәм мин.

Иген ҡырҙарында йөрөй август
Алтын төҫөн һибеп, өләшеп,
Алтынға тиң һары гәрәбәгә
Мең мөғжизә ҡарар көнләшеп.

Баҡсаларға инһәм, август көлә,
Өҫтәл тора һыйҙан һығылып.
Муллыҡ һирпә ерем августымдың
Нур-ҡарашы үтһә ҡағылып.

Ғүмер көҙөм, йондоҙ яуған мәлдә
Һин минә лә бер көн килерһең.
Килерһең дә, һағыш булып түгел,
Уйсан шатлыҡ булып көлөрһөң.

ИНТЕРНЕТТАН



# ЫШАНЫС...

## барыһын да хәл итә

■ Ғалимдар беренсе тапҡыр аҙ хәрәкәтләнеүҙең иҡтисади эҙемтәләрен баһалап ҡараған һәм байҙар менән ярлылар араһында бер принципиаль айырма тапҡан. Билдәләнеүенсә, түбән социаль кимәл ялҡаулыҡ менән бәйле, улар шулай уҡ аҙ хәрәкәтләнә лә икән. The Lancet журналы яҙыуынса, ғалимдар 142 илдән йыйылған мәғлүмәттәрҙе анализлаған. Айырыуса аҙ хәрәкәтләнеү һөҙөмтәһендә ҡаҡшаған сәләмәтлекте кире нығытыу өсөн тотонолған сығымдарға иғтибар бирелгән. Халыҡтың түбән физик әүҙемлеге донъя иҡтисадына йылына 67,5 млрд һумға төшә. Йәки һаулыҡты нығытыу өсөн кешеләр ошо күләмдә аҡса тотона. Ғалимдар әйтеүенсә, был минималь һан, ысынында иһә ул тағы ла ҙурыраҡ булыуы ихтимал. Сумманың 40 проценты АҠШ-ҡа тура килә.

■ Табиптар аҙ хәрәкәтләнеүҙе бер ҡасан да хупламаны. Айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар хәүеф төркөмөндә, тип белдерә АҠШ-тың Корнелл университеты ғалимдары. Йышыраҡ ултырыу, аҙ йөрөү ҡатын-ҡыҙ затын тура мәғәнәһендә үлтерә, ти улар. Эштәрендә көнө буйы ултырыусыларға ғәҙәттә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре, йөрәктең ишемик ауырыуы, яман шеш йышыраҡ янай. Бынан тыш, был артыҡ ауырлыҡ йыйыуға алып килә, был да сәләмәтлеккә насар йоғонто яһай. 35 йәштән ҡатын-ҡыҙ мускул массаһын юғалта башлай, менопауза башланғас, был процесс тағы ла әүҙемләшә. Шуға ла тән ҡартаймаһын өсөн даими рәүештә физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк.

■ Америка ғалимдары плацебо эффекты ысынбарлыҡта бар, тип раҫлай. Һүҙ бер ниндәй тәьҫир көсө булмаған "ялған" таблеткалар тураһында бара. Бәҡтиһән, бындай дарыуҙар баш ауыртыуынан, хатта Паркинсон ауырыуынан "дауалай" икән. Йәғни, табип ҡушҡан дарыуҙарҙы эскәс, сирлененң организмында ла, аңында ла үҙгәрештәр барлыҡҡа килгән. Иң ҡыҙығы, пациенттар дарыуҙарҙың "ялған" икәнен белмәгән дә. Паркинсон менән ауырыусылар ҙа традицион дарыуҙар урынына плацебо алғас, үҙҙәрен еңелерәк тойоу раҫланған. Ауырыған кеше дарыу эскәс үҙенең һауығырына ышана, шуға ла бындай ыңғай һөҙөмтәләр була.

■ Татлы тамаҡтар алкоголизм менән ауырымай, тип раҫлай Америка ғалимдары. Шәкәрҙе күп ашағанда баш мейеһендә опиоидлы рецепторҙар баҫылып тора, шуға ла спиртлы эсемлектәргә ынтылыш булмай. Быны тикшеренеүҙәр ҙә дәлилләгән. Бығатиклем спиртлы эсемлектәр яратыусыларҙың рационына тәм-том өҫтәгәс, улар алкоголгә битараф була башлаған, ти тикшеренеүҙәрҙең авторҙары.

■ Йыш баш ауыртыуының сәбәбе ҡояш яҡтылығы, тимәк D, B витаминдары һәм коэнзим Q10 етешмәүҙән булыуы ихтимал. Ҡояшта йөрөү мөмкинлеге һирәк эләгә икән, был витаминдарҙы ризыҡтар ярҙамында тулыландырырға мөмкин, ти ғалимдар. D витамины балыҡ һәм йомортҡала бар. В витамины - рибофлавин дөгөлә, йомортҡала һәм һөттә бар, рибофлавин нервы системаһының эшенә, күреү һәләтенә, метаболизм процесстарына ыңғай йоғонто яһай. Коэнзим Q10 бауырҙа туплана һәм шәкәрҙе энергияға әүерелдерә. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник баш ауыртыуы менән яфаланыусыларҙа тап ошо матдәләрҙең норманан түбән булыуы асыҡланған.

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# БАҪАЛҠЫ БУЛҺАҠ ТА...

## майҙанда һүҙ әйтергә өйрәнәйек

**Йәштәр өсөн Бөтә Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдә лидерлыҡ һәләттәрен асыу, теге йәки был өлкәлә белем камиллаштырыу, идеяларҙы тормошҡа ашырыу һәм үҙеңде күрһәтеү мөмкинлеге биргән форумдар, тренингтар, йыйындар һәм ярыштар үткәрелеп тора. Ошо көндәрҙә үткәрелгән "Территория смыслов на Клязьме" Бөтөн Рәсәй йәштәр мәғариф форумында, ниһайәт, башҡорт йәштәре лә ҡатнашыуы билдәле булды. Уларҙың береһе, Даян СОЛТАНҒУЖИН хатта үҙе тәҡдим иткән проект өсөн 200 мең һумлыҡ грант отоп, белгестәрҙең юғары баһаһына лайыҡ булды. Форумдан алған тәьҫораттары, тупланған тәжрибә һәм фәһем тураһында уның үҙе менән әңгәмәләштек.**




**➔ Бөтөн Рәсәй кимәлендә үткәрелгән форумда ҡатнашыу теләге нисек барлыҡҡа килде?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, Бөтөн Рәсәй йәки халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән, ошо "Территория смыслов на Клязьме" форумына оҡшаш саралар Башҡортостан йәштәрен бик ҡыҙыҡһындырып бармай. Быны сәбәбен аңлата алмайым, әммә мин үҙем дә, төрлө халыҡ-ара сараларға саҡырылар ҙа, республиканан ситкә сығып йөрөмәй торғайным. Быйыл Өфөлә үткәрелгән "Төркиҙәр алтыны" йәштәр мәғариф форумында ҡатнашып, бындай сараларҙың йәштәр өсөн ниндәй әһәмиәтле булыуын аңланым. Бәҡтиһән, беҙ улар тураһында хәбәрҙар түгелбеҙ икән һәм шул арҡала күп мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырабыҙ. Мин ҡатнашҡан "Территория смыслов на Клязьме" Бөтөн Рәсәй йәштәр мәғариф форумының IV сменаһында бер Ҡаҙан ҡалаһынан ғына 50 кеше килгәйне. Ә беҙҙең Башҡортостандан, Силәбе өлкәһе, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларынан ни бары егермегә яҡын башҡорт йәштәре йыйылды. Республика ситтәрендә үткәрелгән сараларҙа ғына ҡатнашып, ошо кимәлдән сығып ҡына фекер йөрөтәбеҙ. Әгәр ҙә беҙ бөгөн донъяға билдәле шәхестәр кеүек булырға, уҙ эшен асҡан һәм уныш ҡаҙанған кешеләр кеүек фекерләргә, тәжрибәләрен бүлешергә, белем даирәһен киңәйтергә һәм үсешергә теләһәк, юғары кимәлдә үткәрелгән форумдарҙан, конкурстарҙан ситтә ҡалмаҫҡа тейешбеҙ.

Тағы ла шуныһы мөһим: башҡортҡа баҫалҡылыҡ килешәлер ҙә, әммә заман талаптарына яраҡлашыу өсөн беҙгә үҙебеҙҙе башҡалар араһында тоторға, проекттарыбыҙҙы яҡлап өйрәнергә һәм уй-фекерҙәребеҙҙе еткерә белеү ҙә мөһим. Әйткәндәй, проекттар эшләү буйынса тәжрибәмә эшемдә - яман шеш ауырыуҙарын дауалау өлкәһендә лә ҡулланыу таптым. Ошо сирҙәрҙе ваҡытында дауалау буйынса 2015 йылдан алып бик матур проектымды Хәйбулла районы территорияһында тормошҡа ашырып киләбеҙ.

**➔ "Территория смыслов на Клязьме" Бөтөн Рәсәй йәштәр мәғариф форумының һөҙөмтәләре ҡыҙыҡһындыра...**

- Форумда уҡылған бөтә лекциялар ҙа оҡшаны, һәр спикерҙың сығышынан үҙемә файҙалы мәғлүмәт алдым. "Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендәге йәш белгестәр" сменаһында йәштәрҙең милли уҙаңын уятыу, халҡының тарихын, рухи ҡиммәттәрен, мәҙәниәтен өйрәнеүгә этәргес булырҙай төрлө проекттар эшләнек. Әлеге ваҡытта күптәр 4 ноябрҙә билдәләнгән Халыҡтар берҙәмлеге байрамын ни бары тағы бер ял көнө итеп ҡабул итә, көндәлек эштәр менән мәшғүл булып үткәреп тә ебәрә. Форумда ҡатнашыусы 1000 кешегә уны популярлаштырыу өсөн яңы идеялар табырға тәҡдим ителде. Беҙҙең команда ике йыл дауамында үткәреләсәк агитация проекты уйлап тапты, уны "Халыҡ-ара берҙәмлек йылы" йомғаҡларға тейеш. Был проект сиктәрендә йәштәргә көндәлек кейемдәренә милли биҙәктәр һалып кейеү идеяһын еткерҙек. Бүтән командалар ҙа бик ҡыҙыҡлы фекерҙәре менән бүлеште, яҡташыбыҙ Байрас Азаматовтың командаһы эшләгән концепция иҫемдә ҡалған. Улар йәштәрҙә никах туйын милли кейемдәр кейеп, йола буйынса атҡарырға тәҡдим итте. Бындай парҙар никахтарын дөйөм сиратты көтмәйенсә теркәтә алырға, йәки тағы берәй төрлө өҫтөнлөк бирелергә тейеш, тигән фекерҙә улар. Ысынлап та, тәү ҡарамаҡҡа ябай һәм иғтибар талап итмәгән нәмә кеүек былар, әммә йәштәргә рухи тәрбиә биреү йәһәтенән ниндәй оло әһәмиәткә эйә...

**➔ Иң шәп егерме биш проект авторы араһында һеҙҙең исем дә бар. Тимәк, һеҙ яҡлаған проект бик ҡыҙыҡлы булғандыр?**

- Әйтергә кәрәк, "Проекттар конвейеры"на быйыл бөтәһе 128 кеше ғариза биргән, шулар араһынан 115 проектты яҡларға рөхсәт иткәндәр. Һөҙөмтәлә, белгестәр тарафынан 24 проект грантҡа лайыҡ булды, тағы ла бер проекты тауыш биреү ярҙамында билдәләнеләр. Мин белгестәр алдында Башҡортостан Республикаһы Йәш яҡташтар берлектәре ассоциацияһы тарафынан ике йыл дауамында ойошторолоп килгән "Урал мираҫы" башҡорт мәғариф этнофорумы проектын яҡланым. Белгестәргә был сара бик оҡшаны, башҡа төбәктәрҙә бындай юғары кимәлдә үткәрелгән этнофорумдар юҡ икән. Йәштәр үҙ милләте менән ғорурланһын, илһөйәрлек тойғоһо уянһын, белем даирәһе артһын өсөн ойошторолған "Урал мираҫы" башҡорт этнофорумына киләһе йыл бер аҙ үҙгәреш индереләсәк. Уға башҡорт халҡының йолалары, мәҙәниәте, көнкүреше менән танышырға теләгән башҡа милләт вәкилдәрен дә саҡырасаҡбыҙ. Улар өсөн башҡорт халҡының һәм Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләттәрҙең тарихи үткәненә, йәшәйешенә ҡағылышлы мауыҡтырғыс лекциялар әҙерләйбеҙ. Бер милләт тураһында бер нәмә лә белмәй тороп, уның вәкиленә ҡарата ихтирам тойғоһо уянмай. Беҙҙең "Урал мираҫы" башҡорт этнофорумында киләсәктә ошо мәсьәләне хәл итеүгә лә иғтибар бүленәсәк.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Баш ҡалала 11 августан 14 августҡа тиклем йәштәр өсөн "Өфө-форум" сараһы үткәрелә. Был форумды Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы, Силәбе өлкәһенең башҡорт йәштәре иттифағы, Башҡорт асыҡ КВН лигаһы, "Башҡорт проекттары" берләшмәһе, "Беренсе" Р. Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты сығарылыш уҡыусылары ассоциацияһы, Башҡортостан Республикаһы Йәш яҡташтар берлеге ассоциацияһы ойоштора. "Өфө-форум"да ситтә тәжрибә туплап ҡайтҡан йәш белгестәрҙең дә сығыш яһауы көтөлә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "АУЫЛЫМ"

**Бөгөн һәр тарафта замана үҙгәрештәренә, эшһеҙлеккә, аҡсаһыҙлыҡҡа зарланыу гәҙәткә инеп китте. Ул үҙгәрештәр беҙҙең кеүек бәләкәй ауылдарға нығыраҡ та ҡағылды әле ул. Әммә мәктәп юҡ, клуб юҡ, тип, ҡул ҡаушырып ултырмай ғүмәрҙәр. Баймаҡ районының ошо бәләкәй генә ауылында башҡарылған ҡайһы бер эштәрҙе барлап үтәйек әле, булмаһа.**

# БАЛА КҮҢЕЛЕ - АҠ ҠАҒЫҘ,

## нимә яҙһаң - шул ҡалыр

Ғүмәр ауылы иҫ киткес матур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан, тирә-яғын урмандар, тауҙар уратып алған. Халҡы ла эшсән, үҙ көнөн үҙе күреп, мал аҫрап, ҡош-ҡорт көтөп, дәртләнеп йәшәй. Ауылыбыҙҙа йыл һайын яңы өй һалып инеүселәр арта, яңы йәш ғаиләләр барлыҡҡа килә. 5 һәм унан күберәк бала үҫтереп бағыусы ишле ғаиләләр ҙә күп беҙҙә. Һәр өйҙә тиерлек балаларҙың шат тауыштары ишетелә. Быйыл ғына беҙҙә 7 сабый донъяға килде. Мәктәп йәшендәге уҡыусылар һаны ғына ла 76 бала, улар мәктәбебеҙ ябылыу сәбәпле күрше ауылға йөрөп уҡый. Ярай әле кескәйҙәребеҙ өсөн мәктәпкәсә йәштәге төркөм бар. Бөтәһе 15 бала йөрөй унда. Ауылда үткән барлыҡ сараларҙы ошо балалар менән берлектә ойошторабыҙ, ауыл тормошона йән өрөүселәр улар.

Эйе, ауылдың киләсәге - балалар. Ошо хәҡиҡәтте иҫтә тотоп, ауылыбыҙҙың йәше лә, ҡарты ла балаларыбыҙҙы тәрбиәләү эшен тәүге бурыс итеп алғанбыҙ. Урындағы башланғыс мәктәптең бер бүлмәһендә 2003 йылдан алып мәктәпкәсә йәштәге төркөм эшләй. Ҡыҫҡа көн режимында ойошторолған был төркөмгә балалар ҙур теләк менән йөрөй. Бындағы бар саралар - уйындар уйнатыу, һынашмаҡ, мәҡәлдәр әйтеп ярышыу, йыр-бейеү өйрәтеү, төрлө осрашыуҙар бер маҡсатты күҙҙә тотоп ойоштороло: кескәйҙәр күңелендә туған телгә һөйөү, милли рух ҡунһын, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре уларҙың да көнитмешендә урын алһын. Был тәрбиә телдә генә түгел, ә төркөм урынлашҡан бүлмәнең биҙәлешендә, йыһаздарҙа, һауыт-һабаларҙа, ашаған ризыҡтарҙа, шөғөлдәребеҙҙә лә сағылыш таба. Бүлмәбеҙҙәге "Башҡорт мөйөшө" ситәндән үрелгән усаҡлыҡта урынлашҡан. Башҡорт тирмәһен хәтерләткән был мөйөшкә сигелгән таҫтамалдар, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме эленгән, һуғылған балаҫ, ҡорама һәм буй юрған йыйып ҡуйылған, түрҙә сәңгелдәк, һандыҡ урын алған. Ә һандыҡ эсенә өләсәйҙәрҙең күҙ нурҙарын түгеп эшләгән ҡул эштәре, бирнәлектәр һалынған. Был бүлмәлә шулай уҡ башҡорт халҡының рухи мираҫына, тарихына арналған китаптар, тематик папкалар ҙа бар. Балалар был мөйөштә булырға ярата, һәр әйбер менән ҡыҙыҡһына, тотоп ҡарай, һорауҙар бирә.

Был балаларҙың атаәсәһе менән генә түгел, бигерәк тә өләсәй һәм олатайҙар менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ, улар менән йыш ҡына осрашып, аҡыллы кәңәштәрен тыңлап, улар бала саҡта уйнап үҫкән, хәҙер инде онотолоп барған уйындарҙы бергәләп уйнайбыҙ. Олатай-өләсәйҙәр менән үткәрелгән "Иман нуры", "Өләсәйем кәңәштәре", "Кәңәшле эш тарҡалмаҫ", "Аталы бала - арҡалы, инәле бала - иркәле" тигән кисәләрҙең бала күңеленә изгелек орлоҡтары һалыуына шик юҡ. Сиратлап, һәр баланың олатай-өләсәһенең өйҙәренә барып, йырлап-бейеп, башҡа һөнәрҙәрен күрһәтеп ҡайтыу ҙа беҙҙең бәләкәй генә бер тәрбиәүи сарабыҙ. Китапҡа, гәзит-журналдарға ҡыҙыҡһыныу уятыу тураһында ла онотмайбыҙ. Быйыл, мәҫәлән, ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, тәүгеләрҙән булып "Аҡбуҙат" журналына яҙылып, редакцияның бүләгенә лә лайыҡ булдыҡ.

Республикала башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" конкурсы иғлан ителеүе тураһында ишеткәс тә, әсәй-өләсәйҙәрҙе йыйып, һөйләшеп, эшкә тотондоҡ һәм "Алтын ҡуллы өләсәй" байрамы үткәрергә әҙерләнә башланыҡ. Балалар ҙа, өләсәйҙәр ҙә был көндө мотлаҡ үҙҙәре теккән милли кейемдә килергә тейеш ине. Байрамға әҙерлек эштәрен дәррәү башлап ебәрҙек: башҡорт милли күлдәге, камзул тектек, иҙеү, ҡашмау әҙерләнек, ә малайҙарға түбәтәй сиктек. Шул тиклем матур килеп сыҡты был байрам. Милли кейемдә теҙелеп баҫып торған өләсәйҙәр менән ейәнсәрҙәргә һоҡланмау мөмкин түгел ине. Өләсәйҙәребеҙ оҫта беҙҙең: ҡул эштәре менән булышалар, милли ризыҡтар әҙерләйҙәр, буҙа ҡоялар. Улар барыһы ла ауылыбыҙҙың "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары. Ағинәйҙәребеҙ Айһылыу Хәсәнова, Рима Үҙәнбаева, Зөбәйҙә Үҙәнбаева, Нүрзиә Юлуева, Хибиҙә Теләүсинә, Яңылбикә Ғәбитова ауылда ғына түгел, районда үткән һәр сарала кескәй балалар менән бергә ҡатнашып, ҡайнап йәшәйҙәр, элекке йолаларыбыҙҙы тәүгеләрҙән булып тергеҙәләр. Әле яңыраҡ ҡына "Ҡот ҡайтарыу" йолаһын күрһәтеп, онотолоп барған аҫыл бер хазинабыҙҙы хәтергә төшөрҙөләр.

Милләтте һаҡлап ҡалабыҙ тиһәк, милләтебеҙ бишеге булған ауылдарҙы һаҡларға кәрәк. Ауылдарҙы һаҡлайыҡ, тиһәк, унда йәшәгән халыҡ та, уларҙың ситкә киткән балалары ла был изге эшкә үҙ өлөшөн индерергә тейеш, тип иҫәпләйбеҙ. Бына шуға ла тыуған ергә ылығыу, һөйөү орлоҡтарын һалырға тырышабыҙ ҙа инде ауылыбыҙҙың йәш граждандары күңеленә.

**Миңзәлә ҮҘӘНБАЕВА.**



УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Теләк аша сағылған Ижади көс

Ҡасан да булһа: эшем оҡшамай; күп көйәм; бер ваҡытта ла аҡсам күп булмаясаҡ; был кеше менән һыйыша алмайым; мин элекке кеүек әүҙем түгел; теләгән эшем менән шөғөлләнер өсөн һәр саҡ ваҡыт етмәй; бер һәләтем дә юҡ; мин камил түгелмен; нимә эшләһәм дә ябыға алмайым; яңы кешеләр менән танышлыҡ булдыра алмайым; бик йыш һалҡын алдырам; үҙемде насар тоям; исемдәрҙе хәтеремдә ҡалдыра алмайым, тигәнегеҙ булдымы? Әлбиттә, был исемлекте тағы әллә күпме дауам итергә булыр ине, әммә ошо өлөшө генә лә үҙебеҙҙе нисек итеп программалауыбыҙҙы асыҡ күрһәтә. Төпкө аң был кире бойороҡтарҙы тормошҡа ашырырға тейеш була, шуға күрә тормошобоҙҙа ауырыуҙар, ярлылыҡ, сикләүҙәр һәм уңышһыҙлыҡтар күп. Һеҙгә ауыҙығыҙҙы үлсәп асырға, һәр һүҙегеҙҙе уйлап әйтергә һәм кире раҫлауҙарҙы ыңғай көйләнгәндәре менән алмаштырырға, бының өсөн аңды ыңғай раҫлауҙар менән көйләргә кәрәк. Уларҙы аңығыҙ ысынбарлыҡ итеп ҡабул иткәнгә тиклем ҡабатлағыҙ. Әгәр, ауырыйым, тип раҫлауығыҙҙы дауам итһәгеҙ, аңығыҙға һеҙҙе сирле итеү талап ителә; әгәр сәләмәтмен, тиһәгеҙ, аңығыҙ сәләмәтләндереү өсөн тырышасаҡ. Бер ваҡытта ла ҡапма-ҡаршы хәл-торош тыуҙырмағыҙ, йәғни үҙегеҙгә, кәйефем шәп, тип, хәлегеҙҙе һораусынан үҙегеҙҙе йәлләтер өсөн генә, хәлем насар, тимәгеҙ. Бындай бер сиктән икенсеһенә бәргеләнеүҙәр аңды бутай һәм уны хаталандыра.

**Хис-тойғолар.** Хистәр - ижад двигателе. Бер генә ижади эш тә хистәрһеҙ тормошҡа ашмай. Аң хис-тойғо тәьҫиренә бирелә. Бер ниндәй хис-тойғоһоҙ ҡабатлау бер ниндәй һөҙөмтә лә бирмәй. Ҡурҡыу, хәүефләнеү, күңел ҡайтыу, көнләшеү, күрә алмаусылыҡ кеүек кире хис-тойғолар ыңғай кисерештәр кеүек үк йоғонто яһай. Бына ни өсөн улар үлемесле.

Ҡабатлауҙы ҡысҡырып һөйләү йәки музыка тирбәлеш йышлығын көсәйтә һәм мәғлүмәтте теркәү процесын тиҙләтә. Психологик тикшеренеүҙәр тап музыка йәки тауыш төпкө аңға теркәү процесын 85 процентҡа тиклем тиҙләтә икәнен күрһәтә.

**Визуалләштереү.** Күҙаллау йәки визуалләштереү - аңдың һүрәтләү көсө. Төпкө аң уй экранында һаҡланған образдарҙы һәм картиналарҙы хәтерендә ҡалдыра. Йәғни төпкө аң - тормошоғоҙҙо төҙөүсе подрядсы тиергә мөмкин. Һеҙ - архитектор, ә күҙаллауығыҙ - һыҙма. Төп ролдә үҙегеҙ булған хыялдағы киноны бер туҡтауһыҙ әйләндерәһегеҙ. Был образдар тәртибегеҙҙе, алып барған тормош рәүешен билдәләй. Һеҙ уйығыҙҙа яңы тормош төҙөй, үҙегеҙ визуалләштергән бөтөн нәмәне ала алаһығыҙ. Әгәр теләгегеҙҙе тормошҡа ашҡан тип күрә алһағыҙ, ул үҙенән-үҙе тормошҡа тормошҡа ашасаҡ күрәҙәлеккә әйләнә. Уйығыҙҙа нимә уйлайһығыҙ һәм һүрәтләйһегеҙ, шул киләсәккә аныҡ күрһәтмә булып тора. Шулай икән, ни өсөн һеҙгә үҙегеҙ булырға теләгән кеше, теләгән эш, теләгән нәмә тураһында хыялланмаҫҡа? Үҙегеҙҙең шуның менән нисек ҡәнәғәтлек кисергәнегеҙҙе тойоғоҙ. Бөтөн деталдәрҙе һүрәтләгеҙ - төҫтәрҙе, еҫтәрҙе, урынды, кешеләрҙе - мөмкин тиклем сағыуыраҡ итегеҙ. Иң мөһиме - һәр образда мотлаҡ һеҙ булырға тейешһегеҙ. Блокнот алып, уны "Яҙмышым планы" тип билдәләгеҙ. Уға үҙегеҙҙә булыуын теләгән нәмәләрҙең, әйберҙәрҙең, урындарҙың, шөғөлдәрҙең һ.б. фотоларын йәки картиналарын йәбештерегеҙ. Уларҙы көн һайын ҡарағыҙ һәм аңығыҙға тәрәнерәк үтеп инеүенә рөхсәт бирегеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 8 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 08.00 "Доброе утро".
05.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
09.00 Новости.
09.05 "Женский журнал".
09.20 "Жить здорово!" (12+).
10.15 "Модный приговор".
11.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
12.55 "Лестница в небеса". Драматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Лестница в небеса". Продолжение сериала (16+).
16.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.10 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
1830 "Давай поженимся!" (16+).
19.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Гандбол. Женщины. Сборная России - сборная Франции. Прямой эфир.
21.00 "Время".
21.30 "Красавица". Драматический сериал (12+).
23.35 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Покушение". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Узнай меня, если сможешь". 17-20-я серии. Криминальный сериал (12+).
00.45 "Возьми меня с собой". Сериал (16+).
02.45 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык" (0+).**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30 "Борсаҡ" (0+).**
**10.45 "Родительский контроль" (12+).**
**11.00 Новости недели (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Квадратный метр" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Личность" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.00 "Интервью".**
**19.15 "Ай кызы". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Опочтарение". Сериал (16+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Чокнутый профессор". Худ. фильм (12+).**
**01.30 М.Карим. "Долгое-долгое детство" (12+).**

## 9 АВГУСТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Женский журнал".
09.20 "Жить здорово!" (12+).
10.15 "Модный приговор".
11.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
12.55 "Лестница в небеса". Драматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.45 "Мужское/Женское" (16+).
16.35 "Наедине со всеми" (16+).
17.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Волейбол. Мужчины. Сборная России - сборная Аргентины. Прямой эфир.
19.00 "Давай поженимся!" (16+).
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красавица". Сериал (12+).
23.35 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
02.00, 03.05 "Лицо любви". Мелодрама (16+).
03.00 Новости.
03.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Истинные ценности". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Узнай меня, если сможешь". Криминальный сериал (12+).
00.45 "Возьми меня с собой". Сериал (12+).
02.45 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 18.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Физра" (6+).**
**10.45 "Деревенская комедия". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости.**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Ай кызы". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Опочтарение". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Белый слон". Худ. фильм.**
**01.30 Т.Миннуллин. "Встреча с молодостью" (12+).**

## 10 АВГУСТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 08.00 "Доброе утро".
05.45 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
09.00 Новости.
09.05 "Женский журнал".
09.15 "Жить здорово!" (12+).
10.15 "Модный приговор".
11.10 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
12.55 "Лестница в небеса". Драматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красавица". Сериал (12+).
23.35 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
03.00 Новости.
03.05 "Оптом дешевле". Комедия.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.15 "Утро России".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Операция "Доктор". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Узнай меня, если сможешь". 25-28 серии. Криминальный сериал (12+).
00.45 "Возьми меня с собой". Сериал (12+).
02.45 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Деревенская комедия". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости.**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Квадратный метр" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.15 "Ай кызы". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Повелители дорог" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бандиты". Худ. фильм.**
**02.00 И.Юмагулов. "Резной трон" (12+).**

## 11 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 08.00 "Доброе утро".
06.30 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
09.00 Новости.
09.05 "Женский журнал".
09.20 "Жить здорово!" (12+).
10.15 "Модный приговор".
11.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
12.55 "Лестница в небеса". Драматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Лестница в небеса". Драматический сериал (16+).
16.15 "Наедине со всеми" (16+).
17.15 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
18.55 "Давай поженимся!" (16+).
19.55 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красавица". Драматический сериал (12+).
23.35 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
02.30, 03.05 "Оптом дешевле-2". Комедия (12+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Работа над ошибками". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Узнай меня, если сможешь". 29-32, заключительная, серии. Криминальный сериал (12+).
00.45 "Возьми меня с собой". Сериал (12+).
02.45 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45, 17.15, 18.00, 20.15 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30 "Преград.net" (6+).**
**10.45 "Усмирение клинка" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Яйляу" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Будьте как дома" (16+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Ай кызы". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Автограф" (12+).**
**21.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00, 04.00 "Граф Монте-Кристо". Худ. фильм.**
**02.00 А.Папаян "Оставайтесь солнцем" (12+).**
**06.30 "Мелодии души" (12+).**

## 12 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 08.00 "Доброе утро".
06.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
09.00 Новости.
09.05 "Женский журнал" (12+).
09.20 "Жить здорово!" (12+).
10.15 "Модный приговор".
11.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
12.55 "Лестница в небеса". Драматический сериал (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Три аккорда" (16+).
23.25 "КВН" Премьер-лига (16+).
01.00 "Суп". Комедия (16+).
03.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". "Поедем, красотка, кататься". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Местное время. Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина" (12+).
22.55 "Ночной гость". Мелодрама (12+).
00.55 "Возьми меня с собой". Сериал (12+).
02.55 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.45 "Усмирение клинка" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Автограф" (12+).**
**12.45 Гала-концерт Республиканского конкурса кураистов им.Ю.Исянбаева (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости.**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.30 "Каникулы НЕстрогого режима" (0+).**
**15.45 "Теория заговора" (12+).**
**16.45 "Вся Уфа" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.15 "Ай кызы". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Служили два товарища" (6+).**
**01.30 Х.Иргалин. "Вой волчицы" (12+).**

## 13 АВГУСТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00, 10.00 Новости.
06.50 "Охотники за головами". Сериал (16+).
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.10 "Непутевые заметки".
10.20 "Смак" (12+).
11.00 "Идеальный ремонт".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15, 00.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "На 10 лет моложе" (16+).
16.05 "Фидель Кастро. "Куба - любовь моя" (12+).
17.10 "Кто хочет стать миллионером?"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Водное поло. Женщины. Сборная России - сборная Италии. Прямой эфир.
19.20 Концерт Валерии в "Альберт-Холле" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро. Волейбол. Мужчины. Сборная России - сборная Польши.
02.30 "Город грехов-2: Женщина, ради которой стоит убивать". Боевик (16+).
04.20 "Жажда странствий". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

07.20 "Вся Россия".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Сто к одному".
10.05 "Личное. Дмитрий Дюжев" (12+).
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Примета на счастье". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Удар зодиака". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.30 "Поздние цветы". Сериал (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Поздние цветы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
22.55 "Танковый биатлон". Прямая трансляция.
00.25 "Мама поневоле". Мелодрама (12+).
02.25 XXXI летние Олимпийские игры в Ри-де-Жанейро.

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Переполох в Гималаях" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00, 20.45 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Семь чудес Башкортостана" (12+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 М.Кунафин. "Рай божий предполагает" (12+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**21.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 02.00 Новости недели.**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**01.45 "Родительский контроль" (12+).**

## 14 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
07.20 Новости.
07.30 "Охотники за головами". Сериал (16+).
09.25 "Армейский магазин".
10.00 Новости.
10.10 "Непутевые заметки".
10.25 "Микаэл Таривердиев. Игра с судьбой" (12+).
11.30 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
14.00 "Вместе с дельфинами".
15.55 "Угадай мелодию".
16.30 "Надежда Румянцева. Одна из девчат". Док. фильм.
17.30 "Королева бензоколонки". Худ. фильм.
19.00 На XXXI летних Олимпийских играх в Рио-де-Жанейро.
21.00 "Время".
21.30 "Голосящий Кивин". Музыкальный фестиваль (16+).
00.40 "Микаэл Таривердиев. Игра с судьбой". К юбилею композитора (12+).
01.45 Музыкальный вечер Микаэла Таривердиев.
03.15 "Современные проблемы". Комедия.

### РОССИЯ 1

07.30 "Вся Россия".
08.05 "Танковый биатлон".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Судьба Марии". Худ. фильм (12+).
16.15 "Ненавижу и люблю!". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
22.00 "За чужие грехи". Мелодрама (12+).
24.00 "Нарочно не придумаешь". Мелодрама (12+).
02.00 XXXI летние Олимпийские игры в Рио-де-Жанейро

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Будьте как дома" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30, 15.00 "Учим башкирский язык" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Газпром трансгаз Уфа" (12+).**
**16.45 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Н.Гаитбаев. "Весело живем" (12+).**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.30"ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**19.45 "Старики-разбойники". Худ. фильм (0+).**
**21.30 Новости недели (на русск. яз).**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Свидание с джазом" (12+).**

*✓ Сөйәл үләне - ағыулы үҫемлек! Уға бик иғтибарлы булырға һәм ҡулланыр алдынан мотлаҡ дауалаусы табибығыҙ менән кәңәшләшергә кәрәк. Дауалана башлайһығыҙ икән, уның ниндәй ваҡытта ярамағанлығы тураһында уҡығыҙ.*



ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

**Был күп йыллыҡ үҫемлек майҙан августҡа тиклем сәскә ата. Әрһеҙ, бөтөн ерҙә, бигерәк тә ҡойма эргәһендә үҫә, тиҙ тарала һәм шуға ла сүп үләне тигән даны сыҡҡан. Баҡсасылар уны ҡоротҡостарға ҡаршы файҙалана. Уны ҡулланғанда бик һаҡ булырға кәрәк, сөнки үҫемлектең һәр өлөшө ағыулы.**

# СӨЙӘЛ ҮЛӘНЕ

Шулай ҙа файҙалы һәм дауалау сифаттары ла бик күп.

Рәсми атамаһы "чистотел" булһа ла, халыҡта ул сөйәл үләне тип йөрөтөлә, сөнки борон-борондан һуты менән сөйәлдәрҙе бөтөргәндәр, тирене таҙартҡандар. Тағы ла уны рус женьшене тип тә атайҙар, сөнки ул сәләмәтлекте тергеҙергә һәм теләһә ниндәй сирҙән ҡотолорға ярҙам итә.

Үҫемлектең бөтөн өлөшө лә ағыулы ла, шул уҡ ваҡытта шифалы ла. Үләнде сәскә атҡан мәлдә әҙерләйҙәр, киптерәләр һәм төнәтмәләр эшләү өсөн файҙаланалар.

**Химик составы.** Сөйәл үләненең составында алколоидтар, флавоноидтар, сапониндар, ыҫмала һәм дуплаусы матдәләр, әселек бар, сөнки унда органик кислоталар - лимон, алма, гәрәбә, А һәм С витаминдары, эфир майҙары һәм орлоҡтарында ҡуйы майҙар табылған. Ағыулы матдәләре бактерияларҙы һәм ауырыу тыуҙырыусы микроорганизмдарҙы юҡ итә.

**Дауалау сифаттары һәм ҡулланыу.** Сөйәл үләне, файҙалы матдәләргә бай, дауалау сифаттарына эйә булғанлыҡтан, медицинала ла киң ҡулланыла. Хатта уның атамаһы уҡ тире проблемаларын хәл итеүгә ишаралай. Үҫемлектең һуты сөйәлдәрҙе, һытҡыларҙы, эренле шештәрҙе, ороларҙы бөтөрә, бәшмәк ауырыуҙары менән көрәшә, герпесты, экземаны, ҡысынманы дауалай, ҡырынғандан һуң ялҡынһыныуҙы кәметә, бешкәндә йәки яраланғанда хәлторошто еңеләйтә. Шулай уҡ уның һуты менән ҡул һәм аяҡ тиреһе ярылғанда яраларҙы һөртәләр, һипкелдәрҙе һәм пигмент таптарын бөтөрәләр.

Чистотел нигеҙендә яман шешкә ҡаршы дарыуҙар, кремдар, майҙар, төнәтмәләр эшләнә. Ул ялҡынһыныуға, микробҡа, шешкә ҡаршы тора, үт, бәүел ҡыуҙыра, киҫкен ҡыҫылыуҙы (спазм) бөтөрә. Яраларҙы уңалта, ауыртыуҙы, ҡояшта һәм термик бешеүҙән һуң тәндең яныуын һәм ҡысыуын баҫа.

Киҙеү, ангина, гайморит ваҡытында елһенеү процестары менән көрәшә һәм хәлде еңеләйтә, йөтҡолоҡ өҫтөн таҙарта, теш ҡаҙнаһын ныҒыта. Сөйәл үләненән эшләнгән препараттар ярҙамында ҡурылдай астмаһын, лейкозды, гипертонияны, стенокардияны, атеросклерозды, шулай уҡ эске ағзалар сирҙәрен - бауыр, бөйөр, үт ҡыуығы, ашҡаҙан аҫты биҙен дауалайҙар. Уны үпкә туберкулезы ваҡытында файҙаланалар һәм ашҡаҙан-эсәк трактын дауалауҙа, гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге, ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуҙары, фиброма, геморрой ваҡытында файҙаланалар.

Сөйәл үләнен аҙ миҡдарҙа ҡулланыу артериаль ҡан баҫымын төшөрә, йөрәк эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай, нервы системаһын тынысландыра, невроз, фалиж һәм ҡорошҡаҡ ваҡытында хәлде еңеләйтә. Ревматизм һәм быуындарға тоҙ ултырғанда ауыртыныуҙы бөтөрөргә ярҙам итә. Йыуан эсәк, күкәйлектәр һәм һөт биҙҙәре яман шеше ауырыуҙарын башланғыс стадияла дауалағанда ыңғай йоғонто яһай, метастазалар таралыуҙы һәм яңы шеш күҙәнәктәре үҫеүҙе туҡтата.

Был үҫемлек косметика сәнәғәтендә лә ҡулланыла. Уны һабындарға, шампундәргә, сәсте сайҡатыу ҡулланмаларына ҡушалар, бит, ҡул, аяҡ тиреһен тәрбиәләүсе кремдар, майҙарға, гелдәр, косметик майҙар, бальзамдар эшләйҙәр.

**Сөйәл үләне менән дауаланыуҙың халыҡ ысулдары.** Халыҡ дауалаусылары сөйәл үләненең көсһөҙ төнәтмәләренән башларға һәм уларҙы ҡулланғанда, организмға токсик йоғонтоно кәметер өсөн, әсегән һөт продукттары, һөт ҡулланырға тәҡдим итә.

**Чистотел һуты менән дауалау.** Эшләү рецебы: яңы йыйылған үләнде йыуып, ит турағыс аша үткәрергә, һутын һығып алырға һәм боролмалы ҡапҡаслы һауытҡа һалырға. Һалҡын урынға, әммә һыуытҡысҡа түгел, ҡуйып, әсетергә, даими рәүештә ҡапҡасын асып, газын сығарып торорға. Бер аҙнанан һут ҡулланыуға әҙер.

**Батша ысулы буйынса сөйәл үләне һуты менән дауаланыу.** 1 тамсы һутты 50-100 мл һыуға тамыҙып, яҡшы итеп болғатырға һәм эсергә. Һәр көн һуттың дозаһын арттыра барып, 20 көндә 20 тамсыға еткерергә, һуңынан һәр көн кәметергә. Бер тамсыға ҡалғас, 10 көн ял итергә. Дауаланыуҙы өс айға тиклем дауам итергә. Был ысул менән бик күп сирҙәрҙән арынырға мөмкин. Профилактика өсөн процедураны йылына бер тапҡыр эшләргә кәрәк.

**Ангина, пародонтоз сирҙәре һәм теш һыҙлауы.** 1 сәй ҡалағы һутты ярты стакан һыуға ҡушып, тамаҡты һәм ауыҙ ҡыуышлығын көнөнә өс тапҡыр сайҡарға.

**Киҙеү, гайморит, танау эсендә полиптар (лайлалы тиресә эсендәге шеш) булғанда.** 2 тамсы һутты тәүҙә бер танауға, 5 минуттан һуң икенсеһенә тамыҙырға.

**Йыуан эсәктә полиптар булғанда.** 5-7 тамсы һутты 50 мл ҡайнап һыуытылған һыу менән шыйыҡларға һәм клизма эшләргә.

**Псориазды дауалағанда.** Чистотел һутын псориаз булған урындарға 25 минут дауамында һөртөргә, 5 минут ял итеп алғандан һуң, процедураны тағы ҡабатларға. Шулай 5 тапҡыр эшләгәндән һуң, һыу менән йыуырға. Бындай процедураны ял менән аралаштырып 2-3 тапҡыр эшләргә.

**Төнәтмәләрҙе үләнде йыйып алғас та йәки киптергәс тә эшләйҙәр.** Яңы йыйылған сөйәл үләнен яҡшылап йыуғас, уны ярты литрлыҡ банкаға һалып, ҡайнар һыу ҡоялар. 4 сәғәт ултыртҡас, һарҡытырға кәрәк. Ашар алдынан көнөнә өс тапҡыр 100 мл эсергә. Дауаланыу курсы - 7 көн. Һуңынан 2 көн ял итергә һәм дауаланыуҙы артабан дауам итергә.

**Молочница булғанда.** 1 ҡалаҡ ваҡланған үләнгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 3 минут һүрән утта ҡайнатырға, һуңынан бер сәғәткә ултыртып ҡуйырға. Һарҡытып, сайҡатыу өсөн ҡулланырға.

**Бауыр ауыртҡанда.** Сөйәл үләне төнәтмәһен көнөнә бер аш ҡалағы миҡдарында һәр көн иртән һәм кисен ас ҡарынға эсергә.

**Эсәктәрҙә полип булғанда.** Бер ҡалаҡ ваҡланған үләнде ике стакан ҡайнар һыу һалып биш сәғәт дауамында бешекләргә. Һуңынан һарҡытып, аш алдынан ярты сәғәт элек өс тапҡыр бер балғалаҡтан башлап, дозаны арттыра барып, бер аш ҡалағына еткәнсе 10 көн эсергә. Һуңынан 10 көн ял һәм дауаланыуҙы тағы ла ике тапҡыр ҡабатларға.

**Үпкә туберкулезынан һәм инфаркттан һуң.** Бер ҡалаҡ ваҡланған үләнде бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә, һуңынан һарҡытырға. 21 дауамында көнөнә өс тапҡыр берәр аш ҡалағы төнәтмәне эсергә. 10 көн ял иткәндән һуң дауаланыу курсын дауам итергә.

**Эске ағзаларҙың яман шеше ваҡытында.** 1 ҡалаҡ ваҡланған сөйәл үләнен бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста сәғәт ярым төнәтергә. Ашарҙан 20-30 минут алда көнөнә өс тапҡыр 1-2 аш ҡалағы эсергә.

**Яман шеш матастазалары таралыуға ҡаршы.** Сөйәл үләне, календула, кесерткәнде бер тигеҙ өлөштә болғарға. Ҡатнашманан 1 аш ҡалағы үлән алып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Термоста ике сәғәт төнәткәндән һуң, һарҡытып, көн һайын ашарҙан 20-30 минат элек көн һайын ярты стакан эсергә.

**Сөйәл үләненән эшләнгән май** (мазь) ярҙамында сөйәлде, ороно бөтөрәләр, тире ауырыуҙары - псориаз, диатез, экземаны, шулай уҡ тиренең яман шеше ауырыуҙарын дауалайҙар, косметик маҡсатта һипкелдәрҙе һәм пигмент таптарына һөртәләр. Майҙы дарыухананан алырға мөмкин, шулай ҙа өй шарттарында эшләнгәне яҡшыраҡ.

**1-се рецепт.** Сөйәл үләненең яңы ғына һығылған һутын бер өлөш итеп алып, уны 4 өлөш вазелин менән болғарға һәм тәғәйенләнеше буйынса ҡулланырға.

**2-се рецепт.** Киптерелгән үләнде онтаҡҡа әйләнгәнсе ваҡларға, 1 аш ҡалағы онтаҡты 4 аш ҡалағы вазелеин менән бер төрлө масса килеп сыҡҡансы болғарға.

**3-сө рецепт.** 2 аш ҡалағы үләнде 100 мл һыу һалып талғын утта күләме ике тапҡырға кәмегәнсе ҡайнатырға. Һарҡытып, тигеҙ миҡдарҙа дымландырыусы крем ҡушып болғарға. Майҙы һыуытҡыста ике йыл һаҡларға мөмкин.

**Сөйәл үләненән май.** Сөйәл үләне майы тире ауырыуҙарын, герпесты дауалай, яраларҙы, ҡырҡылған, бешкән урындарҙы уңалтырға ярҙам итә. Һытҡыларҙы, фурункулдарҙы, пигмент таптарын һәм һипкелдәрҙе һәм сөйәлдәрҙе бөтөрөү өсөн ҡулланыла. Шулай уҡ тиренең шыраулаaныуын, ҡысыуын, ауыртыуын бөтөрә. Дарыуханала ла һатыла, өйҙә лә эшләргә мөмкин.

**Май эшләү рецебы.** 500 г яңы ғына өҙөлгән сөйәл үләнен ваҡлап, 100 мл һыу ваннаһында йылытылған көнбағыш йәки зәйтүн майы ҡушырға, һуңынан таҫтамал менән урап, йылы урында сәғәт самаһы тоторға. Артабан ҡараңғы урынға ҡуйып ике аҙна төнәтергә, даими болғатып торорға, ике аҙнанан һуң һығып алырға һәм һарҡытырға.

**Тамырҙарынан май.** Яңы ғына ҡаҙып алынған тамырҙарҙы яҡшылап йыуырға, ваҡларға һәм һыу ваннаһында йылытылған көнбағыш майы ҡушып, ике аҙна төнәтергә һәм һығып алып, һарҡытырға кәрәк.

**Һытҡыны май ярҙамында дауалау.** Майҙы һытҡыларға һөртөп, 10-15 минут торорға, һуңынан майҙың артығын салфетҡаға һеңдереп алырға. Был процедураны иртән һәм кисен эшләйҙәр.

**Ҡулланыу тыйыла!** Сөйәл үләне, әйтеп үтеүебеҙсә, ағыулы үҫемлек! Уға бик иғтибарлы булырға һәм ҡулланыр алдынан мотлаҡ дауалаусы табибығыҙ менән кәңәшләшергә кәрәк! Дауалана башлайһығыҙ икән, уның ниндәй ваҡытта ярамағанлығы тураһында уҡығыҙ, ҡәтғи рәүештә дозаны һәм дауалау оҙайлығын үтәгеҙ, дауаланыу араһында ял итеп алығыҙ. Сөйәл үләне менән дауаланыу эпилепсия ваҡытында, ауырлы ҡатындарға һәм имеҙеүсе әсәләргә, өс йәшкә тиклемге балаларға, чистотел килешмәгән осраҡта ярамай. Неврологик сирҙәр, ҡурылдай астмаһы һәм стенокардия сирҙәренә ҡарата бик һаҡ һәм табип күҙәтеүе аҫтында ғына ҡулланырға кәрәк.

Сөйәл үләне препараттары менән оҙайлы дауаланыу йәки уларҙы артыҡ ҡулланыу эске ағзаларҙың лайлалы тиресәһенә кире йоғонто яһауы һәм эсәктәрҙең дисбактериозына килтереүе, шулай уҡ организмдың ағыуланыуына (күңел уйнай, ҡоҫтора, ҡорошҡаҡ тарта, иҫ юғала, баш әйләнә, галлюцинациялар күҙәтелә) килтереүе мөмкин. Шуға күрә, ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигәндәй, тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: кәңәштәрҙең ҡайһыһын булһа ла үтәп ҡарарҙан алда, мотлаҡ табип менән кәңәшләшергә кәрәклеген онотмағыҙ!

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Август (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (5) дүшәмбе | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 19:31 | 21:01 | 22:31 |
| 9 (6) шишәмбе | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 19:29 | 20:59 | 22:29 |
| 10 (7) шаршамбы | 4:14 | 5:44 | 13:30 | 19:27 | 20:57 | 22:27 |
| 11 (8) кесе йома | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:25 | 20:55 | 22:25 |
| 12 (9) йома | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 13 (10) шәмбе | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 19:20 | 20:50 | 22:20 |
| 14 (11) йәкшәмбе | 4:22 | 5:52 | 13:30 | 19:18 | 20:48 | 22:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе дуҫыбыҙ

**Дәүләтшин Ғүмәр Ишбулды улын**
**60 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ!**

Оҙаҡ йылдар юл төҙөлөшө мастеры булып эшләгән хеҙмәт ҡаһарманы итеп кенә түгел, ә һәүәҫкәр рәссам булараҡ та беләләр уны районда. Ауыр эш көнөнән һуң ул мотлаҡ үҙенең буяуҙарына тотонор, тыуған яҡтың матур тәбиғәтен, шулай уҡ урман, йорт кейектәрен һүрәтләр, картиналары йә үҙенең йорт стенаһынан урын алыр, йә яҡындарына, дуҫтарына бүләк булып күсер. Дуҫыбыҙҙың матурлыҡ донъяһында йәшәргә ынтылышын төшөргән һүрәттәре аша ғына түгел, ә уның үҙ ҡулдары менән төҙөгән йортонда ла, әллә күпме сәскәләр, еләк-емештәр үҫкән баҡсаһында ла, зауыҡ менән биҙәлгән ихатаһында ла тойомларға мөмкин. Һоҡланғыс кеше, тоғро тормош иптәше, хәстәрлекле атай, олатай ул Ғүмәр Ишбулды улы. Уға ныҡлы һаулыҡ, ижад ҡомары, оҙон-оҙаҡ йылдар шулай бәхетле ир, атай, олатай булып йәшәүен теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән Өфөлә йәшәүсе дуҫтары.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге йәйләп үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**

1. **"Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
2. **М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
3. **Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
4. **Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
5. **Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
6. **Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙары**
7. **Зәйнәб Биишева "Яҡтыға" трилогияһы**
8. **Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**

**"Башҡорт китабы топ-100" акцияһына ҡушылып, һәр башҡорт уҡырға тейешле китаптар араһына Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабын индерергә тәдим итеүсе гәзит уҡыусыларыбыҙҙың береһе - Ишембай районының имам-мөхтәсибе Ильшат Хафизов:**

- Бөгөн беҙ боронғо әҙәби әҫәрҙәрҙе, тарихи китаптарҙы шул осорҙа йәшәгән кешеләрҙең тормош-көнкүреше, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, мәҙәниәте, рухи ҡиммәттәре ниндәй булған, нисек үҙгәргән икәнен белеү өсөн дә уҡыйбыҙ. Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабы башҡорт кешеһенең йәшәйешен сағылдырыуы, тарихи мәғлүмәттәргә бай булыуы менән дә ҡыҙыҡлы. "Хәтирәләр"ҙең мәғлүмәттән тыш, тәрбиәүи әһәмиәте лә ҙур. Мине бер Көҙән ауылында ғына биш мәсет, Үтәк ауылында ете мәсет булыуы тураһында яҙылған юлдар аптыратты. Әлбиттә, ул заманда мәсеттәр мәктәп ролен дә үтәгән, ләкин бәләкәй ауылдарҙа ла ошо тиклем мәсеттәр күп төҙөләүенә барыбер хайран ҡалырлыҡ. Сөнки хәҙер ауыл түгел, хатта ҡала ерендә лә бер мәсет булһа, икенсеһен төҙөүҙә шик аҫтына ҡуйып, кәрәкме ул, кәрәкмәйме, тигән һорауға асыҡлыҡ индерәләр.

Ғөмүмән, "Хәтирәләр" китабында башҡорт халҡының социаль-иҡтисади хәле лә сағылыш тапҡан. Бесән эшләгәндә өмәселәргә нисә баш мал һуйылыуына тиклем мәғлүмәттәр килтерелгән. Ул осорҙа халыҡ әлеге кеүек бер эш хаҡына ғына ҡарап ултырмаған, етеш тормош көткән, һәр кемдең үҙенең айырым эше булған. "Хәтирәләр" китабы бигерәк тә йәштәр өсөн фәһемле тип уйлайым. Үҙем был китапты уҡып, вәғәз итеп һөйләрлек бик күп файҙалы мәғлүмәттәр ҙә таптым.

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

ВИКТОРИНА



# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Наил Ғәйетбайҙың "Сит планета ҡыҙы" ("Кара ҡумта" ) мажаралы-фантастик романы буйынса һорауҙар.**

**1. Повестағы төп герой Батыр, ваҡыт машинаһына ултырғас, иң тәүҙә ниндәй хыялын тормошҡа ашырыу теләге менән яна?**
а) дуҫы Хәлит менән икеһенең бала сағына әйләнеп ҡайтыу;
б) әсәһен үлемдән ҡотҡарыу;
в) Ергә насар ниәт менән килгән сит планета кешеләрен кире бороу.

**2. Әмиләнең атаһының исемен атағыҙ.**
а) Лайон;
б) Дукас;
в) Баро.

**3. Батыр, Хәлит һәм Әмилә ниндәй "йәш" планетаға барып эләгә?**
а) Марс;
б) Ур;
б) Золо.

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем ошо һорауҙарға дөрөҫ яуаптар табып, тиҙ арала редакцияға шылтыратып әйтә, шуға Наил Ғәйетбай автографлы "Сит планета ҡыҙы" китаптарын бүләк итә. Үткән һандағы уйын йомғаҡтарына килгәндә, Ринат Камал бүләген еңеүсебеҙ - Әбйәлил районы Красная Башкирия ауылынан Рәйсә Аҫылғужинаға тапшырасаҡ.**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ҺҮҘЛЕК



# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Юл япрағы** - подорожник средний
**Юшан** - вероника весенняя
**Яҙ йондоҙо** - хохлатка
**Ялан еркәүеге, ураҙ уты** - лабазник шестилепестный
**Ялан ҡарамаһы** - берест, карагач
**Ялан һөтләгәне** - молочай степной
**Ялман ҡолаҡ** - лебеда бородавчатая
**Яр үләне** - осока береговая
**Ялбыр боланут** - кипрей мохнатый
**Ялбыр ҡылған, ата ҡылған** - ковыль волосатик, тырса
**Ялбыр петрушка** - петрушка курчавая
**Яҫмыҡ борсаҡ** - чечевица

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**
**(Аҙағы).**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# ЙЫЛЫ ҺҮҘ...

## күңелгә танһыҡ

- Тәмле аш ашҡаҙанға, йылы һүҙ күңелгә танһыҡ.
- Эреләнһәң йәшлекте, ваҡланырһың ҡартлыкта.
- Тылҡанғын килмәһә, эшеңде ерене еткер.
- Һарандан йомош һораһаң, илай, байҙан һораһаң, юҡлыҡтан зарлана башлай.
- Быҫраҡ ерҙә себен, ашлы өйҙә "ҡунаҡ" күбәйә.
- Ағас тамыры, кеше аҡылы менән көслө.
- Шатлыҡ йәнде ағарта, ҡайғы йөҙҙө һарғайта.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХӨРЛӨККӘ СЫҘАМАҒАН...

## хурлыҡҡа тарыған

Үҙеңдән бер көн элек тыуғандан аҡыл һора.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле)**

Донъялағы иң яҡшы реформа - үҙ-үҙеңдән башланғаны.

**(Ману).**

Һынауҙар йөғөнтөһөндә лә үҙгәрмәгән холоҡ бер тин дә тормай.

**(Генри Джеймс).**

Ҡайһы берәүҙәр сәхнәнән төшһә лә битлеген һалырға онота.

**(Станислав Лец).**

Ғүмер ул тиклем дә ҡыҫҡа түгел, һәр хәлдә, изгелекле булырға өйрәнеүгә генә етә.

**(Ральф Эмерсон).**

Ҡартлыҡта ла бәхетле булып була. Кем дә кем матурлыҡты күреү һәләтен ғүмер ахырына тиклем һаҡлай ала, ул бәхетле.

**(Франц Кафка).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бай кешенең бәләкәй яҫы танаулы ҡыҙы була. Атаһы уны кейәүгә бирергә теләй. Байлығына ҡыҙып, өйгә төрлө яҡтан кейәүҙәр ағыла, әммә улар ҡыҙҙың йәмһеҙ танауын күрәләр ҙә, кире китәләр. Атай кеше сығырынан сыға, шунан ҡыҙына өйләнгән кешегә бик ҙур байлыҡ вәғәҙә итә. Ҡоскә бер егетте табып, ҡыҙға өйләндерәләр. Ҡыҙ ҙа, уның кейәүе лә дини кеше була, шуға ла улар туйҙан һуң хажға барырға булалар. Йәштәр нисек кенә бай булмаһын, үҙҙәрен бәхетле итеп тоймайҙар. Йәш ҡатын барыһының да уның танауынан көлгәнен һиҙеп тора. Уның ғазапланғанын күреп, бер дин әһеле уға: "Һинең танауыңды бары тик һине яралтҡан ғына төҙәтә ала, Уға доға ҡыл", - ти. Ҡатын иренә тауҙарға китеп, Хоҙайға ялбарайыҡ, доғалар ҡылайыҡ, тип тәҡдим итә. Ире ризалаша. Бына улар икәүҙән-икәү генә тауҙар араһына килеп урынлашалар. Ҡатын көн-төн доғалар уҡый, Хоҙайҙан уны тыңлауын ялбара. Хоҙай, ысынлап та, ҡатын эргәһенә килә һәм уның ни теләүен һорай. "Миңә бүләк итеп ҙур танау бир", - ти ҡатын. "Ярай, шулай булһын", - ти Хоҙай һәм ҡатындың үтенесен үтәй. Ҡатын көҙгөгә ҡараһа, танауының элеккегә ҡарағанда ла йәмһеҙерәк һәм бик ҙур булыуын күрә. Ул тағы ла доғалар уҡый һәм Хоҙайға ялбара башлай. Хоҙай тағы килә һәм нимә кәрәклеген һорай. "Был тиклем ҙур танау кәрәкмәй миңә", - ти ҡатын. "Ярай, һинеңсә булыр", - ти Хоҙай һәм уның үтенесен ҡәнәғәтләндерә. Ҡатын көҙгөгә ҡараһа, уның танауы бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан...**

**Булғаны менән ҡәнәғәтләнә белергә кәрәк шул".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1383/08